ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 март (буранай) 2024

№11 (1104)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы дуҫтарыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 873 һум 12 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә 1 апрелдән, ғәҙәттәгесә, почта хаҡтарҙы тағы арттырасаҡ икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Башҡорт аҙымы



4-5

Йөрәкле егеттәр...

боҙло һыуға ла, ут эсенә лә инә ала



6

Сит илдәргә сығып ғибрәт ал да...

тыуған Башҡортостаныңа йәшәргә ҡайт



8-9

Рус фамилиялы милләттәш



11

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Бөгөн балалар китап уҡыймы? Улар өсөн беҙҙә ниндәй китаптар нәшер ителә?



***Искәндәр РӘХМӘТУЛЛИН, педагогия ветераны, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Дөрөҫөн генә әйткәндә, бөгөн балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә китап уҡымай, тиергә булалыр. Балалар, бигерәк тә өлкән класс уҡыусылары, башҡорт һәм рус әҙәбиәтенән имтихан тапшырыр өсөн генә уҡыу программаһына ингән әҫәрҙәр уҡыйҙыр, бәлки. Икенсе яҡтан, балаларҙың китап уҡырға ынтылыуы ата-әсә өлгөһөнә лә, әҙәбиәт уҡытыусыларының үҙ фәненә генә түгел, ғөмүмән, милли һәм донъя әҙәбиәтенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра алыуына ла бәйле бит.

Йәнә лә беҙҙә китапханаларҙың да ябылғаны юҡ, киреһенсә, һуңғы йылдарҙа хатта ауыл ерҙәрендә лә модель китапханалар артты. Ә нимә ул модель китапхана? Быны мин дә белә алмай йөрөй инем, район үҙәк китапханаһына барғанда һорай ҡуйҙым һәм миңә унын нимә икәнен аңлатып бирҙеләр. Был, тимәк, китап уҡыусылар өсөн өҫтәмә белем усағы, тигән һүҙ. Унда шуның өсөн дә бөтөн йәки өлөшләтә (ауылдарҙа, мәҫәлән) уңайлыҡтар (китап фонды байытыла, учреждениеның дизайны камиллаштырыла, мәғлүмәти - техник саралар алдырыла һ.б.) булдырыла. Тимәк, йәш быуынды китап уҡырға йәлеп итеү китапханасыларҙың да төп бурысы тип ҡаралырға тейештер, сөнки уҡыусылары булмаған китапхана кемгә кәрәк? Шуға ла бөгөн улар яңы форматта эшләүгә күсте. Бөгөн ҙур ҡалаларҙа был учреждениелар йәш таланттарҙы үҫтереүсе үҙәккә әүерелеп бара. Элек кенә ул китапхананан кеше өҙөлмәй ине, бөгөн, кем уҡыусылары менән эшләмәй, унда тынлыҡ.

Хәҙер балалар бөтөн буш ваҡытын интернетта ултырып үткәрә. Үҙемдең ейәндәремдән беләм, тиер инем, һуңғы бер нисә йыл мин уларҙы "ауыҙлыҡлап" алып барам: бәләкәйен эргәмә ултыртып, ҡысҡырып китап уҡыйым һәм, беләһегеҙме, уға оҡшай! Бигерәк тә матур һүрәттәр менән биҙәлгән "Башҡорт халыҡ әкиәттәре"н яратып тыңлай. Аралаштырып, совет осоро балалар яҙыусылары Корней Чуковскийҙы, Самуил Маршакты уҡыйбыҙ. Минең ваҡыт булмағанда, үҙаллы ла уҡыйҙар, ләкин балалар тасуири итеп, ролдәргә бүлеп, ҡысҡырып уҡығанды ярата һәм иҫендә ҡалдыра. Эште фәҡәт китапханасы өҫтөнә генә ауҙарып ҡалдырырға ярамай, балаң китап яратып, әҙәбиәт тарафынан йәш аңдарға һеңдерелеүсе юғары әхлаҡ нигеҙҙәрен төшөнөп үҫһен, тиһәң, уларға китап уҡырға ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырға, ярҙам итергә, йүнәлеш бирергә генә кәрәк, аҙаҡ уларҙы китаптан айырып та ала алмаҫһығыҙ, үҙемдең тәжрибәнән беләм.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## МӘКТӘПКӘ ҒАРИЗА БИР



**Башҡортостанда 1 апрелдән балаларҙы беренсе класҡа алыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә башлай. Ата-әсәләр ғаризаларҙы 30 июнгә тиклем тапшырырға мөмкин.**

Был осорҙа тәү сираттағы йәки өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә, шулай уҡ белем биреү ойошмаһына беркетелгән биләмәлә теркәлгән балаларға ғариза бирәләр. Беркетелгән биләмәлә йәшәмәгән балалар өсөн ғаризалар 6 июлдән ҡабул ителә һәм 5 сентябргә тиклем дауам итә, тип хәбәр иттеләр Өфөнөң мәғариф идаралығында. Ҡала хакимиәтендә ғариза биреү ысулдарын да иҫкә төшөрҙөләр: "Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау" сайтында электрон формала; берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталының сервистарын файҙаланып; дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталы функцияларын файҙаланып; дөйөм белем биреү ойошмаһының электрон почтаһы ярҙамында электрон формала; дөйөм белем биреү ойошмаһында; заказлы хат менән тапшырырға мөмкин.

## УРАҘА БАЙРАМЫНДА...

**Башҡортостанда йәшәүселәргә мосолмандарҙың Ураҙа байрамы уңайынан апрелдә өҫтәмә ял көнө тураһында иҫкә төшөрҙөләр. Быйыл ул шаршамбы, 10 апрелгә тура килә. Был көндө мосолмандар изге Рамаҙан айының тамамланыуын билдәләй.**

Илдә киләһе оҙайлы ял көндәре май айында көтөлә. Граждандар 28 апрелдән 1 майға тиклем һәм 9 майҙан 12-һенә тиклем ял итә ала, тиелә Рәсәй Хөкүмәте раҫлаған производство календарында. 27 апрелдәге ял көнө 29 апрелгә күсерелә. Шулай итеп, Беренсе май байрамдары алдынан эш аҙнаһы алты көнлөк була. Быйыл республикала йәшәүселәрҙе тағы ла Еңеү көнө (9 майҙан 12-һенә тиклем), Рәсәй көнө (12 июнь), Ҡорбан байрамы (16 июнь йәкшәмбе булғас, 17 июндә ял итәбеҙ), Халыҡтар берҙәмлеге көнө (3-4 ноябрь) уңайынан байрам көндәре көтә.

## СИТТӘН ИНДЕРМӘ!

**Ветеринар һәм фитосанитар күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт хәбәр итеүенсә, 2023 йылда Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстандан бал ҡорттары пакеттары индереүҙә даими рәүештә закон боҙоуҙар теркәлгән.**

Асығыраҡ әйткәндә, Рәсәйҙә был бал ҡорттары кәрәкле лаборатор тикшереүҙәр, эшкәртеүҙәр үтмәй. Ҡырғыҙстандан килгән ҡорттар араһында нозематоз сире лә осраған. Бал ҡорттары арыһында ауырыуҙар таралыуына юл ҡуймау өсөн Россельхознадзор был илдәрҙең ауыл хужалығы министрлыҡтарына бал ҡорттары сығарыуға сертификат биреүҙе туҡтатыуҙы һорап мөрәжәғәт итте. Әгәр ҙә Рәсәй кешеһенә ошо илдәрҙән бал ҡорто пакеты килә килә икән, уны илгә лә индермәйәсәктәр, кире лә ҡайтармаясаҡтар.

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

12+

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УЙНАП АЛАЙЫҠ!



**Уйын - кеше тормошоноң айырылғыһыҙ бер өлөшө. Ниндәй генә уйын булмаһын, уның асылында тормош сағылышы ята. Ғөмүмән, бер ҡасан да, бер ниндәй ҙә уйында ҡатнашмаған кеше юҡтыр. Хатта оло кешеләр ҙә, балалар кеүек, ваҡыты-ваҡыты менән уйнап алырға ярата.**

Әлбиттә, төрлө эштәрең, бурыстарың күп булһа, уйнарға ваҡыт ҡалмай. Шуға ла беҙ ниндәй ҙә булһа уйында ҡатнашыуҙы ял итеп алыу, тип ҡабул итәбеҙ. Ә балалар өсөн уйын - иң шатлыҡлы, иң күңелле эш. Балалар уйнап үҫә, уйын - уларҙың күп төрлө шәхси сифаттарын асыу һәм үҫтереү йәһәтенән иң еңел һәм ҡулайлы сара. Хәрәкәтле күмәк уйындарҙа бала физик яҡтан сыныға, уның хәрәкәттәр координацияһы, етеҙлеге, йылғырлығы, таһыллығы, мәргәнлеге һәм башҡа сифаттары үҫешә бара. Унан һуң, үҫмерҙәр башҡалар менән бергәләп, килешеп эш итергә өйрәнә, коллективлыҡ тойғоһо ла шулай барлыҡҡа килә.

Ололар (ата-әсәләр, тәрбиәселәр) менән үҫмерҙәр араһында йыш ҡына аңлашмаусанлыҡ булыуы күҙәтелә, һөҙөмтәлә конфликттар ҙа килеп тыуа. Балалар менән ололар араһында аңлаша алыу, ышаныс, психологик яҡынлыҡ кеүек сифаттар улар төрлө уйындарҙа бергәләп ҡатнашҡан саҡта тиҙерәк хасил була. Үҙҙәре менән бергә уйнаған олораҡ кешегә балалар хөрмәт менән ҡарай: был саҡта улар үҙҙәрен оло кеше менән бер тиң кеүек итеп тоя башлай, ә бындай хис-кисереш үҫмерҙәр өсөн үтә мөһим. Ауылыбыҙ мәктәбенән Булат Хужин исемле уҡытыусыбыҙ беҙҙең ҡышҡы-яҙғы уйындарыбыҙҙа ихлас ҡатнашты, балалар араһында ул мәктәп директорынан да абруйлыраҡ булғандыр. Йәнә бер миҫал: Һупайлыла һәр мәктәп янында хоккей майҙансыҡтары ҡорола торғайны, үҙем шунда балалар менән шайба һуғырға йөрөп алдым. Уйнап туйғас, балалар менән һөйләшеп тә алабыҙ. Бер малай: "Һеҙ, ағай, хоккей буйынса СССР чемпионы булғанһығыҙҙыр ул", - ти. Икенсеһе: "Эх, йәл, ни эшләп минең атайым да беҙҙең менән хоккей уйнарға йөрөмәй икән?" - тип, көрһөнөп ҡуя. Ә хәҙерге осорҙа балалар менән бергә уйнаусы ололар ҡалманы ла шикелле.

Әүәлерәк, совет осоронда ауыл балаларының уйындары күп булды, билдәле ғалимыбыҙ Ғәләүетдин Ишмөхәмәтов (авторҙашлыҡта) "Балалар фольклоры: Бала саҡ - уйнап көлөп үҫер саҡ" тигән китап та нәшер иткәйне. Ҡыҙғанысҡа күрә, хәҙер балалар ауылдарҙа ла асыҡ һауала уйнап бармай, уйындар гаджеттарға алмаштырылды. Шулай булһа ла, балаларҙы спорт уйындарына, шашка һәм шахматҡа, башҡа бер заманса "аҡыллы" уйындарға йәлеп итеү фарыз.

Йәнә бер факт: психология фәнендә "уйын терапияһы" тип аталған дауалау ысулы бар. Әлбиттә, был осраҡта "дауалаусы" уйындар уйлап сығарыла, уйында ҡатнашыусыларға төрлө ролдәр бүлеп бирелә: сиратлап йә ыңғай, йә кире геройҙар ролендә уйнау тәҡдим ителә. Уйын барышында ҡатнашыусы үҙен иркекле тота, мәжбүр итеү юҡ. Һөҙөмтәлә кеше үҙенең етешһеҙ яҡтарынан арына ала. Бындай уйындарҙы балаларға ла тәҡдим итеп була, ғәҙәттә улар төрлө ролдәрҙе теләп башҡара. Шулай булғас, ололарҙы бала-сағаларыбыҙ менән төрлө уйындарҙа йышыраҡ ҡатнашырға саҡырам.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

БАШ ҠАЛАМ

# ҠУНАҠТАР БАҺАЛАЙ...




**Тора-бара үҙең даими йәшәгән ауылдың йәки ҡаланың матурлығын, уға ғына хас булған үҙенсәлектәрен күрмәй башлайһың. Ә ситтән килгән кеше ошоларға иғтибар итеп, һин торған урынды яңынан аса. Күптән түгел Түбәнге Тагилдан ҡунаҡҡа килгән дуҫыбыҙ Марселгә Өфөбөҙҙө күрһәтеп йөрөнөк. Гәзит уҡыусыларын уны ҡалала хайран иткән, аптырауға һалған тәьҫораттары менән таныштырырға ҡарар иттем, сөнки уның фекерҙәре бик ҡыҙыҡ тойолдо.**

Аэропортта ҡаршы алғанда уҡ ул, үҙҙәрендәге кеүек, таксистарҙың самолеттан яңы төшөп кенә торған кешеләргә үҙ хеҙмәтен тәҡдим итеп ташланмауҙарына иғтибар итте. "Ипле генә аралаша таксистарығыҙ, беҙҙә күҙҙе лә астырмайҙар", - тип аптырауын йәшермәне.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? 

## *Бөгөн балалар китап уҡыймы? Улар өсөн беҙҙә ниндәй китаптар нәшер ителә?*

***Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА, шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең балалар әҙәбиәте редакцияһы мөхәррире:*** Балалар менән осрашыуҙарға йыш йөрөгән кеше булараҡ, уларға тәүге һорауым да һеҙҙекенә оҡшаш яңғырай. Шуныһы ҡыуаныслы - балалар дәррәү ҡул күтәреп, әле яңыраҡ уҡыған китаптарының исемдәрен ҡысҡырып әйтергә керешә. Был һорау беҙҙең - Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтенең балалар әҙәбиәте редакцияһы хеҙмәткәрҙәре өсөн бигерәк тә мөһим. Әлбиттә, көндән-көн алға барған технологиялар тормошобоҙҙа ҙурыраҡ урын биләгән һайын, был һорау беҙҙә йышыраҡ тыуа, борсой торғандыр. Сөнки ошо юҫыҡтан ҡарағанда китапҡа урын да ҡалмаған-дай тойолоп китә. Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә күргәнебеҙ бар: оло - кесеһендә - телефон, планшет, ноутбук...

1982 йылда, мин "Китап" нәшриәтенә корректор булып эшкә урынлашҡанда, балалар һәм өлкәндәр өсөн сыҡҡан китаптарҙың тиражы ҙур ине. Ә хәҙер? Хәҙер Башҡортостан Башлығы Шыршыһы байрамында балаларға бүләк итеп таратыла торған китаптар тиражы ғына юғарыраҡ. Заман башҡа - заң башҡа, тиһәк тә, атай-әсәй, олатай-өләсәйҙәрҙең иң мөҡәддәс бурыстарының береһелер ул баланы сабый саҡтан туған телгә, моңға, нәфис һүҙгә, матур әҙәбиәткә ылыҡтырып үҫтереү. Башҡорт халҡының бай ауыҙ-тел ижады, бишек йырҙары, һанашмаҡтар, тапҡыр һүҙҙәр, әкиәт-шиғырҙар, мәҡәл-әйтемдәр был йәһәттән иң ҙур ярҙамсы. Ошоно һәр кем иҫендә тотһон ине. Юғиһә, бала тәпәй баҫып, үҙен уратып алған һәр нәмәне тотоп, ҡабып ҡарап өйрәнә башлағанда, тел бутап, асылып, һанһыҙ һорауҙар бирә башлағас, баш ҡайнатып, ҡамасауламаһын тип уның ҡулына телефон тотторғандар аҙмы! Бына шул ваҡытта эшләнә лә инде тәүге хата. Баланың үҙ телебеҙҙә һөйләшергә өйрәнеүе лә, китап уҡырға әүәҫлеге лә әсә һөтө менән һеңдерелә, туған телгә, моңона, һөйөү ҙә ошо мәлдә һалына.

Донъя киң, мәғлүмәт ағымы көслө, ошо ағымда маяҡһыҙ, тотанаҡһыҙ аҡҡан юнысҡылай булмаһын өсөн баланы кескәй саҡтан ата-бабаларыбыҙҙан килгән, гендарыбыҙға һалынған бай мираҫлы ғәзиз телебеҙҙә тәрбиәләргә, уға һөйөү уятырға кәрәк. Ошо юҫыҡта "Китап" нәшриәтендә йыл һайын һәр йәш категорияһын иҫәпкә алған китаптар 22 - 25 исемдә донъя күрә килә. Башҡорт халҡының легендалары буйынса буям китаптары серияһы (төҙөүсеһе Диана Килдина), бәләкәстәрҙе ижекләп уҡырға өйрәтеү өсөн китаптар, ике телдә һүрәтле карточкалар баҫыла. Мультимедиа ҡушымтаһы булған китаптарҙы балалар бигерәк тә ярата. QR-код аша смартфон менән йәнһүрәт ҡарарға, уйнарға, һүрәттәр төшөрөргә мөмкин булыуы уларҙа ҡыҙыҡһыныу уята. Бындай китаптар быйыл бишенсе тапҡыр сығасаҡ.

Бер нисә йыл рәттән электрон һәм аудио-китаптар донъя күрҙе.

Быйыл да иң бәләкәстәрҙән башлап урта һәм өлкән йәштәге уҡыусы балалар зауығына тап килерҙәй китаптар сығарыу буйынса эштәр әүҙем бара. Шулай уҡ мультимедиа ҡушымталы китап, "Батырҙар тураһында әкиәттәр", Башҡортостан Башлығы Шыршыһы байрамына ла китап донъя күрәсәк.

Китап уҡыған кешенең күңеле бай, яҡты һәм мәрхәмәтле, үҙе мәҙәниәтле була. Балалар үҙҙәре лә ҡулға тотоп, һүрәттәрен ҡыҙыҡһынып ҡарап, рәхәтләнеп уҡыуға бер ни ҙә етмәүе тураһында әйткәне бар. Беҙ, өлкәндәр, уларҙы ошо тылсымлы китап донъяһына кескәй саҡтан алып килергә бурыслыбыҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20 мартта, 60 йәшлек юбилейын билдәләгән көндә, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ирҙәрсә һөйләшеү" республика йәштәр илһөйәрлек форумында ҡатнашты. Форум Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында барҙы. Сараға 250 уҡыусы саҡырылғайны, улар араһында махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары, кадеттар һәм юнармеецтар булды. Радий Хәбиров йәштәргә сәләмләү һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итте. Бынан һуң ул йәш курсанттар һәм килгән ҡунаҡтар менән бергә иртәнге зарядкала ҡатнашты.

✓Өфөлә Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы ултырышы үтте һәм унда республика территорияһында РФ Президенты һайлауҙарының һөҙөмтәләре билдәле булды. Иң күп тауышты әлеге мәлдәге ил Президенты Владимир Путин йыйған - уға һайлаусыларҙың 90,90 проценты үҙ тауышын биргән. Николай Харитоновҡа 3,69 процент, Леонид Слуцкийға 2,72 процент, Владислав Даванковҡа 1,88 процент тауыш бирелгән.

✓Башҡортостанда "Рәхмәт" акцияһында ҡатнашыу өсөн билетты теркәү мөмкинлеге 20 мартҡа тиклем оҙайтылғайны. Билдәле булыуынса, республиканың һайлау участкаларында 3,5 миллиондан ашыу QR-билет таратылған, сайтта 2 миллиондан ашыу билет теркәлгән. Суперприздар 22 мартта уйнатыла. Тап ошо көндә Өфөләге фатир, ике "Нива" автомобиле, шулай уҡ төрлө юлламаларҙың хужалары билдәле була.

✓Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Өфөнән "Көнсығыш сығыу юлы"ның 1 апрелгә асылырға тейешлеген хәбәр итте. "Әлегә көнөн теүәл генә әйтмәйем, ләкин ошо аҙнаның һуңына, йәки, әйтәйек, 1 апрелгә тиклем күптән көтөп алынған объектты - Көнсығыш сығыу юлын асырбыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Яңы проекттарҙы үҫтереү буйынса стратегик башланғыстар агентлығының генераль директоры Светлана Чупшева менән осрашты. Ул баш ҡалабыҙҙа уҙған "Ил өсөн көслө идеялар" форумында ҡатнашты. "Республика икенсе йыл рәттән Рәсәйҙең "Яңы заман өсөн көслө идеялар" форумына килгән идеялар һаны буйынса лидер булып тора, - тип һөйләне Светлана Чупшева. - Иң күп проекттар (3,7 мең) - Башҡортостан халҡынан".

Ҡалаға Ырымбур трактынан Өфөгә килеп ингән ерҙә тау битендәге шәхси йорттарҙың күп ҡатлы өйҙәр менән аралашып ултырыуын да ҡыҙыҡһынып ҡараны. Шәхси йорттарға кешеләрҙең ниндәй юлдар барыуын асыҡлар өсөн хатта бер кварталды урап сыҡты. Әйтергә кәрәк, баш ҡалала күпме ғүмер йәшәп, тау битендәге йорттар араһына бер тапҡыр ҙа төшкән булманы. Ә, бәхетиһәң, ул үҙе бер айырым донъя икән! Оло юлдан саҡ ҡына аҫҡа төшкәс тә, берике аҙымда ғына ҙур ҡала тормошо ҡайнай тип әйтеп тә булмай. Тыныс урамдар, ыҡсым йорттар, хас ауылдағы кеүек бер-берене менән аралашып торған күршеләр, зыу килеп ҡарҙа уйнаған балалар - билләһи, Өфөнө икенсе яҡтан астым.

Өфөлә талпанға һәйкәл барлығын барыһы ла беләләр. Тотош Рәсәйҙә берҙән-бер булған һәйкәл янында фотоға төшөп, мәз килде ҡунаҡ. Был үҙенсәлекле объектты туристик йәһәттән бик оҫта ҡулланырға булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм шунда уҡ барлыҡ дуҫтарына хәбәр ебәрҙе.

Баш ҡала урамдарының автомобилдәр өсөн юлдарҙың һәм тротуарҙарҙың киң булыуын билдәләүе лә Өфөбөҙгә тағы бер мәртәбә өҫтәне. Шулай уҡ ҡаланың үҙәгендә генә түгел, ә күпселек урында ял итеү өсөн парк, скверҙарҙың күп булыуын, йыйнаҡ ҡына кафелар эшләүен, балалар һәм спорт менән шөғөлләнгәндәргә тәғәйенләнеп эшләнгән махсус майҙансыҡтарҙың матур икәнлеген дә иғтибарынан ситтә ҡалдырманы ҡунаҡ.

Тағы ла уға Өфөләге тарихи биналарҙың реклама баннерҙарынан азат булыуы оҡшаны. Ә бына Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана алдындағы скульптура һәм композициялар уны аптырауға һалды. "Бәлки, был урында башҡорт халҡының легенда, ҡобайырҙары геройҙары урын алһа, яҡшы булыр ине", - тип фекерен белдерҙе. Шулай уҡ Ленин менән Пушкин урамы киҫешкән урында Өфө хаҡында "һөйләгән" сағыу, мәғлүмәти яҡтан бай электрон экрандың етешмәүен дә билдәләп китте.

"Өфө - ҡабатланмаҫ атмосфералы, ҡунаҡсыл һәм алсаҡ ҡала. Урынлашҡан урыны бик матур. Таҙалығы, бөхтәлеге тәүҙән уҡ күҙгә ташлана", - тип һығымта яһап ҡуйҙы ҡунағыбыҙ аҙаҡтан..

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## Бөгөн балалар китап уҡыймы? Улар өсөн беҙҙә ниндәй китаптар нәшер ителә?

***Гөлфиә САБИРОВА, Асҡын районы Ҡашҡа модель китапхана хеҙмәткәре:*** Бөгөн йәш быуынды китап уҡыуға йәлеп итеү бурысы китапханасыға үҙ эшмәкәрлеген яңы шарттарға ярашлы үҙгәртеп ҡороуҙы талап итә. Икенсенән, китапхана уҡыусылар өсөн уңайлы һәм заманса кимәлдә булырға тейеш. Был, тимәк, халыҡты әҙәби-мәғлүмәти йәһәттән сифатлы хеҙмәтләндереү маҡсатында китапхананы тейешле һәм кәрәкле матди-мәғлүмәти саралар менән мөмкин тиклем тулыраҡ тәьмин итеү, тигән һүҙ.

Беҙҙең Ҡашҡа ауыл китапханаһы ошондай талаптарға яуап бирә, шуның өсөн дә беҙ 2011 йылдан бирле модель китапхана статусын йөрөтәбеҙ. Китапханабыҙ типовой мәҙәни йорттоң икенсе ҡатында урынлашҡан, уның майҙаны ҙур, иркен, яҡты. 2022 йылда ғына капиталь ремонт үткәрелде. Яңы китаптар, компьютер, телевизор, мебель ҡайтарылды. 16 урынлыҡ уҡыу залы булдырылды: гәзит-журнал уҡыйһыңмы - рәхим ит! Өлкәндәр тураһында һүҙ ҙә юҡ, улар заманында китап, баҫма матбуғат яратып үҫте, бөгөн дә был яҡшы ғәҙәттәренә тоғролар.

Ә бына балалар менән эшләргә тура килә инде. Дөрөҫ, бөгөн улар өсөн төп мәғлүмәт сығанағы - смартфон да айфон, компьютер. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең мәктәп уҡыусылары китапхана юлын һыуытҡаны юҡ, сөнки бында уларҙы белем шишмәһе генә түгел, ә уға арналған мауыҡтырғыс саралар: китап байрамдары, әҙәби викториналар, конкурстар, "Тапҡырҙар һәм зирәктәр", "Иң күп китап уҡыусы", "Нимә, ҡайҙа, ҡасан?" кеүек ярыш һәм уйындар көтә. Ҡашҡа урта мәктәбендә 126 бала уҡыһа, шуларҙың 70-кә яҡыны әүҙем китап уҡыусылар булып беҙҙең иҫәптә тора. Йәйге каникулдарҙа улар сафы тағы ла арта: ҡаланан ҡартатай-өләсәләренә ялға ҡайтҡан балалар мәктәптәрендә йәйгелеккә уҡырға ҡушылған китаптар исемлеген тотоп килеп еталәр.

Дөйөм алғанда, балалар, айырыуса үҫмерҙәрҙе бөгөн күбенсә мажаралы әҙәбиәт, фантастика ҡыҙыҡһындырһа, ескәйҙәр яңы нәшер ителгән, төҫлө һүрәтле "Башҡорт халыҡ әкиәттәре"н үҙ итә. Ул китаптың балалар ҡулынан төшкәне лә юҡтыр. Мәктәбебеҙҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыйҙар, шуға ла тел йәһәтенән ауырлыҡтар юҡ, аңламағандарын һорай һалалар. Әҙәбиәт дәресенән өҫтәмә әҫәрҙәр ҙә һәр ваҡыт ҡулда. Китапханабыҙ башҡорт әҙәбиәте буйынса тос ҡына фондҡа эйә. Балалар бигерәк тә Ноғман Мусин, Зәйнәб Биишева, Яныбай Хамматов, Тансулпан Ғарипованың китаптарын йыш һорай. Яҡташыбыҙ булараҡ, яңыраҡ ҡына башҡорт яҙыусыһы, ғалим-фольклорсы, профессор Кирәй Мәргән аҙнаһы үткәрҙек. Уның "Бөркөт ҡанаты" романы, шулай уҡ билдәле шағир, мәғрифәтсе М.Аҡмулланың фажиғәле яҙмышына бағышланған "Өҙөлгән моң" драмаһы хаҡында фекер алыштыҡ. Ҡайҙа нисектер, әйтә алмайым, ләкин беҙҙең Ҡашҡала балалар китап менән дуҫ. Был, әлбиттә, өлкәндәр, айырыуса китапханасының улар менән нисек эшләүенә лә ныҡ бәйле.

**Редакциянан: 12 мартта Башпотребсоюздың элекке бинаһында "Китап" нәшриәтенең фирма магазины асылды, рәхим итегеҙ!**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** яҙып алды.

## ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ҺУҢ БУЛҺА ЛА УҢ БУЛҺЫН

**Үткән аҙнаның һуңғы көнөндә - Рәсәйҙә булып үткән Президент һайлауҙарының өсөнсө көнөндә, Украина хәрби көстәре Рәсәйҙең бер нисә төбәген пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүменә дусар итте. Һөҙөмтәлә Рәсәй Һауа һөжүме оборонаһы тарафынан 35 дрон атып төшөрөлдө: Краснодар крайында 17, Мәскәү һәм Ярославль өлкәләрендә дүртәр дрон юҡҡа сығарылһа, Белгород менән Курск өлкәләрендә - өсәр, Калугала - дүртәү. Шул рәүешле Украина хәрби көстәре илебеҙҙә барған Президент һайлауҙарына тотҡарлыҡ яһау маҡсатында Рәсәй объекттарын ракета утына тоторға маташты, әммә уларҙың барыһы ла һауала сәпкә алынды һәм юҡ ителде.**

Шул арала Рәсәй ғәскәре Авдеевка йүнәлешендә Украина хәрби көстәренең терәк пунктын реактив система утына тотто һәм ҡаршы яҡ байтаҡ көстәрен юғалтты. Угледар, Никольское, Павловка райондары ла "Восток" төркөмө һөжүменән һуң терәк пункттарһыҙ ҡалды. Запорожье, Донецк, Артемовск һәм башҡа йүнәлештәрҙә лә Рәсәй армияһы алған йүнәлешенән тайпылмай, ныҡышмаллыҡ, ҡаһарманлыҡ өлгөләре күрһәтә. Һөҙөмтәлә Украина көстәре Авдеевка йүнәлешендә генә лә тәүлек эсендә 380 боевигын юғалтты, тип хәбәр итте ren.tv.

Ә шул уҡ ваҡытта НАТО-ла Украинаға хәрби контингент ебәреү ихтималлығы хаҡында бәхәстәр дауам итә. Франция президенты Эммануэль Макрондың был хаҡта сафсатаһы Рәсәй тарафынан ғына түгел, хатта альянс ағзалары араһында ла бер төрлө генә булмаған кире ҡараштар тыуҙырҙы. Германия канцлеры Олаф Шольц Макрон ауыҙынан сыҡҡан бындай тәҡдимде ҡабул итмәүен белдерһә, АҠШ та Украинаға хәрби кадрҙар ебәреү ихтималлығының ҡаралмауы хаҡында хәбәр итте. Сәйәси фәндәр кандидаты, "Валдай" халыҡ-ара дискуссия клубы эксперты Алексей Чихачев фекеренә ҡарағанда, Украинаға НАТО хәрби көстәрен ебәреү ихтималлығы буйынса фекер таратып, Макрон үҙенә хас стилдә лидерлыҡ ынтылыштарын күрһәтә, "карсығалар араһында төп ҡарсыға" булырға маташа. Рәсәйҙең Францияла ғы илсеһе Алексей Мешков Франция властарын асылда өсөнсө донъя һуғышына саҡырыуҙа ғәйепләне һәм бының беҙҙә, Рәсәйҙә генә түгел, ә донъя кимәлендә, шул иҫәптән, Евроберләшмә илдәрендә лә кире ҡараш тыуҙырыуы хаҡында әйтте. АҠШ-тың отставкалағы подполковнигы Дэниел Дэвис урындағы телеканалда сығыш яһап, Көнбайыштың Украинаға хәрби һәм финанс ярҙамы Рәсәй Ҡоралды Көстәрен туҡтата алмаясаҡ, тип белдерҙе. "Конфликт башланғандан алып 18 ай эсендә беҙ (АҠШ - **Ред.**) Евроберләшмә менән берлектә Киевҡа дөйөм иҫәп менән 200 млрд доллар самаһы аҡса, меңәрләгән бөрәмек бронетехника һәм башҡа төр хәрби техника ебәрҙек. Быларҙың береһе лә ярҙам итмәне",- тине хәрби күҙәтеүсе.

Ә был ваҡытта Украинала мобилизацияға ҡаршы баш күтәрәләр. Ҡайһы бер депутаттар хатта төрмәләргә тотҡондарҙы һуғышҡа ебәреү яҡлы. Украина сәйәсмәне, элекке президент Кучманың кәңәшсеһе Олег Соскин үҙенең блогында мәжбүри мобилизацияның Украинала граждандар һуғышына килтереү ихтималлығына ишара яһай.

Ә бына Яҡын Көнсығыш тарафтарынан йылы елдәр иҫкәндәй. Үткән аҙна ахырында донъя киң мәғлүмәт сараларында бынан алдараҡ Газа секторын утҡа тотоуҙы туҡтатыу хаҡында тотҡарланып ҡалған һөйләшеүҙәрҙең ҡабатан тергеҙеләсәге көтөлә. Катарҙа ошо араларҙа Палестинаның ХАМАС хәрәкәте вәкилдәре менән Израиль араһында һөйләшеүҙәргә өлгәшеләсәк. Associated Press агентлығы белдереүенсә, "был израилдәр менән ХАМАС вәкилдәренең изге Рамаҙан айы башланғандан алып тәүге һөйләшеүҙәре булмаҡсы". Дөрөҫ, утҡа тотоуҙы туҡтатыуға Рамаҙан башланмаҫ элек үк өлгәшергә була ине, ти халыҡ-ара аралашсылар, ләкин һуң булһа ла уң булһын!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2024 йылдың тәүге ике айында Башҡортостанда 557 мең квадрат метрҙан ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған, был уҙған йылдың ғинуар-февраленә ҡарағанда 20,6 процентҡа күберәк. Ғинуар-февралдә бөтә финанслау сығанаҡтары иҫәбенә 3 мең фатир сафҡа индерелгән. Халыҡтың үҙ иҫәбенә һәм кредиттар ярҙамында төҙөгән торлаҡ өлөшө 82,9 процент тәшкил итә. Улар 4110 шәхси йорт һалған. Был иһә уҙған йылдың ғинуар-февраленә ҡарағанда 32,4 процентҡа күберәк. Хәҙер Башҡортостан торлаҡты сафҡа индереү буйынса Волга буйы федераль округында - икенсе, Рәсәйҙә 11-се урынды биләй.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Өфөлә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумын уҙғарырға ҡушты. "2024 йылдың сентябрь-октябрь айҙарында Өфөлә "Рәсәй - спорт державаһы" Халыҡ -ара спорт форумын үткәрергә", - тиелә дәүләт башлығы бойороғонда. Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә форумды ойоштороуҙы тәьмин итеү бурысы йөкмәтелде. Башҡортостан Хөкүмәтенә Халыҡ-ара спорт форумына әҙерләнеүҙе һәм уны үткәреүҙе тәьмин итеү, шул иҫәптән республика бюджетынан ошо маҡсат өсөн сығымдарҙы финанслау буйынса саралар күрергә тәҡдим ителде.

✓Башҡортостанда граждандарға патриотик тәрбиә биреү буйынса Республика координация советы булдырылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған тейешле указда совет тураһында положение, шулай уҡ уның составы раҫланған. Унан күренеүенсә, координация советы эшмәкәрлегенең маҡсаты - республиканың дәүләт органдары, урындағы үҙидара органдары, йәмәғәт ойошмалары эшмәкәрлеген берләштереү һәм координациялау аша граждандарға илһөйәрлек тәрбиәһе биреү системаһын үҫтереү.

✓2023 йылда Башҡортостанда инвестициялар күләме 620 миллиард һумдан ашҡан. Был хаҡта аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров белдерҙе. 2018 йылда ошо һан 267,9 миллиард һум тәшкил иткән. "2023 йылда үҫеш 2022 йыл менән сағыштырғанда 7,6 процент. Ғөмүмән, Башҡортостан биш йыл эсендә инвестицияларҙы бер ярым тапҡырға арттырҙы. Башҡортостанда биш йыл эсендә инвестициялар күләме 2,3 триллион һум тәшкил итте. 2023 йылда инвестициялар 100 миллиард һумға артты", - тине Радий Хәбиров.

ҠЫҪҠАСА

# ЯҢЫ ТУЛҠЫН КӨТӨЛМӘЙМЕ?

**БР Фәндәр академияһының Стратегик тикшеренеүҙәр институты директоры, сәйәсәт фәндәре кандидаты Владимир Савичев фекеренсә, Владимир Путиндың һайлауҙарҙа еңеүенән һуң мобилизацияның яңы тулҡыны булмаясаҡ.** "Быны кәрәге лә юҡ, сөнки ил Львовҡа тиклем барып етеүҙе маҡсат итеп ҡуймай, беҙҙең бурыс бөтөнләй икенсе. Беҙҙең менән сәйәси яҡтан килешә белергә кәрәклеге, әгәр ҙә беҙҙең менән һуғышырға теләйһегеҙ икән, барыбер еңелеүегеҙ хаҡында бөтөн донъяны ышандырырға тейешбеҙ. Быны миллионлы ғәскәрҙәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйып та дәлилләп була, әммә беҙ бөгөн эшләгәнсә лә күрһәтеп була. Төп бурыс - юғалтыуҙар аҙыраҡ булырға тейеш, шуға ла мобилизацияның яңы тулҡыны кәрәкмәйәсәк", - тип билдәләне сәйәсмән. Владимир Савичев иҫәпләүенсә, бөгөн конкуренция хәрби кәрәкәттә генә түгел, ә иҡтисадта ла, идеялар кимәлендә бара. Йәмғиәт илгә көслө иҡтисад, көслө армия кәрәклеген аңлай, шуға ла улар лозунгыларға ҡарап түгел, ә ысынбарлыҡта башҡарылған эштәргә ҡарап тауыш бирҙе.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә академик Шумаков исемендәге трансплантология һәм яһалма органдар үҙәге етәксеһе Сергей Готье менән осрашыуы хаҡында яҙҙы.** Улар Башҡортостанда медицинаның мөһим йүнәлешен үҫтереү тураһында фекер алышты. "Шумаков исемендәге үҙәк - донъяла трансплантология өлкәһендәге алдынғы учреждение. Тәү сиратта Сергей Владимировичҡа бында беҙҙең табип-трансплантологтарҙы ихлас ҡабул итеүҙәре, стажировка үтеүҙәре һәм үҙ компетенцияларын күтәреүҙәре өсөн рәхмәт белдерҙем. Башҡортостанда трансплантология юғары кимәлдә, табиптарыбыҙ үҙенсәлекле операция яһай, йөрәк, үпкә һәм башҡа ағзаларҙы күсереп ултырта. Ошо үҙәккә килеүебеҙ - тәжрибә үҙләштереү һәм артабан ниндәй йүнәлештә эшләү кәрәклеген аңлау мөмкинлеге ул", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Башҡортостанда трансплантология хеҙмәтен, донорлыҡты үҫтереү программалары әҙерләнә, тип билдәләне республика етәксеһе. Был йүнәлештә эш дауам итә.

✓ **Эске эштәр министрлығының миграция мәсьәләләре буйынса идаралығы "Резина фатир" тигән профилактик операцияның сираттағы этабының һөҙөмтәһен иғлан итте.** Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, 900-ҙән ашыу объект, шул иҫәптән тәҙәләштәр, тимер юл станциялары һәм автовокзалдар, автосервистар, сауҙа итеү учреждениелары, етештереү-склад биналары, йәмәғәт туҡланыу урындары, баҡсалар тикшерелгән. "Сит ил граждандарының, гражданлығы булмаған шәхестәрҙең РФ территорияһында йәшәүе режимын тәьмин итеү өлкәһендә 340-тан ашыу административ хоҡуҡ боҙоу асыҡланған. Сит ил граждандарын фиктив теркәү осраҡтары 120-нән ашып киткән. 80-гә яҡын еңәйәт эше ҡуҙғатылған. Республиканың ҡала һәм райондары судтары тарафынан илдән сығарып ебәреү тураһында 21 административ ҡарар ҡабул ителгән ", - тип хәбәр итә идаралыҡ.

ЮБИЛЕЙ АЙҠАНЛЫ

**Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһын 2018 йылдан бирле етәкләй. Тап шул саҡта бер юлы бер нисә Рәсәй төбәгенә көслө етәкселәр килде. Ул мәлдә Башҡортостан власы алдында торған мөһим мәсьәләләр аҙ булманы - йәмғиәтте консолидациялау, элиталарҙы берләштереү, иҡтисадты үҙгәртеп көйләү, мөһим социаль проблемаларҙы хәл итеү. Ә алда ковид пандемияһы, санкциялар буласаҡ. Республика барса ошондай һынауҙарҙы уңышлы үтте: Башҡортостан бөгөн йәшәйештең күп өлкәләрендә юғары үҫеш кимәлен күрһәтә, илдең алдынғы һәм көслө төбәктәренең береһе булып тора. "Российская газета" журналистары менән осрашыу барышында Радий ХӘБИРОВ төбәк мәсьәләләрен хәл иткәндә уға нимә булышлыҡ итеүе, республиканың баш ҡалаһы үҙенең юбилейы алдынан нисек үҙгәрәсәге һәм властарҙың йәштәргә ни рәүешле төбәккә ылыҡтырыуы хаҡында һөйләне.**

# БАШҠОРТ АҘЫМЫ



**Радий Фәрит улы, Башҡортостан һуңғы өс йылда яңынан төҙөлгән һәм ремонтланған мәктәптәр, балалар баҡсалары һаны буйынса ил төбәктәре араһында лидерҙар иҫәбендә инде. Федераль һәм төбәк программаларын ғәмәлгә ашырыу өсөн кәрәк булған аҡсалар нисек йыйыла?**

- Төбәк ҡаҙнаһының ҡайтармаһыҙ килемдәре күләме буйынса 2023 йылда беҙҙең республика Волга буйы федераль округы субъекттарының ТОП-10-ы иҫәбенә инде. Был күрһәткес буйынса ил субъекттары рейтингында Башҡортостан туғыҙынсы урында. Федераль программаларҙың күпселегенә финанс саралары конкурс нигеҙендә бүленә, ошоға ярашлы, төбәк заявка биреп кенә ҡалмайынса, проект-смета документтарын әҙерләп, уны нигеҙләргә тейеш. Шуға күрә республика министрлыҡтарын һәм ведомстволарын ошондай конкурстарҙа ҡатнашырға һәм еңеп сығырға йүнәлтәбеҙ.

Мин министрҙарҙы һәм вице-премьерҙарҙы республика мәнфәғәттәрен иң юғары кимәлдә яҡлай алыуҙарына ҡарап баһалайым. Беҙгә, әлбиттә, Дәүләт Думаһы депутаттары, шулай уҡ сенаторҙар ярҙам итә. Бергәләп башҡарылған барса эштәребеҙ ҙур һөҙөмтә бирә. 2019 йылдан 2023 йылға тиклем биш йыл эсендә Башҡортостан мәктәптәрендә һәм балалар баҡсаларында быға тиклемге туғыҙ йылдағына ҡарағанда күберәк урындар булдырылған - беҙ 22 004 урынлыҡ 44 мәктәп һәм 9173 урынлыҡ 65 балалар баҡсаһы төҙөнөк. 2022-2023 йылдарҙа дөйөм белем биреү мәктәптәренә капиталь ремонт яһау һәм йыһазлау программаһы буйынса 37,6 мең балаға иҫәпләнгән 140 мәктәпкә ремонт эшләнде. Ошо эштәр өсөн алған аҡса күләме буйынса илдә өсөнсө урынға сыҡтыҡ. Ағымдағы йылда биш миллиард һумлыҡ сумманы үҙләштерергә тейешбеҙ. Беҙҙә заявкалар 2026 йылға тиклем бирелгән. Президент Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә мәктәптәргә капиталь ремонт эшләү программаһының 2030 йылға тиклем оҙайтыласағы хаҡында белдерҙе. Шулай булғас, ул ваҡытҡа тиклем беҙҙә бер генә ләмыҡ иҫкергән мәктәп ҡалмаясаҡ.

Әлбиттә, федераль программаларҙа ҡатнашыу өсөн төбәк бюджетынан ҡушма финанслау булыуы мотлаҡ шарт булып тора. Беҙ үҙебеҙҙең финанс сығымдары иҫәбенә өсөнсө йыл инде колледждарҙы тәртипкә килтерәбеҙ, уҡыу корпустарын һәм дөйөм ятаҡтарҙы ремонтлау өсөн йылына 500-әр миллион һум аҡса бүләбеҙ.

**Төбәктә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына социаль ярҙам саралары һәр даим киңәйеп бара. Һеҙҙең ҡарашҡа, улар өсөн тағы ла нимәләр эшләү фарыз?**

- Беҙҙә хәҙер ошондай ярҙам итеүҙең 39 йүнәлеше бар, улар төрлөсә. Былар МХО-ла ҡатнашыусыларҙың үҙҙәренә лә, уларҙың ғаилә ағзаларына ла ҡағыла. Шәхси торлаҡтарына газ үткәреү сертификаттары бирелә, МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балалары балалар баҡсаһына, түңәрәктәргә һәм секцияларға йөрөгән өсөн түләүҙәрҙе бөтөрҙөк, шулай уҡ улар мәктәптә бушлай туҡлана, колледждарҙа уҡый ала һәм башҡа күп саралар ҡаралған. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың үҙҙәренә хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәр буйынса белем алыу һәм ҡайтанан уҡытыу сертификаттары бирәбеҙ. Улар шулай уҡ республика аҡсаһы иҫәбенә реабилитация үтеү өсөн сертификат алыу хоҡуғына эйә. Йыл һайын ошондай сараларға бюджеттан өс миллиард һум аҡса тотонола, һәм был аҡсаларҙы илебеҙҙең төп мәсьәләһен хәл итеүселәргә йүнәлтәбеҙ. Ниндәй сараларҙың һөҙөмтәле булыуын, яугирҙарыбыҙға һәм уларҙың ғаиләләренә ниҙәр кәрәк икәнен артабан да хәстәрләйәсәкбеҙ.

**Ағымдағы йыл Башҡортостанда һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә иғтибар билдәһе аҫтында уҙа. Тәү башлап оло кешеләрҙе реабилитациялау өсөн финанс саралары бүленә. Республика власының иғтибары тағы ла нимәләргә йүнәлтеләсәк?**

- Йылға ниндәйҙер исем биргән һайын беҙ, әлбиттә, билдәләнгән тема буйынса ниндәй файҙалы эштәр башҡара алыу хаҡында хәстәрләйбеҙ. Хәтеремдә, беҙҙә Торак пункттар эстетикаһы йылы булғайны: газондарҙы, тротуарҙарҙы, яҡтыртҡыстарҙы, ҡоймаларҙы ипкә килтерҙек, бигерәк тә юл буйҙарындағы ҡоймаларҙы төҙә-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә белдереүенсә, республика Өфө өсөн ҙур һыйҙырышлы автобустар һатып алырға ниәтләй. "Башавтотранс" ошо арала "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты буйынса илебеҙҙә сығарылған "ВЕКТОР NEXT 7.6" маркалы 159 яңы автобус алғайны. "Беҙ бәләкәй ҡалаларға һәм ауыл биләмәләренә урта һәм аҙ һыйҙырышлы 250 автобус тапшырыу эшен тамамланыҡ, шулай уҡ туристар өсөн автобустар һатып аласаҡбыҙ", - тип билдәләне транспорт министры Александр Клебанов.

✓Өфө лимонарийында мутлашыуҙың яңы төрө хаҡында иҫкәртәләр. Билдәһеҙҙәр баш ҡала халҡына шылтыратып һәм үҙҙәрен хеҙмәткәрҙәр тип таныштырып, экскурсиялар ойоштороу өсөн паспорт мәғлүмәттәрен һорай икән. "Беҙҙең хеҙмәткәрҙәр экскурсияға яҙылыу өсөн паспорт мәғлүмәттәрен һорап шылтыратмай! Бындай мәғлүмәтте бер кемгә лә әйтмәгеҙ. Улар - мутлашыусылар", - тип белдерҙеләр лимонарийҙа. Бынан алдараҡ "Башинформ" мутлашыусыларҙың мессенджерҙарҙа ялған аудиохәбәрҙәр ебәрергә өйрәнеүҙәре хаҡында яҙғайны.

✓Өфө хакимиәтенең ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығы баш ҡаланың Орджоникидзе һәм Калинин райондарында урынлашҡан торлаҡ һәм торлаҡ булмаған биналарҙы муниципаль ихтыяждар өсөн тартып алыу тураһында ҡарарҙар баҫтырып сығарҙы. Бында һүҙ Яңы Черкассы ҡасабаһында Ю.Гагарин урамындағы 13-сө һәм 16-сы йорттар, Азатлыҡ урамындағы 52-се һәм 54-се йорттар, Май урамы, 9 һәм 9а, Фурманов урамы, 15, Ҡулса урамы,144,146,146 а, 148, Мәсетле урамы, 1, 7, 11а, 12-се йорттар тураһында бара. Ошо авария хәлендә тип танылған йорттар һүтелергә тейеш. Ҡуртымға алыусыларға йәки милекселәргә яңы торлаҡ бирелә йәки уларға фатирҙарының хаҡы ҡайтарыла.

✓Башҡортостан армрестлерҙары Түбәнге Камала армрестлинг буйынса Волга буйы федераль округы чемпионатында һәм беренселегендә 18 миҙал яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығы хәбәр итә. Башҡортостан спортсылары ике алтын, ете көмөш һәм туғыҙ бронза миҙал алды. Шулай уҡ дөйөм команда зачёттарында республика дүрт тапҡыр көмөш призёр булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

теп, уларға эстетик төҫ бирергә теләнек.

Быйыл һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә иғтибарҙы көсәйтергә булдыҡ. Власть вәкилдәре бер нисә мәртәбә улар менән төрлө форматта осрашыуҙар үҙгарҙы, шул иҫәптән "айырылып торған балаларҙың" ата-әсәләре менән дә, һәм мин хәл итергә кәрәк бер төркөм мәсьәләләр булыуын күрҙем. Йәмғиәттең дә уларҙың барлығын күреүе, ошондай кешеләрҙең ярҙамға мохтажлығын белеүе фарыҙ, ҡай саҡта уларға яҡшы һүҙ әйтеү ҙә бик мөһим.

Әлбиттә, матди ярҙам сараларын да күҙаллайбыҙ. Инвалидтарға уңайлы мөхит булдырыуға, объекттарҙы ремонтлауға, абилитация йыһаздарын һатып алыуға сығымдарҙы арттырабыҙ. Норматив базаһына ла билдәле бер үҙгәрештәр индерергә кәрәк. Ошо йыл буйынса эш планы 153 пункттан тора.

"Салют" тип аталған Республика реабилитация һәм белем биреү үҙәген, Социаль һәм хеҙмәт интеграцияһы мультиүҙәген, "Йондоҙ" белем биреү үҙәген, Өфө ҡалаһында "Именлек" геронтология үҙәгенең яңы корпусын һәм Әлшәй районында оло йәштәгеләр һәм инвалидтар өсөн дәүләткә ҡарамаған "Карлуғас" пансионатын асыу быйылғы ҙур проекттар иҫәбенә инә.

Яҡын арала оло йәштәге инвалидтарҙың айырым категорияларын реабилитациялау өсөн сертификаттар бирә башлаясаҡбыҙ. Йыл һайын 2-се һәм 3-сө төркөм инвалидтарына һәм МХО-ла ҡатнашыусыларға номиналы 52 мең һум булған 1715 сертификат биреү ҡарала.

Әйткәндәй, 2024 йылда Башҡортостанда III Халыҡ-ара балалар инклюзив ижади уйындары, Ишетеү буйынса инвалидтарҙың IX Бөтөн Рәсәй йәштәр форумы, Инвалидтар араһында спорт туризмы буйынса XI Бөтөн Рәсәй фестивале уҙғарыласаҡ.

**Өфөлә донъя кимәлендәге вуз-ара кампустың беренсе биналары файҙаланыуға тапшырылды, беҙҙең йәштәр өсөн бындай урын булғаны юҡ ине әле. Нисек уйлайһығыҙ, был объект йәштәргә юғары белемде үҙ республикаһында алыу өсөн бер стимул булып торасаҡмы?**

- Әле үк ситкә уҡырға киткән йәштәргә ҡарағанда, бында белем алырға теләүселәр иҫәбе күберәк. Бында мин вуздарҙы ла, колледждарҙы ла күҙ уңында тотам. Мәктәп тамамлаусыларҙың 90 проценты бюджет урындарында уҡыу мөмкинлегенә эйә. Әлбиттә, йәштәрҙең барыһы ла республикала ҡалырға теләмәй, уларҙың белем артынан Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа китеүен хатта хуплайым да. Иң мөһиме, улар аҙаҡтан кире ҡайтһын һәм беҙ был йәһәттән эшмәкәрлек алып барабыҙ, йәштәр менән осрашабыҙ, республикала булған мөмкинлектәр һәм перспективалар тураһында һөйләйбеҙ.

Кампусҡа килгәндә, ул бөтөн күрһәткестәр буйынса эталон булып тора, ул студентҡа уҡыу, ижад итеү, тулы циклдағы, йәғни, уйланған уйҙан продукт алғанға тиклемге тикшеренеүҙәрҙе тормошҡа ашырыуға тәғәйенләнгән заманса йорт. Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара кампусын төҙөү идеяһы 2021 йылдың авгусында булған осрашыуҙа Рәсәй Президенты тарафынан хупланды. Өфө был стратегик объект урынлашасаҡ майҙансыҡтарҙың береһе итеп һайланды. Кампус өсөн баш ҡалала иң яҡшы урын да табылды, бында университет һәм ғилми ойошмалар, Салауат Юлаев һәйкәле, Конгресс-холл, "Арт-Квадрат" йәштәр майҙансығы, театр һәм музейҙар, "Динамо" стадионы, төҙөкләндерелгән йылға яры - барыһы ла бер ерҙә урынлашҡан. Кампус Өфө фән һәм технологиялар университетына тоташып тора.

Ике йылдан уның икенсе сираты тапшырыласаҡ. Был комплекс үҙара бер стилобат-ҡулса менән тоташтырылған ете башнянан торасаҡ. Бында ятаҡтар һәм йәмәғәт урындары буласаҡ. Шулай уҡ "Фотоника" лабораторияһы, "Мәктәп21" һәм Геном үҙәге лә ошо мәлдә асыласаҡ.

**Бөгөн Беларусь Республикаһы Башҡортостандың стратегик партнеры. Уртаҡ предприятиелар барлыҡҡа килә, ике яҡтың да делегациялары йыш ҡына йә Минскиҙа, йә Өфөлә осраша. Беҙгә улар нимәһе менән ҡыҙыҡлы?**

- Улар үҙҙәренең етештереүсе сәнәғәтен һаҡлап ҡалған, уларҙа юғары технологиялар, инженер компетенциялары, конструктор бюролары бар. Беҙҙең маҡсат - уларҙың инженер базаһын, проект-смета документтарын файҙаланып, үҙебеҙҙә үҙ продукциябыҙҙы етештереү.

Был халыҡты мин үҙем бик ихтирам итәм. Улар тыйнаҡ, әммә шул уҡ ваҡытта эшлекле. Беҙ сәнәғәттә генә түгел, туризм, мәҙәниәт, патриотик эшмәкәрлектә - барлыҡ өлкәләрҙә лә хеҙмәттәшлек итәбеҙ.

Һуңғы өс-дүрт йыл эсендә үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе тәрәнәйтеү йүнәлешендә эшләнек. Өфөнән Минскиға тура рейс асылды, әлегә ул аҙнаһына бер тапҡыр ғына башҡарыла, кәрәк тип табыла икән, осоштарҙы йышайтыу өҫтөндә лә уйлаясаҡбыҙ.

Минскиҙа Башҡортостан вәкиллеге асылды, ул бик яҡшы эшләй. Беларусь Республикаһы менән килешеүҙәр шунда уҡ юл картаһына һалына - хәҙер унда 100 пункт бар һәм уларҙың 40 проценты тормошҡа ашҡан да инде.

**2024 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһы үҙенең оло юбилейын билдәләй. Ошо уңайҙан файҙаланыуға тапшырыласаҡ объекттар һаны байтаҡ ҡына. Шәхсән үҙегеҙ өсөн уларҙың ҡайһыһы әһәмиәтлерәк?**

- Юбилейға алдан уҡ әҙерләндек, мәҫәлән, Өфөнөң парк системаһын тәртипкә килтерҙек. Күп скверҙар ташландыҡ хәлдә ине, хәҙер улар матурайҙы, ҡала халҡы уларға күпләп йөрөй.

Юлдарҙы һәм юл инфрастуктураһын ремонтлау ҙа мөһим эш. Тиҙҙән "Көнсығыш сығыу юлы"н - Өфөнөң Көньяҡ ҡапҡаһын файҙаланыуға тапшырабыҙ. Ул бик ҙур һәм мөһим инфраструктура объекты, Өфөнән М-5 трассаһына сығыусыларҙың ваҡытын һәм ягыулығын экономияларға мөмкинлек бирәсәк.

Ихаталар һәм подъездарҙы ремонтлауға ҙур күләмдә аҡсалар һалынды. Быйыл һәм былтырғы йылда Өфөгә ҙур иғтибар бүленде, сөнки ул барлыҡ республика халҡы өсөн баш ҡала, һәм юбилейына ул матурайырға тейеш.

Совет майҙанын, Аксаков исемендәге баҡсаны, Спорт һарайы майҙанын һ.б. төҙөкләндерҙек. Былтырғы йыл аҙағында реконструкциянан һуң Ҡурсаҡ театры асылды, анығыраҡ әйткәндә, ул тулыһынса яңынан төҙөлдө, майҙаны ике тапҡырға артты. Йәй аҙағына Халыҡ-ара спорт көрәше үҙәге файҙаланыуға тапшырыласаҡ, Фехтование һарайы, ишеү слаломы өсөн комплекс ҡоролмалары төҙөлөшө тамамланасаҡ.

Октябрь революцияһы урамын реконструкциялау, уның мәҙәни мираҫ объекттарын тергеҙеү, йәйәүлеләр өсөн уңайлы урындар булдырыу, транспорт һәм мәғлүмәти инфраструктураны модернизациялауҙы үҙ эсенә алған эре һәм комплекслы проект буйынса эштәр дауам итә.

Юбилейҙан һуң да әллә күпме объекттар тапшырыласаҡ. Баш ҡалабыҙ төрлө яҡлап байрамса төҫ аласаҡ.

**Гөлнара ӘҺЛИУЛЛИНА.**
**"Российская газета".**
**Федераль сығарылыш: №60 (9302)**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн, ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## ФӘЙЗУЛЛА ВӘЛИ УЛЫ СОЛТАНОВ

Ф.В. Солтанов - совет осороноң күренекле партия һәм дәүләт эшмәкәре.

Ул 1922 йылдың 15 октябрендә Башҡорт АССР-ының Йылайыр кантоны, хәҙерге Ейәнсура районының Байдәүләт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Башланғыс белемде тыуған ауылы мәктәбендә ала.

Стәрлетамаҡ педагогия техникумын тамамлағандан һуң, 1939-1941 һәм 1943-1946 йылдарҙа Ейәнсура районы мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләй. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. 1946 - 1958 йылдарҙа комсомол һәм партия органдарында төрлө вазифалар биләй. 1956 йылда К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтын, ә 1962 йылда КПСС Үҙәк комитеты ҡарамағындағы Ижтимағи фәндәр академияһын тамамлай.

1962 йылдан Бөрө дәүләт педагогия институты ректоры, 1963 йылдан КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитеты секретары була. 1967-1990 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы рәйесе булып эшләй. Фәйзулла Солтанов Мәскәүҙәге ҙур сараларҙа республикабыҙҙы таныта, юғары партия форумдарында ҡатнаша. Шул осорҙа БАССР-ҙың 7-11-се саҡырылыш Юғары Советы, 1971 йылдан 1990 йылға тиклем РСФСР-ҙың дүрт саҡырылыш Юғары Советы депутаты итеп һайлана. Тап ошо йылдарҙа республикабыҙ иҡтисади һәм мәҙәни өлкәләрҙә ҙур уңыштар яулай. СССР-ҙа Башҡортостан юғары үҫешкән сәнәғәт төбәге булараҡ танылыу яулай: нефть табыу һәм уны эшкәртеү, нефть химияһы предприятиелары ҙур илдең иң алдынғыларынан һанала. Ауыл хужалығы йылдан-йыл яңы техника менән тәьмин ителә, баҫыуҙарға органик һәм минераль ашламалар күпләп сығарыла. Ҡалаларҙа торлаҡ төҙөлөшөнә ҙур иғтибар бирелә, хеҙмәтсәндәрҙең тормош сифаты яҡшыра бара.

Фәйзулла Вәли улы Солтанов 1992 йылдың 24 ноябрендә 71-се йәшендә вафат була. Ул Өфөләге мосолман зыяратында ерләнгән. Күренекле дәүләт эшмәкәренең исеме Ейәнсура районы үҙәге - Иҫәнғолдағы урамға һәм 1998 йылда асылған 3-сө урта мәктәпкә бирелгән. 2002 йылда уның тыуыуына 80 йыл тулыу айҡанлы Өфөнөң Энгельс урамындағы 1-се йортҡа мемориаль таҡтаташ ҡуйыла. Фәйзулла Вәли улының тыуған ауылы Байдәүләттәге башланғыс мәктәптә лә иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылған. Наградалары: Ҡыҙыл Йондоҙ (1966), "Почёт билдәһе" (1966), ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1971, 1976), 1-се дәрәжә Ватан һуғышы (1985), Халыҡтар дуҫлығы (1982) ордендары менән бүләкләнә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Армыт

Армыт (груша обыкновенная) 30 метрға тиклем бейеккә үҫкән, ботаҡтары сәнскеле, япраҡтары оҙонса, аҡ йәки алһыу сәскәле ағас. Ул апрель-май айҙарында сәскә ата, емеше сентябрь аҙағы-октябрҙә өлгәрә. Армытта С һәм РР витаминдары, арбутин, хлороген кислотаһы, тимер һәм дуплау матдәләре күп, бигерәк тә ҡыр ағасында. Дауаланғанда бешкән емештәрен ҡулланалар. Армыт ашҡаҙан-эсәк юлының эшмәкәрлеген көйләй. Емеше бешкән һыуҙы йүтәлләгәндә һәм бәүел бүленеүен дауалауҙа ҡулланалар. Шулай уҡ ул юғары температураны төшөрә. Армыт һәм һоло бешерелгән һыуҙарҙы бергә ҡушып, эс китеүҙән дауаланалар.

❖ Эс китеүҙән, аллергиянан 100 грамм киптереп ваҡланған армытҡа 1 литр һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға. 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 100 грамм һоло йәки геркулесҡа 1,5 литр һыу ҡойоп, 20 минут ҡайнатырға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Үрҙә күрһәтелгәнсә әҙерләнгән армыт һыуына ҡушырға. Көнөнә 2 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. Был аллергияны дауалағанда файҙалы.

❖ 100 грамм киптереп ваҡланған армытҡа 1 литр һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға. Һыуыҡ һыуға крахмал иҙеп, шуны ҡайнап ултырған армыт һыуына ҡойорға. Болғата-болғата бешерергә. Һыуытырға һәм көнөнә 1-әр стакан эсергә.

### Ҡыҙыл көртмәле

❖ Үпкә туберкулезынан 2 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут быуҙа тотоп, һыуытырға. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙан яман шешенән 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡыҙыл көртмәле япрағына 2 стакан эҫе һыу ҡойоп, ауыҙы ябыҡ эмалле һауыт менән һыу парында 15 минут ҡайнатырға, бүлмә температураһында 45 минут һыуытҡандан һуң һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда сирек стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Мин доғалар һәм ихтыярым ярҙамында нығынғанмын. "Хоҙайым, балаларым өҫөн мине ошо ут эсенән һаҡлап, иҫән-һау тыуған илемә ҡайтар!" тип доғалар уҡып йөрөйөм инде. Араҡы эсмәү, тәмәке тартмау Хоҙайға ышанысты нығыта.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡушбаш өйрәк, балыҡсы өйрәк**

**(Большой крохаль)**



Һуна өйрәктән ҙурыраҡ. Ҡушыға оҡшаған, әммә ҡушбаш өйрәктең ҡабырғалары һәм ҡурылдайы ап-аҡ, ата ҡушбаш өйрәктең өлтөгө лә ҡыҫҡараҡ. Башы, муйынының өҫкө яғы ялтырап торған ҡара төҫтә. Тәпәйҙәре сағыу ҡыҙыл, күҙҙәре ҡара. Инә ҡоштоң башы һоро, арҡаһы көл төҫөндә, ошо ике төҫтөң бергә ҡушылып киткән ере ныҡ беленеп тора. Ата ҡош "ба-боб" тип тауыш бирһә, инә өйрәк ғыжылдай ғына.

Рәсәйҙә Кольский ярымутрауынан алып Сахалинға тиклем урман зонаһында осрай. Башҡортостанда 2-се категорияға ҡарай, йәғни ҡушбаш өйрәк аҙ һанлы, республиканың ҡайһа бер урындарында ғына осрай.

Урал алды райондарында күренгәне юҡ. Шулай ҙа Ҡариҙел йылғаһының һәм уның Өфө платоһындағы ҡушылдыҡтарында һирәк кенә булһа ла осратырға була. Ғалимдар Ильичев, Фомин фекеренсә, ҡушбаш өйрәк Көньяҡ Уралдың таулы йылғаларының барыһында ла бар.

Беҙҙең тикшеренеүҙәр буйынса, өйрәктең был төрө иһә Ағиҙелдең таулы урындар буйлап аҡҡан урындарын үҙ итә. Мәҫәлән, 2001 йылда теркәлеүенсә, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы территорияһында ҡушбаш өйрәк йыш осраған өс ҡош иҫәбендә тора. 2001-2002 йылдарҙың йәйендә 75 ҡушбаш өйрәктән торған ҡош тубын Ағиҙел буйында осраттыҡ, БДУ-ның Нуғай ауылы эргәһендәге ғилми базаһы тирәһендә ошо уҡ йылға буйында 1 инә ҡош йөҙөп йөрөгәнен күрҙек. Ҡушбаш өйрәк шулай уҡ "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы сиктәрендә, Мәләүез ҡалаһы янында осраған.

Ҡушбаш өйрәк ояһын ташлы урындарға, ағас тамырҙары аҫтына ҡора. Май аҙағына 8-9 йомортҡа һала, 32-35 көндән бәпкәләр сыға. Ата ҡош оя тирәләй һаҡлап йөрөй һәм ниндәйҙер ҡурҡыныс тыуһа, үҙенә иғтибар йүнәлтә. Йәш ҡоштар инәләре менән һыуҙа үҫә. 60 көнлөк булғас, осорға өйрәнәләр.

Башлыса балыҡ менән туҡлана. Октябрь баштарында осоп китә, беҙҙә оя ҡорған ҡоштар Балтик һәм Төньяҡ диңгеҙҙәрҙең ярҙарында ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ИЛЬӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ



# ЙӨРӘКЛЕ ЕГЕТТӘР...

## боҙло һыуға ла, ут эсенә лә инә ала

**Махсус хәрби операцияға үҙ теләге менән барыусы Баймаҡ районының Беренсе Эткол ауылы ир-уҙаманы Артур ХИСМӘТУЛЛИН отпускыға ҡайтып китте. Беҙ быға тиклем Артурҙы биш балаға - бер уланға, дүрт ҡыҙға атай булған өлгөлө ғаилә башлығы булараҡ белә инек. Тыуған ауылында сәләмәт, айыҡ тормош өсөн фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтеп, бар башланғыстарҙың алдында ла йөрөнө ул, күп кенә сараларҙың бағыусыһы ла булды. Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитендә лә эшләп алды Артур. Шуға күрә лә, отпускыға ҡайтып төшөү менән редакцияға килеп сыҡты ул. Уның менән әңгәмә лә ҡорҙоҡ.**

**➔ Артур, һин 5 бала атаһы булараҡ, Махсус хәрби операцияға бармайынса ла ҡала ала инең. Моғайын, тота килеп күтәрелеп сығып китмәгәнһеңдер. Унда барыуыңдың төп сәбәбе нимәгә бәйле булды?**

- Махсус хәрби операцияға барған йәш кенә егеттәрҙең һәләк булыуҙарын бик ауыр кисерҙем. Өйләнеп тә, нәҫелдәрен дауам итеп тә өлгөрмәгәндәре донъялыҡ менән хушлаша. Ата-әсәйҙәр улһыҙ, кәләштәр кейәүһеҙ, күпме балалар атайһыҙ тороп ҡала! Ошо хәлдәр йышайғас, йоҡлай алмай башланым. Йоҡоларым да ҡыҫҡарҙы: биш сәғәттән дүрт сәғәткә, өскә, икегә ҡалды. Шул саҡта үҙемдә яйлап әҙерләй башланым да инде. Бер ваҡыт кәләшем: "Ана, минең ҡустым, ҡәйнешең дә Украинаға китеп бара", - тип хәбәр һалды. Ике көн эсендә комиссия үтеп, ҡәйнешем менән бергә киттем дә барҙым. Ҡапыл ғына ҡуҙғалып сығып китһәм дә, унда барырға күңелем менән күпкә алда әҙер инем инде.

**➔ Һин бит инде диңгеҙ десанты ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иткән Рәсәй армияһы сержанты. Тәжрибәң менән дә уртаҡлашҡың килгәндер, шулаймы?**

- Хәҙер технологиялар һуғышы, автоматтар менән атышып йөрөмәйҙәр. Иң мөһиме, психологик әҙерлек кәрәк. Үҙемдән әрмелә алған тәжрибәмдең кәрәклеген мин барғас та аңланым һәм тәүге тапҡыр дары еҫкәүсе һалдаттарға терәк тә була алырмдың тойҙом. Әммә тыныс шарттарҙа үткән әрме тормошонан Махсус хәрби операция ныҡ айырыла. Әрмелә үҙенде һәр яҡлап һуғыш өсөн әҙерләйһең бит инде. Бөгөн килеп шул тәжрибәмде ысын һуғышта ҡулланырмын тип күҙ алдына ла килтермәгәйнем. Дрондарҙан айырыуса һаҡ булырға тура килә. БМП-ла ла көндөҙөн йөрөп булмай, төндәрен генә йөрөйбөҙ. Ҡыҫҡаһы, хәҙерге хәрби хәрәкәт беҙ тарихтан белгән барлыҡ һуғыштарҙан да ҡырҡа айырыла. Күбеһенсә һуғыш һауанан бара.

**➔ Ата-әсәйең, туғандарың, ҡатының, балаларың был аҙымыңа нисек ҡараны?**

- Бәләкәй саҡта һуғыштың бар ауырлығын татып, Германияға тиклем барып етеп, аяғын юғалтып ҡайтҡан ҡарттатайымдан һуғыш тураһында һорашһам: "Һуғышты, балам, дошманыңа күрһәтмәһен", - тип әйтә торғайны. Әле килеп уның әйткәндәрен бар тулылығында аңланым. Был йәһәттән әрме уйын ғына булған икән.

Атайым менән әсәйем минең Украинаға йыйыныуымды белгәс: "Хәҙер бала-саға түгелһең, һинә аҡыл өйрәтергә түгел, үҙең беләһең", - тинеләр. Кәләшем дә ил һаҡлауға бәйле бурысымды дөрөҫ аңлап, фатихаһын бирҙе. Улым Азамат та минә ышанысын белдерҙе, ҡыҙҙарым да илап ҡалманы.

**➔ Элегерәк беҙҙең яҡта шундай хәлдәр була торғайны. Көндөҙ күрше ауылдан бер егет беҙҙең ауылдың бер ҡыҙына килә лә, сәмсел ауыл егеттәренән кәрәгенә алып ҡайтып китә. Төндә егет дуҫтарын эйәртеп, "карымта"ға килә. Шул саҡта беҙгә бер һыҙғырыу етә торғайны. Ҡумаклап сығып, тегеләргә ҡаршы торабыҙ. Әммә был осраҡта бындай хәл нилектән килеп сығыуы тураһында беребеҙ ҙә төпсөнөп, һүҙ ҡуйыртып тормаҡ. Ә бит Махсус хәрби операция башланғас, "гәйеплене эҙләп" һүҙ буткаһы бешереүселәр булды. Ошо хәлгә ниндәй баһа бирәһең?**

- Халыҡта шундай мәҡәл бар: "Ҡумаклағән яу ҡайтарған". Беҙҙең халыҡта ир-аттың төп бурыстары араһында илде һаҡлау тигәне лә бар. Был бурыс беҙҙә ҡан кимәлендә нығынған. Ә инде ошо хәлдең кем тарафынан башланғанын тикшерә башлаһаҡ, илебеҙ менән енелеп ҡалыуыбыҙ ҙа ихтимал. Ил саҡырғас, яуға китә инде ир-егет. Мәңге шулай булған.

**➔ "Иртәгә үләм тип доға ҡыл, мәңге йәшәйем тип мөлкәт тупла" тиҙәр. Бәндәне былай тормошта ла һәр ваҡыт әжәл һағалай. Өҙләкһеҙ машиналар ағылған ҡала урамында ла, һаҡһыҙлыҡ күрһәтһәң, һәләкәткә осрауың бар. Ә бына әле һин ҡатнашҡан Махсус хәрби операцияла әжәл иң яҡыны, секундтар арауығы. Был халәт кешенең тормошҡа ҡарашын ниндәй кимәлдә үҙгәртә? Был үҙгәреште һин үҙеңдә һәм башҡа егеттәрҙә нисек тояһың?**

- Үҙгәреш төрлө кешелә төрлөсә булалыр. Мин үҙем, мәҫәлән, эсмәгәс-тартмағас, доғаларҙы белгәс, ундай хәлдә еңелерәк кисерәм. Сөнки тыныс тормошта ауыр ситуацияларҙа эскән-тартҡан кеше ошо ысулдар менән күңелен тынысландырыуға өлгәшә. Мин иһә был йәһәттән доғалар һәм ихтыярым ярҙамында нығынғанмын. "Хоҙайым, балаларым өҫөн мине ошо ут эсенән һаҡлап, иҫән-һау тыуған илемә ҡайтар!" тип эстән доғалар уҡып йөрөйөм инде. Араҡы эсмәү, тәмәке тартмау Хоҙайға ышанысты, ихтыярыңды нығыта.

**➔ Владимир Путин бер нисә тапҡыр тарихтағы һәм хәҙерге замандағы Рәсәй нағында торған башҡорт яугирын билдәләп үтте. Беҙҙең егеттәргә унда мөнәсәбәт нисек?**

- Беҙҙең егеттәр ҡыйыу, ҡурҡыу белмәй. Беҙҙең батальондар һуғышҡа бер башын тыҡһа, кире боролмай. Күрәһең, ҡаныбыҙҙа ятҡан яугирлыҡ тап шунда уяналыр. Офицерҙар алдында беҙҙең егеттәр яҡшы иҫәптә.

**➔ Гуманитар ярҙам йәһәтенән һин хеҙмәт иткән батальон нисек тәьмин ителә?**

- Беҙ кәрәкле булған барлыҡ ярҙамды алып торабыҙ. Сит өлкәләрҙән килгән һалдаттарға ла өлөш сығарабыҙ, таратып бирәбеҙ. "Беҙгә сәй ҙә юҡ, шәкәр ҙә юҡ" тиеүселәр ҙә бар.

**➔ Унда һеҙҙең башҡорт теле мөхите бармы?**

- Әлбиттә, бар. Мин бында шуны ла өҫтәр инем: һуғышта һалдаттарҙы туған тел мөхитенән дә нығыраҡ берләштергән тойғо юҡтыр. Беҙ саҡ ҡына буш ваҡыт булһа, күмәкләшеп башҡорт йырҙарын йырлайбыҙ. Күңел күтәрелеп ҡала. Һуғышта иң ауыры - яуҙаштарыңды юғалтыу.

**➔ Әле отпускыға ҡайтҡанда балаларың нисек ҡаршыланы?**

- Балаларым ҡыуанып ҡаршыланы. Ун биш йәшен тултырған улым Азамат Махсус хәрби операция барған ерҙә нимәләр булғанын яҡшы аңлай, шуға күрә минең һәм үҙенең күңелен һаҡлар өсөн артыҡ һорашмай, балиғ йәшенә еткән кеше булараҡ, ярама тоҙ һалмай. Барыһын да һүҙһеҙ аңлай. Ҡыҙҙарым да һорашмай, бәләкәстәре әле аңлап етмәйҙәр.

**➔ Махсус хәрби операцияға барғанға тиклемге Артур менән хәҙерге Артур араһында ниндәй айырма бар? Тормошҡа ҡарашың ниндәй кимәлдә үҙгәрҙе?**

- Әле бына бында ултырһам да, уйҙарым менән егеттәрем янындамын. Бергә йөрөгән егеттәр отпускыға ҡайтып килгәс, барыһы ла кире Украинаға тартылып тороуҙары хаҡында әйткәйнеләр. Күрәһең, унда булған кеше өсөн тыныс тормошта ҡалыу хас түгелдер. Бигерәк тә яуҙаштарын ут эсендә йөрөгәндә. 2014 йылдан бирле шунда йөрөгән 65 йәшлек бер яугир менән таныштым. Позывнойы - "Бабай". Ул: "Тыуған яҡҡа ҡайтам да, бер ай ҙа тормайынса, кире бында киләм. Балаларым менән һүҙгә килешеп бөттөм. Тыныс тормошта йәшәй алмайым", - ти.

**➔ Һуғыш кешенең мейеһен тиҙерәк эшләтә. Имен-аман илгә ҡайтҡас, үҙ эшеңдән тыш тағы ла нимәләр эшләргә йыйынаһың?**

- Тыныс тормоштоң ҡәҙере ут эсендә нығыраҡ беленә. Шуға күрә бар тырышлығымды һалып эшләрмен, балаларымды кеше итергә фиҙаҡәрлек күрһәтермен, тием. Азамат улымды кадет корпусына уҡырға әҙерләйбеҙ.

**➔ Беҙ "Киске Өфө" гәзитендә бергәләп эшләп тә алдыҡ, Артур. Иҫләйһеңме, Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы: "Егеттәр, ҡыҙҙар, һеҙ үҙегеҙҙе боҙло һыуға ташлап өйрәнегеҙ. Шулай итһәгеҙ, ауырлыҡтарҙы еңел үтерһегеҙ", - тип әйтә торғайны. Үҙеңде боҙло һыуға ташлап өйрәндеңме?**

- Гәзиттең баш мөхәрриренең ошо наҡазына эйәреп, Өфө - Сибай - Баймаҡ араһында йөрөүсе "Нур" такси бизнесымды ойошторғайным бит инде. Мин хәҙер инде үҙемдә боҙло һыуға ғына түгел, ут эсенә лә ташлап сирҡаныс алдым!

**➔ Артур, изге бурысыңды намыҫ менән үтәп, тыуған яғыбыҙға имен-аман әйләнеп ҡайтырға насип булһын үҙеңә!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### VI - VIII быуаттарҙа Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең хужалығы һәм ижтимағи тормошо

VI - VIII быуаттар ҡомартҡыларында ситтән килтерелгән йәҙрләгән әйберҙәрҙең булыуы төрлө йүнәлештәге сауҙа-иҡтисади бәйләнештәр хаҡында һөйләй. Ошо йәһәттән көньяҡ тарафтарын - иң элгәре боронДан уҡ үҙҙәренең сығышы, иҡтисады һәм мәҙәниәте менән бәйле Кангюйҙы атап була. Йәнә тағы ла бер тапҡыр быуна нимәне һыҙыҡ өҫтөнә алыу кәрәк: Көньяҡ Уралдағы күсмә һәм ярым күсмә малсылыҡ менән көн итеү шарттарында ҡыштарын көньяҡҡа меридиаль күсеп китеүгә һәм яҙ-йәй миҙгелдәрендә кире ҡайтыуға мохтажлыҡ булған, шуға күрә VI - VIII быуаттар ҡәбиләләре өсөн көньяҡ менән бәйләнештәр уларҙың ҡәҙимге йәшәү рәүешенә тура килгән. Уралға көньяҡтан металлургия һәм керамика өлкәләрендә маһир булған оҫталар-һөнәрселәр килгән, тип фараз итергә була, әммә уларҙың үҙ тауарҙарын урындағы шарттар һәм традициялар йоғонтоһонда етештереүе хаҡында ла әйтеп үтмәйенсә булмай. Уларҙың һөнәри оҫталығын урындағы һөнәрмәндәр ҙә үҙләштергән. Ошо дәүерҙә эшләнгән әйберҙәрҙең күпселеге бер үк схема буйынса яһалғаны раҫ.

Көньяҡ Урал ҡәбиләләре көньяҡ тарафындағы төбәктәргә йөнлек тиреләре, бал, металл сығарып, алмашҡа ювелир әйберҙәре, ебәк туҡымалар һәм башҡа тауарҙар алған. Әйткәндәй, ебәк туҡыма киҫәктәре бер нисә бай әйберле турбаҫлы ҡәберлектәрендә - Өфө ҡалаһындағы медицина институты бинаһы аҫтында һәм Бөрө ҡалаһы янындағы бахмут ҡомартҡыһында табылған. Көньяҡ тарафтарынан килтерелгән әйберҙәр иҫәбендә быяла кубоктарҙы, алтын һырғаларҙы, медальондарҙы, быяла һәм гәрәбә муйынсаҡтарҙы, бил ҡайыштарындағы биҙәүестәрҙе атап үтергә була. Ошо уҡ фаразды Волга буйында, Кавказда, Ҡырымда, Себерҙә һәм Ҡаҙағстанда табылған йәҙрләгән, меңәрләгән әйберҙәр раҫлай, әммә әлегә ошондай әйберҙәрҙе етештереү үҙәктәрен билдәләү мөмкин түгел.

Иртә урта быуаттарҙа Урал үҙәнең тәбиғи байлыҡтары менән алыҫ илдәрҙең ҡыҙыҡһыныуын уятҡан, ә Кангюй ошо йәһәттән бәйләнеш звеноһы ролен үтәгән.

Быны ошо осорҙа Уралда сасанидтарҙың Иран һәм Урта Азия оҫталары-ювелирҙарының көмөштән ҡойолған әйберҙәренең киң таралыуы раҫлай. Улар иҫәбендә кубоктар, һауыт-һабалар, шулай уҡ ҡайһыларында мифологик сюжеттарҙы сағылдырған һүрәтле, алтын ялатылған көмөш кувшиндарҙы атап китергә мөмкин. Ошондай әйберҙәрҙе сәнғәт шедеврҙары тип атап була, һәм улар бик ҡиммәтле тауарҙар иҫәбенә ингән. Белгестәр Көнсығыш Европа территорияһында һәм Себерҙә табылған ҡиммәтле әйберҙәрҙең дөйөм һанын 200-ләп тип билдәләгән, уларҙың күбеһе Уралда - Пермь крайында, Екатеринбург өлкәһендә һәм Башҡортостанда табылған (мәҫәлән, Ғафури районында - (көршәк), Шишмә районында (табаҡ).

Шулай итеп, археологик материалдар Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең көньяҡ илдәре менән киң күләмле сауҙа-иҡтисади бәйләнештәре булыуын раҫлай. Ошо нигеҙҙә был төбәктә тауар-аҡса әйләнеше булыуы хаҡында ла һығымта яһарға була. Быны Урал ерлегендә көньяҡ тәңкәләренән торған иң тәүге ҡаҙылма хазиналар табылыуы ла раҫлай. Ошондай тәңкәләр иҫәбенән Көньяк Уралда (Шестаково) һәм Пермь крайының Бардым районында табылған VI-VII быуаттарҙағы Византия аҡсаларын атап үтергә була. Ошо дәүергә ҡараған аҡсалар Урта Волга буйындағы именьков ҡәбиләләре торлаҡтарында - уларҙың ярым ер өйҙәрендә табылған.

VI - VIII быуаттарҙа Көньяк Урал ҡәбиләләре Көнбайыш Төрки ҡағанаты хакимлығына буйһоноп йәшәгән. Бында көньяҡ далаларынан килеп ерләшкән ҡәбиләләрҙең төбәктең төп халҡын тәшкил итеүен, шулай уҡ көньяҡ мәҙәниәтенең урындағы ҡомартҡыларҙағы сағылышын иҫәпкә алған хәлдә, турбаҫлы, кушнаренко, бахмут ҡәбиләләренең Көнбайыш Төрки ҡағанаты халҡына ҡараған хаҡында ышаныслы итеп әйтергә була. Шулай булғас, урындағы ҡәбиләләр мәҙәниәтен дә Көнбайыш Төрки ҡағанатының Көньяҡ Урал варианты итеп ҡарарға була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Висла йылғаһында оборонала

32-се танк полкы командиры бойороғо нигеҙендә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән билдәләнеүселәр: урта танк башняһы командиры, кесе сержант Иван Глушаков; урта танктың механик-водителе, өлкән сержант Хаван Ибраһимов (ҡаҙаҡ егете, Саҡмағош районынының "Донбасс" колхозынан); кесе сержант, разведчик Алексей Попов; кесе сержант, Т-34 танкы радиотелеграфист-пулеметсыһы Илья Прутков; сержант, Т-34 танкыһының механик-водителе Иван Мельников; кесе сержант, автоматсылар отделениеһы командиры Дмитрий Фарафонов; автоматсы, рядовой Динислам Нафиков, (Өфө ҡалаһынан). Атап кителгән яугирҙар Польшаның Хелм һәм Люблин ҡалалары өсөн барған алыштарҙа батырлыҡ өлгөләрен күрһәтә. Улар, алғы рәттә барып, дошмандың орудиеларын тапап уҙа, дзоттарын һәм пулемет нөктәләрен ҡыйрата.

Гвардии өлкән лейтенанты Халиҡов Миңлеғәли Миһран улы Көйөргәҙе районының Кесе Муса ауылында тыуып үҫкән. Ул дивизия формалашҡан ваҡыттан бирле хәрби хеҙмәттә була һәм яуаплы вазифалар биләй. 1942 йылда Брянск фронтында 275-се атлы полкта разведка взводы менән командалыҡ итә. 1943 йылдың июленән шул уҡ полкта эскадрон командиры була. Уның эскадроны барса алыштарҙа: Сталинград фронтында, Днепрҙа, Белоруссияның Слобода, Слободка, Моисеевка ауылдары райондарында ҡыйыу эш итә. Халиҡов алыштарҙың береһендә контузия ала, һауығып сығыу менән дивизияға ҡайта. 1944 йылдан һуғыш тамамланғансы 58-се гвардия атлы полкында аҙыҡ-түлек һәм фураж менән тәьмин итеү буйынса начальник урынбаҫары һәм начальнигы вазифаһында хеҙмәтен дауам итә. Ул I и II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдар менән бүләкләнгән. Халиҡов Миңлеғәли Миһран улы һуғыштан һуң Йомағужа районында һәм Күмертау ҡалаһында төрлө административ-хужалыҡ органдарында яуаплы вазифалар биләй.

### Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

1-се Белорус фронтының Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһы 1945 йылдың 14 ғинуарынан 3 февралгә тиклем дауам итә. Унда 7 дөйөм ғәскәр армияһы, шулай уҡ 1-се һәм 2-се гв. танк армиялары, Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы, 16-сы һауа армияһы, 2-се һәм 7-се гв. атлы корпустары, 9-сы һәм 11-се танк корпустары ҡатнаша. Операцияның маҡсаты - дошмандың "А" армиялар төркөмөн (1945 йылдың 26 ғинуарынан - "Үҙәк" армиялар төркөмө) тар-мар итеү, Польшаны оккупанттарҙан тулыһынса азат итеү, Берлинға хәл иткес һөжүм башлау өсөн унайлы шарттар тыуҙырыу. Операция барышында немец армиялары төркөмдәрен бүлгеләп, һәр береһен айырым юк итеү күҙаллана. Һөжүмдең төп йүнәлеше - Магнушев плацдармынан Кутно һәм Познань ҡалаларына табан. 69-сы һәм 33-сө армиялар, 7-се гв. атлы корпусы Пулав плацдармынан Радом һәм Лодзь ҡалаларына йүнәлешендә һөжүмгә күсыла. Операцияның 4-се көнөнә Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы, 47-се, 61-се армиялар һәм 2-се гв. танк армияһы менән бергә хәрәкәт итеп, дошмандың Варшава төркөмөн тар-мар итергә һәм Варшава ҡалаһын азат итергә тейеш була.

7-се гв. атлы корпусына, Радом, Томашув-Мазовецки, Лодзь ҡалалары йүнәлешендә һөжүм итеүсе 69-сы һәм 33-сө армиялар артынса ҡуҙалып, дошман оборонаһын өҙөү бурысы ҡуйыла. Корпус алыштарға операцияның 3-сө көнөндә 9-сы һәм 11-се танк корпустары менән бергә инә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



**"Урй" - ҡысҡырыу, һөрәнләү, тауыш. Әйтем бар: "Урй ҡобса, уғуш аклышур, йағи кәлсә, имрам табрашур". Был тауыш ишетелгәндә - кеше йыйылыр (ярҙам итер өсөн), дошман килһә, алышҡа отряд йыйылыр, тигәнде аңлата. Кемдәлер ниҙәлер бергәләп башҡарыуға саҡырғанда ҡулланыла".**

Мәхмүт әл Ҡашғариҙың һүҙлеген рус теленә тәржемә итеүселәр бер үк һүҙҙәрҙе һәм аңлатмаларҙы бер төрлө генә тәржемәләмәй. Был осраҡта, әлеге "урй" һүҙенә русса бирелгән аңлатманың башҡортсаға тура тәржемәһенән башҡа, уны башҡорт теле аша ентекләберәк һәм, бәлки, дөрөҫөрәк итеп биреп булалыр. **"Урй ҡобса, уғуш аклышур"** - тауыш ҡупһа, нәҫелдәштәр яҡлашыр, тип аңлатыу раҫтыр. "Уғуш" йә иһә "оғуш" һүҙен ырыу (род), ҡәбилә (племя) рәүешендә лә тәржемәләйҙәр (ҡаҙаҡ тәржемәсеһе Зифа-Алуа Ауэзова). Ошо боронғо төрки һүҙенең тамыры "уғ-оғ" икән, "уғуш" - бер "уҡ" кешеләрен, ырыуҙаштарҙы белдерә, тип фараз итергә була. **"Йағи кәлсә, имрам табрашур"**. "Йағи кәлсә" - яу сыҡһа, йәғни дошман килһә. Ҡашғариҙың шул уҡ һүҙлегендә "имрам" һүҙенә ошондай аңлатма бирелә: ниндәйҙер бер эш өсөн көрәшкә сыҡҡан бер төбәк кешеләре; **"Имрам тиришти (табрашти?)" - кешеләр хәрәкәткә килде.** Тимәк, Ҡашғари миҫал өсөн килтергән әйтемде телебеҙҙә ошолай итеп күрһәтеп була: "Тауыш ҡупһа - ырыуҙаштар яҡлашыр, яу килһә - халыҡ ҡуҙғалыр".

Хәҙерге башҡорт телендә "урй(ы)" һүҙе юҡ. Шулай ҙа ошо уҡ мәғәнәләге "оран" һәм "һөрән" һүҙҙәрендә "ур-"ға тап килгән "ор-", "һөр-" тамырҙарын шәйләп була. Оран - башҡорт ырыуҙарында яугирҙарҙың алышҡа ингән мәлендә ҡулланыла торған яуға саҡырыу, рух күтәреү һүҙе, уны күмәкләп, көслө тауыш менән ҡысҡырып һөрәнләгәндәр. Йәнә рус телендәге "ор" һүҙенең шулай уҡ шаушыу, ҡысҡырыш тигәнде аңлатыуы ҡыҙыҡлы. Был осраҡта ошо "ур-ор-" тамырының бик боронғо замандарҙан бирле ҡулланыла башлауын фаразларға мөмкин.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

*✔ Башҡорт мөхитендә үҫеп, тыуған телемде өйрәнеүҙән мин тик өҫтөнлөктәр генә алдым. Шуға ҡайһы бер милләттәштәрҙең, балам рус телен белмәйенсә көлкөгә ҡалып ҡуйыр, тигәнерәк шик-шөбһәләрен ишетһәм, ғәжәпләнәм.*



# СИТ ИЛДӘРГӘ СЫҒЫП

## тыуған Башҡортостаныңа

**Йәмәғәт эштәрендә әүҙем, уҡыуында алдынғы, хеҙмәтендә уңыш ҡаҙанған һәм тиҫтерҙәре араһында абруйлы башҡорт йәштәре менән таныштырыуҙы дауам итәбеҙ. Был юлы "Ҡош юлы" фестиваленең, Әбйәлил йәш яҡташтар ойошмаһының етәксеһе һәм башҡа төрлө йәмәғәт эштәрендә әүҙемсе, "КОРУС Консалтинг" ИТ-компанияһының бизнес-аналитигы Шәфҡәт ҒӘБИТОВ һәм Мәскәү дәүләт университетын "ҡыҙыл" дипломға тамамлап, Францияла магистратурала белем алып, бөгөн илебеҙҙең алдынғы нефть-газ компанияларының береһендә инженер Гүзәл ӘЛИБАЕВА менән әңгәмәләштек.**

**Һеҙҙе башҡорт мәктәптәрендә белем алған, башҡорт мөхитендә тәрбиәләнеп үҫкән йәштәр тип беләбеҙ, был артабанғы тормош юлығыҙға нисек тәьҫир итте?**

**Ш. Ғәбитов:** Мин үҙем Әбйәлил районынан, ә 2008 йылда баш ҡалалағы Республика башҡорт лицей-интернатына 7-се класҡа уҡырға килдем. Бер мәктәптә генә уҡығас, башҡалар менән сағыштыра алмайым, әммә шунда белем алыуыма бик шатмын, ғорурмын. Сөнки унда тик егеттәр генә уҡыныҡ һәм бик яҡын аралашып, дуҫлашып йәшәнек. Бында физика һәм инглиз теле буйынса төплө белем бирҙеләр, шуға артабан Башҡорт дәүләт университетының физика факультетын һайлауыма аптырарға ла түгелдер. Уны тамамлағандан һуң М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның психология факультетында магистратурала белем алдым. Башҡорт мәктәптәрендә белем алған, башҡорт мөхитендә тәрбиәләнеп үҫкән таныштарым бик күп, улар араһында Өфө ҡалаһының милли белем усаҡтарын тамамлаусылар ҙа байтаҡ һәм тап шул йәштәрҙе бөгөн йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы эштәр атҡарыусылар, әүҙемдәр тип беләм.

**Г. Әлибаева:** Тап шулай. Мин үҙем Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында белем алдым һәм беҙ уҡыған саҡта бик күп төрлө сараларҙа ҡатнаша инек. Мәктәп йылдарындағы дуҫтарым, таныштарым менән әле лә аралашып, бер-беребеҙҙең уңыштарына шатланып, күтәрмәләп торабыҙ. Мәскәүгә уҡырға киткәс тә был бәйләнеш өҙөлмәне, унда ла башҡорт йәштәрен берләштергән үҙ ойошмабыҙ булдыу ҡыуандырҙы. Был мөхиттә үҫеү, тәрбиә алыу миңә оло тормошҡа аяҡ баҫҡас та үҙ-үҙемде юғалтмаҫҡа ярҙам итте. Мәскәү дәүләт университетының геология факультетында белем алғанда ла, аҙаҡ уҡыуымды Францияла дауам иткәндә лә - ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, башҡорт халҡының бер вәкиле булыуымды, үҙемде Башҡортостанымдың лайыҡлы ҡыҙы итеп күрһәтергә кәрәклекте бер минутҡа ла иҫтән сығарманым.

**Ш. Ғәбитов:** Беҙ уҡыған белем усаҡтарының тағы бер өҫтөнлөклө яғы - тыуған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләнеүе. Тыуған тел рухында булыуым, уны яҡшы белеүем миңә хәҙер, айырыуса сит илдәрҙә булғанда, һәр ваҡыт ярҙам итә. Бәлки, кемгәләр сәйер булып та тойолор, әммә миңә тыуған телемде яҡшы белеүем ниндәйҙер көс өҫтәгән һымаҡ - уны аңлатып биреүе лә ауыр. Ә инде ғәмәли яҡтан ҡарағанда, башҡорт теле инглиз телен өйрәнеүҙә еңеллек килтерә - оҡшаш өндәр бар. Тугандаш халыҡтар менән үҙебеҙсә аңлаша алабыҙ - ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, төрөк кешеләрен аңлауы ауыр түгел, быға сәйәхәт иткәнемдә тағы бер ҡат инандым. Бынан тыш, динде булған милләттәштәребеҙгә ғәрәп телен өйрәнеү ҙә еңел бирелә.

Башҡорт мөхитендә үҫеп, тыуған телемде өйрәнеүҙән мин тик өҫтөнлөктәр генә алдым. Шуға ҡайһы бер милләттәштәрҙең, балам рус телен белмәйенсә көлкөгә ҡалып ҡуйыр, тигәнерәк шик-шөбһәләрен ишетһәм, ғәжәпләнәм. Бала үҙенең тыуған теле, ата-бабалары тарихын яҡшы белһә һәм ғорурланһа, башҡалар һүҙенә ҡолаҡ та һалмаясаҡ. Ә инде ниндәйҙер телде яҡшы белгәндән генә шул милләт кешеһенә әйләнеп китмәүеңде үҙ уңыңда тотҡанда, башҡортса белмәгән башҡорттан көлөүселәр күберәктер ҙә, тип уйланыла...

**Г. Әлибаева:** Беҙҙең гимназияла ла балаларҙың һәләттәрен төрлө яҡлап үҫтерергә тырыштылар, был беҙгә үҙебеҙҙе башҡалар араһында ышаныслы тоторға ярҙам итте. Мәскәүҙә уҡығанда ла, сит илдә йәшәгәндә лә береһе лә башҡортлоғомдо кәмһетеп ҡарамаһы, киреһенсә, халҡыбыҙ тураһында тәүләп ишеткәндәр мәҙәниәтебеҙ, йолаларыбыҙ, тарихыбыҙ тураһында ҡыҙыҡһынып һораша торғайны. Сит илдә ләтаныштарыма башҡорт аш-һыуын тәмләтеп, көйҙәребеҙҙе тыңлатып, үҙебеҙ хаҡында һөйләп йөрөнөм.

**Бөгөнгө йәштәр нимә менән йәшәй? Ниндәй өлкәләр менән ҡыҙыҡһына, киләсәген нисек күҙ алдына килтерә?**

**Ш. Ғәбитов:** Һәр быуындың үҙенең ҡыҙыҡһыныуҙары була. Тукһанынсы йылдарҙан һуң индиго балалар тыуған, беҙҙең быуынды милениалдар тиҙәр һәм беҙ күберәк социумға ҡарайбыҙ, төркөмдәргә ойошабыҙ, күмәкләшеп эшләйбеҙ. Ә бына 2000 йылдарҙа тыуғандарҙы зумерҙар тиҙәр һәм уларға тәү сиратта үҙеңде ҡайғыртыу, сиктәрҙе күрмәү хас тип иҫбатлайҙар. Был шулайҙыр ҙа, сөнки төрлө статистика мәғлүмәттәренә ярашлы ла 18-24 йәштәгеләр араһында 25-35 йәштәгеләргә ҡарағанда миллионерҙар күберәк. Өлкәндәр ҡурҡып ултырғанда был йәштәр тота ла эшләй һәм һөҙөмтәгә өлгәшә. Шулай ҙа уларҙың бер һыҙаты бар: берҙәм түгелдәр, айырымланғандар һәм эгоцентризм көслө. Бының сәбәбен аңлата алмайым, бәлки, интернет киң таралыуға ла бәйледер. Ни тиһәң дә, һәр кем үҙе генә үҫешеп маташа, үҙенең генә проектын бойомға ашыра, элекке һымаҡ, ҙур төркөмдәргә тупланырға атлығып тормайҙар.

Иҫләйем, мин бала саҡта апайымдар йәш яҡташтар берлектәрендә бик әүҙем йөрөнө, унда Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Учалы, Хәйбулла йәштәре йыйыла һәм төрлө мәҙәни саралар, осрашыуҙар үткәрәләр, танышалар, аралашалар ине. Гел берҙәм булдылар. Әлеге ваҡытта мин Әбйәлил йәш яҡташтар берлегенең рәйесе булараҡ, төрлө райондарҙы бергә туплаған үҙебеҙҙең Йәш яҡташтар ассоциацияһы үткәргән сараларға йәштәребеҙҙе ылыҡтыра алмайым. Бер нисә кеше даими йөрөй, ҡалғандар ҡайҙалыр, улар юҡ. Һәм бына ошо ситтә йөрөгән йәштәрҙең ҡыҙыҡһыныуҙары ниҙән ғибәрәт икәнен дә белмәйем, белһәм, мотлаҡ үҙебеҙҙең ошо берлеккә йәлеп итеү әмәлен табыр инем. Өфөләге башҡа төр йәштәр ойошмалары менән дә тығыҙ аралашам, "Ҡош юлы", "Самауырлы ритайым" проекттарынан да ситтә тормайым. Йәштәрҙең тормошобоҙҙағы ниндәйҙер күренештәрҙе үҙгәртеп булырына ышанған төркөмө генә әүҙемдер, бындай өмөтө булмағандар ҡарыҡ йәмәғәт эштәренән алыҫ тороуҙы хуп күрәләр, бәлки. Ғөмүмән алғанда, йәштәр әүҙемерәк булһын өсөн уларға ышаныс белдерергә һәм ҡыҙыҡһыныуҙары һүрелмәһен тиһәк, ирек бирергә кәрәк.

**Г. Әлибаева:** Мәктәп йылдарында "Шаяниум" кеүек төрлө башҡорт сараларында әүҙем ҡатнашып өйрәнгәс, Мәскәү һәм Санкт-Петербург студенттары ассоциацияһы эшмәкәрлегендә лә бик әүҙем булдым. Был тыуған республиканан, атай-әсәйҙән алыҫта булһаҡ та, яңғыҙ түгелбеҙ тигәнде тойорға ярҙам итте. Унда һәр кем үҙен ҡыҙыҡһындырған түңәрәктә шөғөлләнә ала, мәҙәни саралар күп үткәрелә. Мәҫәлән, "Һөйләшеү клубы" күңелемә бик ятты, унда беҙ аҙнаһына бер тапҡыр йыйылып, 1 сәғәт инглизсә, 1 сәғәт башҡортса аралаша торғайныҡ. Тыуған телебеҙҙе камил белмәгәндәрҙең һәк әүҙем булыуын күреп ҡыуана инем.

Сит илдә белем алыу теләге бөләкәйҙән булды миндә, башҡалар ҙа шулай хыяллана икән тип уйлай торғайным хатта. Шуға мәктәптә уҡығанда уҡ сит ил юғары уҡыу йорттары менән бәйләнештә булған вуздарҙы эҙләнем, үҙемә ҡыҙыҡлы йүнәлештәрҙе һайланым. Әйтергә кәрәк, бөтә кәрәкле мәғлүмәтте компьютер сысҡаны менән "шылт" итеп кенә табып булыуы бик уңайлы һәм ошо мөмкинлек менән файҙаланырға тейешбеҙ. Мәскәү дәүләт университеты был йәһәттән бик отошло, унда уҡығанда мин "Роснефть" компанияһының үҙәк идараһында стажировка үттем, магистратурала Францияла уҡырға ҡарар иттем. Унда бер төркөмдә 12 илдән килгән 18 студент белем алдыҡ һәм төрлө милләттән булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, уртаҡ яҡтарыбыҙ ҙа күп ине. Шулай ҙа Европала балалыҡтан оҙаҡ сыға алмайҙар, миңенсә. Мәҫәлән, 30 йәшкә етеп, бер ҡайҙа ла эшләп ҡарамағандар, һаман уҡып, мультимәҙәни тәжрибә туплап йөрөүселәр күп. Беҙҙә йәштәр тиҙ өлкәнәйә, иртә аҡса эшләй башлай.

**Йәштәрҙе киләсәк быуын тип күрәбеҙ бит инде, ә халыҡ рухы, тыуған тел гәме бармы һуң улар күңелендә?**

**Ш. Ғәбитов:** Йәштәр араһында башҡорт теленә ҡараш төрлө, әлбиттә. Шулай ҙа тыуған телгә битараф булмағандар, уның киләсәге өсөн көйгәндәр ҙә етерлек. Улар балаларын башҡорт балалар баҡсаһына йөрөтә, саф башҡортса һөйләшергә тырыша. Бөгөн беҙ глобаллашеуға ҡаршы уның уҡ ҡоралдары, ысулдары менән көрәшергә тейешбеҙ: төрлө интернет майҙансыҡтарында, социаль селтәрҙәрҙә башҡортса контентты күбәйтергә, маркетинг ярҙамында телде популярлаштырырға кәрәк. Хатта башҡорт телен уҡытыу методикаһына ла яңы күҙлектән сығып ҡарарға ваҡыттыр. Әлбиттә, мөғжизәле төймә юҡ һәм был еңел эш түгел, шулай ҙа башҡорт йәнһүрәттәре урыҫ йәки инглиз телендәгеләр кеүек уҡ күп булырға, төрлө уйындар, ҡушымталар эшләнергә тейеш. Ә инде башҡорт теле кәрәк-кәрәкмәй тип баһалаған кешеләргә бының өҫтөнлөктәрен асыҡ аңлатҡан яуаптар әҙер булырға тейеш.

**Г. Әлибаева:** Барыһы ла беҙҙең ҡулда. Нәҡ минең быуын йәштәре бөгөн киләһе быуынды барлыҡҡа килтерә торған кешеләр, шуға эште үҙебеҙҙән башларға һәм балаларыбыҙға башҡорт телен өйрәтеп, мәҙәниәтебеҙгә, тарихыбыҙға ғашиҡ иттереп үҫтерергә кәрәк. Мин аралашҡан кешеләр араһында башҡорт теленә ҡарата иғтибар арта ғына һымаҡ, хатта Себер яғында үҫкән әхирәттәрем дә тамырҙарын барлап, тарих, тел менән ҡыҙыҡһына, башҡортса китаптар уҡып маташа. Әле 18-20 йәшлектәр араһында тыуған телебеҙ, бәлки, бик популяр түгелдер һәм беҙ үл быуынды юғалтканбыҙҙыр ҙа, әммә кеше барыбер тамырҙарына ҡайта, иҫләйәсәк һәм аңлаясаҡ. Шуға был мәсьәләгә позитив ҡараштамын.

**"Уңышлы кеше" тигәндә йыш ишетәбеҙ, ә ниндәй ул уңышлы замандашыбыҙ?**

**Г. Әлибаева:** Һәр кемдең уңышҡа өлгәшеүҙә үҙ юлы бар. Мәҫәлән, бөгөн берәү үҙен социаль селтәрҙәрҙә блогер булараҡ таныта, ә икенсеһе офис хеҙмәткәре булып та эшенән оло ҡәнәғәтләнеү ала. Бәлки, улар был шөғөлдәре менән күп аҡса ла эшләмәйҙер, әммә кеше яратҡан эш менән шөғөлләнә икән, уны уңышһыҙға һанап булмай. Кемдер аҡсаһы күп булыуын уңышҡа һанай, кемгәләр балалары күп



***Һәр кемдең уңышҡа өлгәшеүҙә үҙ юлы бар. Мәҫәлән, бөгөн берәү үҙен социаль селтәрҙәрҙә блогер булараҡ таныта, ә икенсеһе офис хеҙмәткәре булып та эшенән оло ҡәнәғәтләнеү ала. Кемдер аҡсаһы күп булыуын уңышҡа һанай, кемгәләр балалары күп булыуы, тыуған иленә файҙа килтереүе - иң юғары өлгәш. Минең өсөн уңыш формулаһы - ул бөтә өлкәләрҙә лә гармония булыуында. Шуға матур ғаилә ҡороп, киләһе быуындарға өлгә булып тороу, үҙ балаларыңа тыуған телеңде тапшырыу, халҡыңа файҙа килтереү - ошоларҙың барыһына ла берҙәй тигеҙ өлгәшә алған осраҡта үҙемде уңышлы кеше тип иҫәпләр инем.***

✓ *Илебеҙҙең, хатта донъяның төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алһындар, әйҙә, тик эшкә үҙебеҙгә ҡайтһындар. Уҡыусылар ситкә уҡырға китмәһә, ҡайһы бер йүнәлештәрҙә белгестәребеҙ ҙә булмаясаҡ табаһа.*



# ҒИБРӘТ АЛ ДА...

## йәшәргә ҡайт

Беҙгә "Бәхет аҡсала түгел" тигән хәҡиҡәтте шул тиклем һеңдереп үҫтергәндәр, әммә был дөрөҫлөккә тап килмәүен аңларға ваҡыт. Эйе, бәхет аҡсала ғына түгел, ләкин аҡса бәхетле булыу өсөн бик шәп ҡорал бит. Мәҫәлән, аҡсағыҙ күп булһа, ирекле сәйәхәт итә, икенсе илдәрҙе, төрлө халыҡтарҙы күрә һәм сағыштыра алаһығыҙ. Был да үҙендә бәхетлерәк тойоуға бер юл. Бына, мәҫәлән, бер нисә йыл элек бер дуҫ кеше "Рәсәйгә бер ҡасан да кире ҡайтмаясаҡмын, бында йәшәрлек түгел", тигән уйҙар менән ситкә сығып киткәйне. Ғаиләһе менән Үзбәкстан, Төркиә, Бали, Малайзия, Аргентина илдәрендә йәшәне. Аргентинала ғына 9 ай торғандар. Ә былтыр йыл аҙағында ҡайтып килде. "Йә, нисек?" тип һорашҡас, "Рәсәйгә бөтөнләй яңы күҙҙәр менән ҡараным. Илебеҙ шул тиклем шәп, быны мин аңламағанмын", - тине. Алдан ул сағыштырып ҡарай алмағанға шулай килеп сыҡҡан, тимәк. Аргентинала йәшәгәнендә уға ябай ғына күренеш йоғонто яһаған: беҙ хәҙер күнегеп бөткән өйгә бөтә нәмәне лә килтереп биреү хеҙмәте, онлайн банк, такси һәм башҡа хеҙмәттәр ҡушымталары унда юҡ икән. Ә башҡа илдәрҙә күргәндәр тураһында һөйләп тә тормайым, ти. Ҡайһы берәүҙәргә шулай Башҡортостаныбыҙҙың, туған телебеҙҙең ҡәҙерен аңлатыр өсөн юғалтыуҙар кисереп, ситтә йәшәп алырға кәрәктер ҙә.

**Г. Әлибаева:** Европала ла, Азияла ла йәшәп алдым һәм Рәсәйҙә, Башҡортостаныбыҙҙа тормош иң комфортлы, тип әйтә алам. "Дәүләт хеҙмәттәре" лә беҙҙә бына тигән эшләй, тәүлек әйләнәһенә магазиндар ҙа асыҡ. Сит илдә ошондай күнегелгән ябай нәмәләрҙең ҡәҙерен аңлайһың.

булыуы, тыуған иленә файҙа килтереүе - иң юғары өлгәш. Минең өсөн уңыш формулаһы - ул бөтә өлкәләрҙә лә гармония булыуында. Шуға матур ғаилә ҡороп, киләһе быуындарға өлгө булып тороу, үҙ балаларыңа туған телеңде тапшырыу, халҡыңа, Башҡортостаныңа файҙа килтереү, һөнәри һәм хеҙмәт үрҙәре яулау - ошоларҙың барыһына ла берҙәй тигеҙ өлгәшә алған осраҡта үҙемде уңышлы кеше тип иҫәпләр инем.

**Ш. Ғәбитов:** Әлбиттә, был матди донъяла уңышлы кешенең иң беренсе күрһәткесе - ул аҡса. Сөнки нимә генә тиһәләр ҙә, бөтә нәмә финанстарға барып төртөлә һәм бөтә нәмә иң тәүҙә аҡса менән һанала. Тәү сиратта ошо йәһәттән үҙеңде уңышлы итергә тырышыу кәрәк, шунан яратҡан, ҡәнәғәтлек килтергән шөғөлөңдө табыу мөһим. Был шөғөлөң күп аҡса килтермәүе лә бар, уның ҡарауы, күңел тыныслығы бүләк итә. Ә инде яратҡан эшен тапҡан һәр кемде уңышлы тип иҫәпләргә мөмкин.

Унан бигерәк, ысынлап та туған телдә аралашыуҙар һағындыра. Бер ваҡыт Һиндостанда һауытһаба йыуып торам, "Сайҡалалар кәмәләр" йырын ҡуйғанмын да, эй илайым үҙем. Шунан күп тә тормай, билет алып ҡайтып төштөм...

**Әйткәндәй, нишләптер бер осорҙа йәштәр гел сит илдәргә сығып йәшәү тураһында хыялланды...**

**Ш. Ғәбитов:** Улар бит төрлө реклама-маҙарҙарҙан сит илдең тик яҡшы яҡтарын күреп фекер йөрөтә. Күрше тауығы һәр ваҡыт ҙурыраҡ, кәләше матурыраҡ инде. Береһе лә ул илдәрҙәге проблемалар тураһында һөйләмәй, беҙ ҙә бит башҡаларға үҙ илебеҙгә зарланмайбыҙ, сөнки уны ятарыуыбыҙ көслө һәм ваҡ ҡына уңайһыҙлыҡтарына түҙәбеҙ. Сиктәрҙе күрмәү, азатлыҡты сикһеҙ һөйөү кеүек сифаттар йәштәрҙе сит илдәргә нығыраҡ ылыҡтыралыр ҙа, әммә күпмелер ваҡыттан үлеп һағынып кире ҡайталар. Үҙемдең дә сит илдәрҙә йәшәп ҡарағаным бар, ләкин мин унда 40 көндән артыҡҡа түҙмәйем, Башҡортостандың тау-урмандарын, йылғакүлдәрен һағынып ҡайта һалып киләм. Шулай ҙа йәштәрҙе ситкә ебәрмәү, республикала уҡырға ҡалдырыу тигән идеяны үҙ итмәйем. Был проблеманы ваҡытлыса ғына хәл итә, ә уның ҡарауы, һәләтле йәштәрҙең ҡанаттарын ҡырҡып, мөмкинлектәрен сикләүебеҙ бар. Минеңсә, уларҙы мөмкин тиклем алыҫҡараҡ "тибергә", барып өйрәнергә, тәжрибә тупларға мәжбүр итергә һәм кире әйләнеп ҡайтһындар өсөн шарттар булдырырға кәрәк. Илебеҙҙең, хатта донъяның төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алһындар, әйҙә, тик эшкә үҙебеҙгә ҡайтһындар. Уҡыусылар ситкә уҡырға китмәһә, ҡайһы бер йүнәлештәрҙә белгестәребеҙ ҙә булмаясаҡ табаһа. Әйтәйек, самолет йә вертолет йөрөтөүселәр беҙҙә әҙерләнмәй, ә кадрҙар кәрәк.

**Г. Әлибаева:** Сит илгә сығып йәшәп килһәң, сағыштыраһың, әлбиттә. Мәҫәлән, эш хаҡтарын сағыштырып, бошонаһың. Йәки олатай-өләсәйҙәрҙең йәшәйешен сағыштырып ҡарап бойоғаһың: француз олатай-өләсәйҙәре һәр иртә рәхәтләнеп кафеларҙа сәй эсә, бик әүҙемдәр, тормош менән ҡәнәғәттәр, көнө буйы ял итеп йөрөйҙәр. Беҙҙәгеололарҙы кафела күргәнебеҙ ҙә юҡ. Шулай ҙа сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә үҙеңә уңайлы шарттар булдырып йәшәргә тырышыу күпкә яҡшыраҡ. Аҡса эшләр өсөн хәҙер мөмкинлектәр күп, шуны ҡулынан ысҡындырмағандар бында ла бәхетле йәшәйҙәр.

**Уңайлы шарттар тигәндән, ә республикала улар бармы?**

**Ш. Ғәбитов:** Әлеге ваҡытта коронавирус пандемияһына ҙур рәхмәт, ул кешеләрҙе, төрлө компанияларҙы ситтән тороп эшләргә өйрәтте. Асыҡланыуынса, күп кенә хеҙмәткәрҙәрҙе өйҙән эшләтеү отошло ла, уңайлы ла. Мин дә Мәскәү компанияһында эшләйем, Өфөлә йәшәйем.

Уңайлы шарттар, тигәндә, эш урындары һәм эш хаҡтарының ҡәнәғәтләнерлек булыуын да күҙ уңында тоторға кәрәк. Күп кенә яҡташтарыбыҙға Себерҙә аҡса эшләп ҡайтыу еңелерәктер ҙә, отошлораҡтыр ҙа һымаҡ. Сөнки улар ғаиләһенән алыҫта һәм бындағы проблемаларҙы күрмәй, унан инде бер ай эшләһә, икенсе айҙа ял итә. Әммә 10-15 йылға алғараҡ ҡарап фекер йөрөтһәк, ул кешеләрҙә бер ниндәй ҙә үҫеш булмаясағы беленә. Себерҙә һин ябай эшсе булып йөрөйһөң, етәксе урынға ултырмайһың, унда үҙ эшеңде ойоштороуың да шикле. Шуға, еңел булмаһа ла, тыуған еребеҙҙә үҙ эшебеҙҙе асырға, ниәттәребеҙҙе бойомға ашырырға тырышырға кәрәк. Әлбиттә, барыһы ла һинең өсөн уйлап ҡуйған эште атҡарып ҡайтыу түгел был, ваҡыт һәм финанс та, башыңды эшләтергә лә кәрәк булыр.

**Г. Әлибаева:** Үҙ эшен асыу өсөн дә кешенең теләге булырға тейеш, һәр кемдә лә ундай теләк һәм һәләт булмай. Кемдер мәктәптә эшләргә, кемдер табип, башҡа хеҙмәттәрҙе үтәргә тейеш. Улар тураһында ла хәстәрлек күрергә, лайыҡлы шарттар тыуҙырырға кәрәк һәм шуға хөкүмәттең ярҙамыһыҙ ҙа булмайҙыр. Ә аҡса барыһына ла хәҙер үк кәрәк.

**Ш. Ғәбитов:** Илебеҙҙә "Ауыл табибы" кеүек матур проекттар бойомға ашырылып килеүен беләбеҙ. Әммә улар йәш белгестең бер үҙен генә ауылға ҡайтарыуҙы күҙҙә тота. Ауылға йәштәрҙе ҡайтарыу һәм ундағы тормошто йәнләндереү, ауыл йәштәренә эш шарттары булдырыуҙа унлаған йәш белгесте бер юлы йүнәлтеү отошлораҡ булмаҫ инеме икән? Йәш ғаиләләр булһа, тағы ла шәберәк. Тулыһынса эшләп торорлоҡ бер мобиль төркөм булыр ине. Улар араһында төрлө һөнәрле кешеләр: уҡытыусы, табип, эшҡыуар, фермер, хатта берәй дин әһеле лә булырға тейеш. Бына шулай күмәкләп кенә был мәсьәләне хәл итеп булалыр, юғиһә, берәмләп ҡайтҡан йәштәр ауыл тормошонан йәм тапмай, бер нисә йылдан кире ҡала еренә күсеп китә.

**Һеҙ ҡала йәштәре, ә ауыл йәштәре менән аралашаһығыҙмы? Уларҙың фекерләүе һеҙҙекенән айырыламы?**

**Ш. Ғәбитов:** Аралашабыҙ, әлбиттә, ҡайһылыр тәңгәлдә фекерҙәребеҙ менән дә айырылабыҙ. Ҡыҙғанысҡа күрә, күп кенә ауыл йәштәрендә донъяға ҡараш даирәһе тарыраҡ, улар ниндәйҙер маҡсатҡа ирешеүҙең бер генә юлын белә. Һәм ауыл йәштәренә тағы ла мәҙәни-күңел асыу саралары етмәй, ә был "йәшел йылан" ҡолона әүерелеү сәбәптәренең береһе. Йәштәрҙең күңелһеҙ булған, буш ваҡыттарын нисек үткәрергә белмәгән өсөн генә шешәгә үрелеүҙәре сер түгел. Атай-әсәйҙәрҙең йәш сағында, беҙҙең бала саҡ осоронда ауыл мәҙәниәт йортонда аҙна һайын ниндәйҙер сара үткәрелә, концерт, театр, хатта фокус күрһәтеүселәр килә торғайны бит. Хәҙер иһә, ауыл халҡы үҙенсә, ҡала халҡы үҙенсә йәшәй. Бына ошо араларҙы яҡынайтырға һәм йәштәребеҙҙе үҙҙәре өсөн дә, йәмғиәтебеҙгә лә файҙалы эштәргә ылыҡтырырға кәрәк. Ауыл йәштәренең осҡонон ҡабыҙып ебәреү генә көс бит ул! Төрлө тәжрибәләрҙе күрһәтеп һөйләп, аңлатып, әйҙәгеҙ, шуны эшләгеҙ, тиеү һәм ышаныс белдереү ҙә етә. Ауыл йәштәренә иғтибар һәм ярҙам етмәй, юғиһә. Был үҙ сиратында ике генә юл барлығын билдәләй: йә атай-әсәйеңде ҡарап, ауылда йәшәйһең, йә ниҙер үҙгәртергә теләһәң, ҡырға сығып китәһең. Ә ауылдарҙың перспективаһы бар.

**Г. Әлибаева:** Мин ауыл йәштәре менән яҡындан аралашҡаным юҡ, ауылда йәшәгән таныштарым да юҡ иҫәбендә. Әммә оптимизация тип, 3-4 ауылға бер мәктәп, бер клуб ҡалдарылыуы тураһында хәбәрҙармын. Ә бына Европала һәр бер ауылда, хатта бәләкәй генәһендә лә, мотлаҡ рәүештә ғибәҙәтхана һәм бер кафе бар. Ауыл халҡы диндәре ҡушҡанса һәр йәкшәмбе көн ғибәҙәт ҡылырға бара, унан һуң кафела йыйылып ултырып, бер-береһе менән йәнле аралашып ҡайта.

Шәфҡәт әйтмешләй, ауыл йәштәренең күңел асыр саралары булмауы насарҙыр, шулай ҙа уларҙың донъяға ҡарашын киңәйтер өсөн мөмкинлектәре ҡала балаларыныҡы кеүек үк. Ни тиһәң дә, барыбыҙ ҙа бер социаль селтәрҙәрҙә ултырабыҙ, кем нисек йәшәгәнен дә күреп торабыҙ, фәһем һәм үрнәк алыр кешеләр менән танышабыҙ. Бөтә Ер шары буйлап кем тураһында, нимә тураһында белергә теләйбеҙ - рәхим ит. Шуға улар кемдер берәүҙең нисек йәшәүен күреп һоҡлана, уларға оҡшарға теләй икән, үҙ тормошон да шулай ҡороу юлдарын табырға тейеш.

**Ш. Ғәбитов:** Эйе, беҙҙең төп ихтыяж - башҡа кешеләр менән аралашыу. Бөгөн ауылдарҙағы бына ошо элекке матур күренеш юғалып барыуы ҡыҙғаныс. Былай ҙа көнө-төнө хужалыҡ мәшәҡәттәре менән йәшәгән ауыл кешеһенең күршеһенә инеп сығырға ваҡыты ла, мохтажлығы ла йайлап юҡҡа сыға хәҙер. Ошо хәлдән өлкән йәштәгеләргә лә ауыр, яңғыҙ йәшәгән инәй-өләсәйҙәр көн дауамында берәү менән дә һөйләшмәй-аралашмай ултырырға мөмкин.

**Быйыл Рәсәйҙә Ғаилә йылы, ошо ваҡиғаға бәйле сараларҙа ниндәй мәсьәләләргә иғтибар бүленеүен теләр инегеҙ?**

**Ш. Ғәбитов:** Быйыл йәше еткән һәм һаман да башлы-күҙле булмағандарҙы өйләндерергә кәрәк. Минеңсә, 24 йәше тулған йәш кеше бер нәмәнән дә ҡурҡмай ғаилә ҡорорға тейеш. Әлеге ваҡытта бер яҡта - егеттәр, икенсе яҡта ҡыҙҙар бер-береһен таба алмай йөрөй. Интернетта йәшәгәнгә күрә, ниндәйҙер идеаль кешене көтәләр һымаҡ. Ҡыҙҙар егеттең машинаһы, фатиры булһын тигән дә талап ҡуя, ҡайһылары хатта бөтөнләй нигеҙһеҙ теләктәрен белдерә. Был нилектән шулай килеп сыға? Һуңғы йылдарҙа атай-әсәйҙәр тарафынан да, мәктәп, йәмғиәт тарафынан да балаларға, йәштәргә ғаилә ҡиммәттәре тураһында һабаҡтар бирелмәүе арҡаһында килеп тыуған хәл был. Бына шуға ла быйылғы Ғаилә йылында егеттәргә лә, ҡыҙҙарға ла ир-ҡатын булып йәшәргә, ғаилә ныҡлығы серҙәренә өйрәткән дәрестәр, курстар булдырылһа ине. Ғаилә йылында тағы ла йәш ғаиләләргә ярҙам проекттары әүҙемләшер, тип көтәбеҙ. Сөнки хәҙер фатир, ә ҡайһы берәүҙәргә машина алыуы ла һис еңелдәрҙән түгел. Бәлки, айыҡ туйҙар үткәреүҙе хуплаған берәй шәп яңы проект та барлыҡҡа килер.

**Г. Әлибаева:** Бер видеояҙмала йәш кәләштән: "Егетеңә нисә тапҡыр туй тураһында ишараланың?" - тип һорайҙар. Ул: "Һуңғы өс йылда көн һайын ситләтеп кенә һүҙ башлап, ишаралап торҙом", - ти. Кейәүҙән иһә: "Ҡыҙ нисә тапҡыр һиңә өйләнешеү тураһында ишара яһаны?" - тип һорағас: "Бер тапҡыр ҙа ишараламаны", - була яуап. Әллә беҙҙе шулай иргә өндәшмәһәң дә, үҙе аңлар һәм эшләр, тип көтөп йәшәргә өйрәтеп тәрбиәләгәндәр ул? Беҙгә теләктәрҙе һәм уйҙарҙы асыҡ итеп әйтергә, иптәшең менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә, кәңәшләшеп, бер фекергә килергә бәләкәйҙән өйрәтергә кәрәк. Был 20-25 йәшкә еткәндә үҙ теләген асыҡ итеп әйтә белергә һәм тормош иптәшен дә аңлы рәүештә һайларға ярҙам итәсәк.

**Ш. Ғәбитов:** Буласаҡ тормош иптәшеңде анығ итеп күҙ алдына килтерергә лә тейешһең бит әле. Бында уның тышҡы ҡиәфәте генә түгел, холҡо ла мөһим. Әлбиттә, төп параметрҙарҙың береһе - уның үҙ милләтеңдән булыуы. Сөнки бер милләттән булған ир менән ҡатындың ҡиммәттәре бер төрлө, тимәк, ғаилә ҡороп йәшәп китеүе лә еңелерәк. Башҡа милләт кешеһенең ҡиммәттәрен өҫтөн ҡуйырға мәжбүр булып, үҙеңә лә хыянат итмәйһең һәм балаларың да ике яҡтың береһен һайлауҙан азат була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гәҙәттәгесә, йәштәр менән әңгәмәбеҙ һуңында тиҫтерҙәренә әйтергә теләгән фекерҙәрен белешкәс, икеһе лә, тыуған еребеҙҙең, халҡыбыҙҙың киләсәге хаҡына ҡулыбыҙҙан килгәнде эшләргә тейешбеҙ, тигән уйҙы еткерҙе. Тик Шәфҡәт, ир-егет һәм ғаилә башлығы булараҡ, был бурысты барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланып, тырышып эшләп, төрлө проекттарҙы бойомға ашырып, заман менән бергә атлап атҡарырға кәрәк, тигән һүҙҙәр аша белдерһә, Гүзәл иһә, нәфис заттарға ғына хас хәстәрен еткереп, матур атай-әсәй булығыҙ, йәшләй өйләнешегеҙ һәм милләтебеҙҙе арттырып, балаларҙы күберәк табығыҙ, тигән саҡырыу ташланы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ *Шулай итеп, тәү сәбәп - депрессия, уны нисек тулыһынса бөтөрөүҙе әлегә медицина белмәй. Мин халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итеп ҡараным. Һәм ышаныслы әйтә алам, һеҙҙең депрессияғыҙҙың төп сәбәбе - күҙ тейеү.***





Владимир МЕГРЕ

# БАЙҘАР ҘА ИЛАЙ

(Кинәйәле хикәйәт)

Бөтә организмға! Депрессия ни тиклем көслө булһа, командалар шул тиклем көсһеҙ була бара, һәм көндәрҙән бер көндө мейе команда биреүҙән туҡтай, шул саҡта үлем килә.

Шулай итеп, тәү сәбәп - депрессия, уны нисек тулыһынса бөтөрөүҙе әлегә медицина белмәй. Мин халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итеп ҡараным. Һәм ышаныслы әйтә алам, һеҙҙең депрессияғыҙҙың төп сәбәбе - күҙ тейеү. Эйе-эйе. Тағы ла асығыраҡ итеп әйткәндә, һеҙгә күҙ тейҙергәндәр, быны мин бик күп факттарға таянып иҫбатлай алам.

Миллиардер, бармаҡтарын һелкетеп, "сығып китегеҙ", тип ишараларға уйланы. Ул боҙомдо, күҙ тейеүҙе һәм башҡа шундай ауырыуҙарҙы бөтөрөүҙе вәғәҙәләүсе эзотерик врачтарҙы яратмай ине, уларҙы ваҡ бизнесмендар, мошенниктар, тип көлә торғайны. Күрәһең, был профессор ҙа, замана медицинаһына ышаныс юғалтыуҙан, сихырсылар кимәленә төшкәндәр. Миллиардер "сығып китегеҙ" ымын күрһәтеп өлгөрмәне, профессор әҙ генә булһа ла өмөт уятҡандай һүҙҙәрен әйтте:

- Һиҙеп торам, һеҙ мине ҡыуып сығарырға йыйынаһығыҙ. Бәлки, ҡабат мине тыңлап та тормаҫһығыҙ. Зинһар, үтенеп һорайым, миңә тағы биш-алты минут ваҡыт бүлегеҙ. Минең әйткәндәргә ҡолаҡ һалһағыҙ, бәлки, һеҙ тулыһынса һауығырһығыҙ, ә мин иң бөйөк асыш яһармын. Дөрөҫөрәге, мин ул асышты яһаным, тулыһынса раҫларға ғына ҡалды.

Миллиардер "сығып китегеҙ" ишараһын яһаманы.

Профессор эргәһендә ятҡан кешенең хәрәкәтһеҙ ҡулдарына өс секунд ҡарап торҙо ла, тиҙ-тиҙ һөйләй башланы:

- Кешеләр бер-береһенә төрлө ҡараштa була. Вайымһыҙ булғандар бар, һөйөү менән дә, нәфрәтләнеп тә ҡарайҙар, көнләшеп, ҡурҡып, йә хөрмәт итеп ҡарауҙары мөмкин. Әммә күҙ ҡараштарының тышҡы ҡиәфәте төп ролде уйнамай. Ул ябай маска ғына, официанттың йә һатыусының яһалма йылмайыуы кеүек. Ысын мөнәсәбәттәр, бер кешенең икенсе кешегә ҡарата ихлас тойғолары мөһим. Бер кеше икенсе кешегә ни тиклем күберәк ыңғай тойғоларын йүнәлтһә, уның үҙендә лә шул тиклем ыңғай энергия, көс туплана. Әгәр ҙә, киреһенсә, һеҙ йәшәгән мөхиттә икенсе кешегә ҡарата алама хистәр өҫтөнлөк итһә, һеҙҙең үҙегеҙҙә лә кире, емереүсе көстәр хасил була.

Халыҡ телендә ул "күҙ тейеү", тип атала, халыҡ табибтары үҙҙәренең эшмәкәрлеген шуға таянып башҡара. Әлбиттә, уларҙың бөтәһе лә сихырсы түгел. Эш бына нимәлә, тирә-йүнендәгеләрҙән кире энергияны бик күп алған кеше, уны үҙе лә тигеҙләп, юҡҡа сығара ала. Халыҡ табибы төрлө ысулдар менән күҙ тейеүҙе алып ташлай, кешене, һин таҙарҙың, тип ышандыра ала. Әгәр ҙә кеше дауалаусыға тулыһынса ышанһа, ул ысынлап та ыңғай һәм кире энергияны тигеҙләй. Ә инде ышанмаһа, файҙаһы юҡ. Һеҙ халыҡ табибтарына ышанмайһығыҙ, тимәк, улар һеҙгә ярҙам итә алмай. Әммә был һеҙҙә организмығыҙ, психикағыҙ өсөн ҡурҡыныслы емереүсе көстәрҙең юҡ икәнен аңлатмай. Ни өсөн тик кире, алама көстәрҙенме? Сөнки һеҙҙең кеүек кешегә көнләшмәйенсә ҡарау мөмкин дә түгел. Нәфрәт менән ҡараһалар ҙа, аптырарға ярамай. Мәсәлән, кемдәрҙе эштән ҡыуҙығыҙ, йә иһә эш хаҡтарын күтәрмәйһегеҙ? Күптәр, ҡеүәтегеҙҙе тойоп, һеҙгә ҡурҡып ҡарай. Күрәһегеҙме, былар бөтәһе лә кире көстәр.

Мыҫҡалдың икенсе яғына ыңғай энергия кәрәк. Быны ғаилә ағзалары, туғандар бирә ала. Ҡатындарығыҙ һеҙгә хыянат иткән, балаларығыҙ, дуҫтарығыҙ юҡ, туғандарығыҙ менән аралашмайһығыҙ. Ыңғай энергия сығанаҡтары эргәгеҙҙә юҡ. Етерлек ыңғай энергияны кеше үҙе лә туплай ала. Бының өсөн бик ҡәҙерле хыял-маҡсат кәрәк, уны тормошҡа ашыра-ашыра кеше ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерә, ыңғай энергия туплай. Һеҙ күп нәмәгә өлгәшкәнһегеҙ һәм артабан хыял-маҡсаттарығыҙ юҡтыр, моғайын. Ә был бик мөһим - маҡсат кәрәк, уны тормошҡа ашырыу өсөн ынтылыш кәрәк.

Мин төрлө кимәлдәге бизнесмендарҙың физик һәм психологик хәлдәрен анализлап ҡараным. Ҡамыр баҫҡан, икмәк бешереп һатҡан кеше эшен артабан дауам иттерә алырына ҡыуана. Шулай үҫешә килә генә ул был тормошта ныҡлы йәшәй ала. Ҙур банкир, йә концерн хужаһы ла шулай уҡ бизнесының үҫешенә ынтыла, күберәк килем алырға тырыша, әммә күп осраҡта уның энтузиазмы икмәк бешереүсенекенә ҡарағанда аҙыраҡ була. Был парадокс, әммә факт, энтузиазмы аҙыраҡ. Ни өсөн аҙ? Сөнки алда уны, икмәк бешереүсегә ҡарағанда, мауыҡтырғыс байлыҡтар аҙыраҡ көтә, заман ҡаҙаныштары уның өсөн байлыҡ булыуҙан туҡтай, көндәлек тормошҡа әйләнә. Артыҡ бай булмаған кеше машина һатып алһа, уның ҡыуанысының сиге булмай, бай кеше иң текә автомобиль алыуына ла артыҡ ҡыуанмаясаҡ, сөнки уның өсөн ул бер ни ҙә түгел, сүп кенә. Парадокс, әммә факт, урта хәллеләргә ҡарағанда, бай кешеләргә ҡыуаныу өсөн сәбәптәр әҙерәк. Ҡәнәғәтлек тойғоһо уятыусы тағы бер фактор бар - конкуренттарҙан өҫтөнөрәк булыу. Әммә, Хайцман әфәнде, һеҙҙең конкуренттарығыҙ юҡ шикелле.

Шулай итеп, һеҙгә тик кире энергиялар ғына йоғонто яһай, һәм улар бик күп. Тағы бер нәмә тураһында әйтергә онотҡанмын, кире көстәр тупланмаһын тик бер көслө энергия, мөхәббәт көсө генә еңә ала. Үҙегеҙ ғашиҡ булғанда һәм кемдер һеҙҙе һөйгәндә генә була бындай мөмкинлек. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, ундай ҡатынығыҙ юҡ, үҙегеҙ ҙә, йәшегеҙгә ҡарап, улар менән ҡабат ҡыҙыҡһынмаясаҡһығыҙҙыр.

Әйткәндәремде дөрөҫләүсе һығымталарым етерлек. Статистик мәғлүмәттәргә таянып, һуңғы йөҙ йыллыҡтағы бай кешеләрҙең, билдәле сәйәсмәндәрҙең һәм президенттарҙың ғүмер оҙайлығын сағыштырып ҡараным. Һығымта бик ышаныслы килеп сыҡты. Был донъя көслөләренең ғүмер оҙайлыҡтары ябай кешеләргә ҡарағанда күпкә ҡыҫҡараҡ. Парадокс, әммә факт булып ҡала. Президенттар һәм миллионерҙар, даими медицина күҙәтеүе аҫтында иң алдынғы техник саралар ҡулланып, ҡиммәтле дарыуҙар ҡабул итеп, сифатлы ашамлыҡтар ашаһалар ҙа, барыбер ауырыйҙар, башҡалар кеүек үлемһеҙ түгелдәр. Был факттар алдашмай - йәшәгән мөхиттәге кире энергия ғәйәт ҙур көскә эйә, хатта ультразаманса медицина уға ҡаршы тора алмай. Шулай булғас, хәл ҡотолғоһоҙмы ни?

Был хәлдән ҡотолоу юлы бар, бәләкәй генә, берҙән-бер генә булһа ла бар! Эйе, бар. Ул да булһа, хәтирәләр! Хөрмәтле Джон Хайцман, зинһар, ғүмерегеҙҙең күңелегеҙгә матур тойғолар бүләк иткән осорҙарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Һәм, иң мөһиме, әгәр ҙә кемгәлер етди вәғәҙәләр биреп тә үтәмәһегеҙ, мөмкин булһа, үтәргә тырышығыҙ. Үтенеп һорайым, үҙегеҙ өсөн, фән өсөн, һис юғы, ике-өс көн булһа ла яҡшы мәлдәрегеҙҙе иҫләгеҙ. Приборҙар эске ағзаларығыҙҙың эшмәкәрлеген һәр минут һайын теркәп бара. Әгәр һеҙ мин әйткәндәрҙе тыңлап, мотлаҡ үтәһәгеҙ, приборҙар ыңғай һөҙөмтәләрҙе күрһәтәсәк һәм һауығыуығыҙға ышаныс барлыҡҡа киләсәк. Эйе. Табырға кәрәк ул юлды. Мин уны мотлаҡ табасаҡмын. Ә бәлки, уны һеҙ үҙегеҙ табырһығыҙ. Бәлки, ул үҙе һеҙҙе табыр...Тормош табыр...

Профессор шымып ҡалды һәм тағы хәрәкәтһеҙ ятҡан кешенең ҡулдарына ҡараны. Бармаҡтарҙың таныш хәрәкәте профессорҙы бүлмәнән сығырға мәжбүр итте.

* * *

Джон Хайцман, күп кешеләр кеүек, үткән ғүмерен иҫенә төшөрҙө. Профессорҙың һүҙҙәре ниндәйҙер кимәлдә уға аңлашылды. Үткән ғүмерҙең матур мәлдәрен иҫкә төшөрөп ҡарарға була, улар, ысынлап та, ыңғай йоғонто яһауҙары мөмкиндер ҙә, тик үткәндәр хәҙерге мәлдә күңелһеҙ үк булмаһа ла, ҡыҙыҡ түгел, хатта мәғәнәһеҙ һымаҡ.

Хайцман атаһының кәңәше буйынса империяның капиталын арттырыр өсөн миллиардер ҡыҙына өйләнгәнен иҫенә төшөрҙө. Ғаилә ҡороу уны ҡәнәғәтләндермәне, ҡатыны бала тапманы, 10 йыл бергә йәшәүҙән һуң наркотиктарҙы артыҡ ҡулланыуҙан үлеп ҡалды. Һуңынан ул иркә ҡыҙға, билдәле йәш моделгә өйләнде. Күп тә үтмәне, мөкиббән китеп ғашиҡ булған ҡатын ролен оҫта уйнаған ҡыҙ тураһында һаҡсылар хеҙмәте насар хәбәр еткерҙе. Улар күрһәткән фотоларҙа ҡатыны элекке һөйәркәһе менән типтерә ине. Джон йәш кәләше менән һөйләшеп тә торманы, һаҡсыларға ҡабат был уйнашты күрергә лә теләмәүен белдерҙе.

Хайцман, иҫләй торғас, атаһының империяһында эшләгән дәүерҙә хәтеренә төшөрҙө һәм бер ниндәй күңеленә матур булып уйылып ҡалған, ыңғай хистәр тыуҙырған осорон билдәләй алманы.

Атаһына валюта фондының хужаһы бер кеше генә булырға тейеш түгеллеген иҫбат итә алған күңелле мәл генә хәтерендә ҡалған. Үҙ капиталдарын фондҡа күсереп, уның үҫешен теләүсе башҡа вкладчиктар ҙа көс-ҡеүәтен фондтың капиталын арттырыуға йүнәлтәсәк һәм, тимәк, барыбер Хайцмандарға эшләйәсәк.

Атаһы бер нисә көн уйланып йөрөнө һәм бер көндө, улын артыҡ маҡтай һалып бармаған кеше, төшкө аш ваҡытында үҙ фекерен әйтте:

- Мин һинең фондҡа ҡағылышлы әйткән тәҡдимеңә ризамын, Джонни. Дөрөҫ уйлайһың. Һин маҡтауға лайыҡ. Башҡа йүнәлештәр тураһында ла уйла. Һинә Фонд менән етәкселек итергә ваҡыт етте.

Джон Хайцман бер нисә көн күтәренке кәйефтә йөрөнө һәм һуңынан, дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итеп, финанс-сәнәғәт империяһының килемен тағы арттырҙы. Әммә быға ул артыҡ ҡыуанманы, һандар һаны артҡан отчеттарға артыҡ иҫе китмәне. Маҡтаусы кеше лә булманы, сөнки атаһы үлеп ҡалды, ә ҡул аҫтындағыларҙың маҡтауы ҡыуаныс килтермәй ине...

Шулай хәтирәләре яйлап бала сағына алып ҡайтты, уйҙары атаһы менән һирәк осрашҡан мәлдәргә барып етте. Ғәҙәттә, ныҡ талапсан атаһы күрһәтмәләрен Джонға беркетелгән тәрбиәселәр менән уҡытыусылар алдында әйтә ине.

Ҡапыл хәрәкәтһеҙ ятҡан миллиардерҙың тәне буйлап йылы тулҡын йүгереп үткәндәй булды, ул, быны тойоп, хатта тертләп ҡуйҙы. Хайцмандың күҙ алдында ап-асыҡ булып, яҡты хәтирәләр уянды. Баҡсаның төпкө мөйөшөндә акациялар менән уратып алынған ике метрҙай бейеклектәге бер тәҙрәле бәләкәй генә өй пәйҙә булды. Бәләкәй балалар үҙҙәренә шундай бәләкәй донъя төҙөргә ярата шул. Атай йортонда айырым бүлмәң бармы-юҡмы, туғандарың менән бер бүлмәлә йәшәйһеңме - был ынтылыш уға бәйле түгел. Шундай мәл килеп етә, үҙең дә аңламаҫтан, үҙ көсөң менән айырым донъяла үҙ мөйөшөңдө төҙөй башлайһың. Күрәһең, һәр кешелә бик борондан мәғлүмәтте һаҡлаған ген барҙыр, ул һинә "үҙеңдең биләмәңде төҙөй башла", тип әйтә кеүек. Бала кеше ана шул борондан тауышты "ишетеп", шәхси ояһын төҙөй башлай. Заманса эшләнгән өйҙәргә оҡшамауында ла эше юҡ уның, тик уға был йортта күңелле булһын! Туғыҙ йәшлек Джон Хайцман да, киң виллаларында шәхси ике бүлмәһе булыуға ҡарамаҫтан, үҙенең бәләкәй генә өйөн төҙөргә булды.

Үҫентеләр өсөн тәғәйенләнгән пластмасса йәшниктәрҙән төҙөнө ул хыялындағы ышыҡ урынды. Төҙөлөш материалы бик уңайлы булып сыҡты, өйҙөң стеналарын Джон күк төҫтәге йәшниктәргә һары төҫтәгеләрен ҡушып күтәрҙе, өйҙөң түбәһен таҡталар менән ҡаплап, өҫтөнә полиэтилен пленка йәйҙе.

Һәр көн саф һауала йөрөүгә бүленгән өс сәғәт ваҡытты файҙаланып, бер аҙна дауамында төҙөнө өйөн. Етенсе көндә баҡсаның төпкө мөйөшөндә үҙе ҡорған өйгә йүнәлде. Акация ботаҡтарын ҡайырып, үҙе төҙөгән йортҡа яҡынлашҡас, аптырауынан ҡатып ҡалды. Өй ишеге эргәһендә бәләкәй генә ҡыҙыҡай тора ине. Ул аҡ төҫтәге кофта кейгән, асыҡ зәңгәр төҫтәге юбкаһы тубыҡтарынан түбән төшөп тора. Ҡуңыр сәстәре бөҙрәләнеп, яурындарына ятҡан.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

✓ *Уларҙы кеше күҙенән ситтәрәк булған фатирға урынлаштыралар. Староста Карам менән Вафаға яңы документтар эшләп бирә. Шулай итеп, Карам Константин Александрович Шмельковҡа, Вафа Василийға өйләнә.*



ТАНЫШ БУЛЫҒЫҘ!

# РУС ФАМИЛИЯЛЫ МИЛЛӘТТӘШ

**Март башында Башҡорт дәүләт филармонияһында "Яңы ваҡыттың боронғо көйҙәре" тип аталған ғәжәп үҙенсәлекле бер концерт булды. Камил Абдуллин етәкселегендәге камера оркестрына ҡушылып, Мәскәү музыканты Руслан Шмельков кларнетта уйнаны унда. Бында һүҙ был концерт тураһында түгел, ә уның төп ҡатнашыусыһы, рус фамилиялы башҡорт егете Руслан Шмельков тураһында булыр. Тамырҙары менән Хәйбулла районынан булған егет Халыҡ-ара "Musica Classica" конкурстары еңеүсеһе, III Донъя симфоник оркестрҙар фестивале ҡатнашыусыһы. Шулай итеп...**



➔ **Руслан, һинең ҡартатайыңдың фамилияһы Сәмиғуллин. Фамилияһын Шмельковҡа алыштырыу ҡасан һәм нисегерәк булды икән?**

- Ҡартатайым Карам Сәми улы Сәмиғуллин 1918 йылда Бәләбәй районының Исмәғил ауылында тыуған. Ул бала сағында етем ҡалып, ағаһы ҡарамағында тәрбиәләнә. 1932 йылда ағаһының ғаиләһен Белорет районына эшкә ебәрәләр. Карам ҡартатайым Ермолаевка мәктәбен тамамлағас, Сәрмән педагогия техникумында белем ала, уҡытыусылар курсын да тамамлай. Уны Хәйбулла районының Аҡъяр мәктәбенә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп эшкә ебәрәләр. Ҡартатайым 1940 йылда әрмегә алына. Украинала хеҙмәт итә. Һуғыш башланғанын башта белмәйҙәр. Ауылдар аша үткәндә украин ҡатын-ҡыҙҙары уларҙы илай-илай ҡул болғап оҙата. Бер мәл һалдаттар дошман тылында тороп ҡала. Политрук барыһының да документтарын йыйып, үҙебеҙҙекеләр яғына сығырға әмер бирә. Бара торғас, Сәмиғуллиндың төркөмөндә ике генә һалдат: үҙе һәм дуҫы Вафа Әхмәҙуллин ғына тороп ҡала. Урман ултыртыу участкаһына барып сығалар, ә унда тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡалған була. Улар: "Ауылда тыныс, немецтар һирәк килә, староста үҙ кеше", - тип, егеттәрҙе үҙҙәрендә ҡыш сығырға тәҡдим итә. Уларҙы кеше күҙенән ситтәрәк булған фатирға урынлаштыралар. Староста Карам менән Вафаға яңы документтар эшләп бирә. Шулай итеп, Карам Константин Александрович Шмельковҡа, Вафа Василийға өйләнә. Бына шулай Шмельков фамилияһының тарихы. Һуғыш кешеләрҙең ғүмерен ҡыйып ҡына ҡалмай, исем-шәрифтәрен дә үҙгәртә икән шул. Ике һалдатты ауыл халҡы старостаның туғаны икән, тип уйлай... Яҙ еткәс, улар партизандар отрядына барып ҡушылалар...

➔ **Бер ни тиклем бала саҡ хәтирәләрегеҙҙе лә байҡайыҡ?**

- Минең атайым менән әсәйем уҡыуҙарын тамамлағас, Бүрәт республикаһының баш ҡалаһы Улан-Удэға йүнәлтмә алалар. Мин шунда тыуғанмын. Беренсе класҡа атайымдың тыуған яғы, Хәйбулла районының Аҡъяр ауылына ҡайттыҡ, һәм мин 2-се урта мәктәптең беренсе класына уҡырға барҙым. Икһеҙ-сикһеҙ киң дала, иркенлек, көнө буйына яҡтыртҡан ҡояш, уның ҡалҡҡан мөлө, байышы күңелемдә бала сағымдың иң сағыу иҫтәлектәре булып һаҡлана. Ике туған ағайым Фаяз менән велосипеда, Таналыҡ йылғаһына балыҡ ҡармаҡларға йөрөй торғайныҡ. Туғандар менән бергә йыйылып, райондың таулы-ҡаялы урындарында ла булғаныбыҙ бар. Әле ауылда атайымдың бер туған ҡустыһы Рәсүл ағай менән Фәриҙә еңгәй, апаһы Милә инәй менән Мәжит олатай йәшәй. Бәйләнештәбеҙ.

➔ **Ни өсөн кларнетты һайланығыҙ?**

- Минең атайым Әлфир Шмельков та кларнетсы ине. Әсәйем Земфира ла сәнғәт юлын һайлаған, хор-дирижер бүлеген тамамлаған. Атайым бәләкәй генә сағынан Өфөлә музыка мәктәп-интернатында белем алған. Үҙе иҫкә алып һөйләүенсә, уға уйынсыҡ гармун алып биргәндәр ҙә, көй сығара алһаң, ысын гармун алып бирәбеҙ, тигәндәр. Ул көй сығара алған...

Кескәй сағымдан йыр-моң тыңлап үҫкәнгәләр, сәнғәткә тартылдым, атайым кеүек, кларнетта уйнарға өйрәнгем килде. Ул сафтан сыҡҡан кларнеттарҙы үҙе йүнәтә торғайны. Өҫтәлендә музыка ҡоралының төрлө өлөштәре, лампа яҡтыһы торғаны күҙ алдымда. Оҫта ҡуллы атайым уларҙы һүтә-йыя, уйнап ҡарай, ә мин яҙҙам итергә тырышып, янында йөрөйөм. Ябай ҡала мәктәбенә түгел, Өфө ҡалаһының Урта махсус музыка мәктәп-лицейына уҡырға индем, Илдар Мәхмүт улы Солтанов класында уҡыным, унан һуң Гнесиндар исемендәге Рәсәй музыка академияһында Рәсәйҙең халыҡ артисы, профессор И.П. Мозговенко класында белем алдым, аспирантурала Иван Пантелеевич етәксем булды. Стажировканы Голландияның Тилбург ҡалаһында профессор Герта Бэкеландта үттем. Ғөмүмән, уҡытыусыларым бик күп булды, мин барыһына ла рәхмәтлемен. Шулай ҙа, минең өсөн иң мөһим, иң төп белем биреүсе, әйҙәүсе уҡытыусым - ул минең атайым. Уны республикабыҙҙың данлыҡлы кешеләренең береһе тип әйтеү ҙә урынлы булыр, сөнки ул республикала кларнет мәктәбенә юл һалыусы, уның уҡыусылары ла бик күп.

➔ **Өфө ҡалаһы күңелеңдә ниндәй урын биләп тора?**

- Өфөлә минең әсәйем, дуҫтарым, класташтарым йәшәй. 10 мартта Өфөлә уҙған концерт программаһын беҙ бала саҡ дуҫым Камил Абдуллин менән бергә әҙерләнек. Бер мәктәптә уҡыныҡ, тәнәфестәрҙә бергә йүгерҙек, көйҙәр тыңланыҡ, улар буйынса әңгәмәләр ҡора, хорҙа йырлай инек. Ғөмүмән, был музыка мәктәбе - ғәҙәти булмаған урын, минең иң яратҡан уҡыу йорттарымдың береһе. Күпме уҡыусы белем алды унда, музыканттар, сәнғәт һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре - тотош бер быуын! Ҡасан ғына уҡыһаҡ та, ҡайҙарҙа ғына йәшәһәк тә, бер-беребеҙҙе әллә ҡайҙан танайбыҙ, осрашабыҙ.

Беҙ телеүҙәк яғында йәшәнек, мин бер нисә туҡталышты трамвай менән бара инем, шуға күрә минә Өфө трамвайҙарын күреү ҙә танһыҡ. Дала - иркен, киң башҡорт күңелен һынландырһа, Өфө ҡалаһы тауҙарҙа урынлашҡан, ныҡлы бер ҡәлғәне хәтерләтә. Ҡала йылдан-йыл үҙгәрә, төҙөкләнә. Ҡаланың үҙ йөҙө, үҙ холҡо, үҙенә генә хас мәҙәниәте бар, күп милләтлелеге менән дә айырылып тора ул. Уҡыу йорттары, студенттар, йәштәр күп.

➔ **Һин Мәскәүҙә юғары белем алып, илдең баш ҡалаһында йәшәйһең. Хеҙмәт юлың да унда башланған. Ҡыйын булманымы унда "үҙ" кеше булып китеүе?**

- Минең сәнғәткә яҡын булған төп эшем бар. Ул минә финанс яғынан бирешмәҫкә ярҙам итә. Гончаров ремонтлау-тергеҙеү оҫтаханаһында идарасы булып эшләйем. Музыка ҡоралдарына, башлыса, кларнеттарға, флейталарға, саксофондарға ремонт яһайбыҙ. Әммә хеҙмәтемдең нигеҙе төрлө музыка проекттарымдан тора, тип иҫәпләйем. Ҡыллы квартеттың, Яңы Мәскәү ансамбленең художество етәксеһе һәм проект авторы булараҡ, алты-ете йыл эсендә ун ике илдә сығыш яһаныҡ, байтаҡ дисктар сығарҙыҡ.

➔ **Уҡытыусылыҡ эшмәкәрлегегеҙ тураһында ла бер нисә һүҙ әйтһәгеҙ ине...**

- Хеҙмәт юлын Гнесиндар академияһында башланым, артабан оҙаҡ ҡына музыка училищеһында уҡыттым. Студенттарым хәҙер консерваторияларҙа, шул уҡ Гнесиндар академияһында уҡып йөрөйҙәр, дирижерлыҡҡа уҡыусылар ҙа бар. Уҙған йыл уҡытыу эшен ҡалдырып торорға тура килде, әммә яҡын арала уны ҡабаттан башлармын, тип уйлайым, сөнки минә атайымдың эшен, уҡытыусым И.М. Солтановтың эшен дауам итергә, кларнетология мәктәбен асырға кәрәк. Был ниәтем тормошҡа ашыр, тип уйлайым. Тәжрибә, белем тупланған, улар менән мин бүлешергә тейешмен, артабан йәш быуынға тапшырырға бурыслымын...

Сәриә ИШЕМҒОЛОВА яҙып алды.

---

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

Хәйҙәр ТАПАҠОВ



## МАЙЛЫ ҠУЛДАР

Ауылыбыҙ эргәһендәге йылға аръяғында һауын һыйырҙарының фермаһы була торғайны. Бүрәнәнән һалынған тиҫтәгә яҡын оҙон һарайҙар. Йәйләү осоро тамамланһа, мал шуларға инеп тула. Лыҡа тула. Әллә минә генә шулай тойолдомо икән, белмәйем, күҙ етеп, һыйырҙар һарайҙарына ҡайтһа, ҡыш һалҡынлығына йылы өҫтәлгәндәй итә. Йәнә, иртәле-кисле шул тарафтан ҡыҫҡырышыуҙар-һөйләшеүҙәр ишетелеп тора. Тын ауылды терелткән төрлө тауыштар, хеҙмәт хәрәкәте үҙе бер матурлыҡ, үҙе уҡ йәм. Бер рәхәттең, бер биҙәһы, тигәндәй, яҙ етеп, текә тау аҫтынан аҡҡан Һаҡмарҙан боҙ ҡуҙғалһа - бәлә, һауылған һөттө илткән Ивановка тарафына юл өҙәлә лә ҡуя. Борам туғайы тапҡырына төшөрөлгән кәмәнән халыҡ унда-бында сығып йөрөһә лә, совхоз үҙеге менән хужалыҡ бәйләнештәре, кибеттәргә тауарҙар килтереү һыу ҡайтҡанға ҡәҙәр өҙәлә. Бүлексә етәкселәре яйын таба шулай ҙа, халыҡтан сепараторҙар килтереп, һөттө урында эшкәртергә тотоналар. Өҫтәмә, түләүһеҙ атҡарылған был мәшәҡәтле эш тә һауынсылар иңенә төшә. Улар айыртылған аҡты ҙур һауыттарға бушаталар ҙа, еңдәрен төрөп ебәреп, ҡаймаҡты ҡул менән бешәләр.

Зиннурҙың әсәһе Фатима апай һауынсы. Беҙ бәләкәйбеҙ әле, яңы беренсе класҡа уҡырға төшкәнбеҙ. Дуҫым дәрестәрҙән һуң минә килә лә тупһанан уҡ яр һала, бөгөн май бешәләр, киттек ҡул яларға, ти.

Ысынлап та барып инеүебеҙгә эш яңы осланып ҡына торған була. Беҙҙе шәйләгән һауынсылар мәрәкәләп ҡаршылай:

- Фатима, ана бесәйҙәрең ҡаймаҡ яларға килде!

Ә ул терһәккә ҡәҙәр майланып, айранланып бөткән ҡулдарын алға һона:

- Бөгөн ун ҡулым Хәйҙәргә, һулаҡайы Зиннурға! Иртәгә киреһенсә булыр!

Әскелтем майлы ҡулдарҙы ентекләп яларға керешеп китәбеҙ, ә Фатима апай ҡытығы килеүҙән, эске кинәнестән рәхәтләнеп көлә...

...Ҡайтҡан һайын ирекһеҙҙән йылға аръяғына күҙ атам, ферма һарайҙары урынында кесерткән диңгеҙе тирбәлә. Балаларға ошо урында ҡасандыр һыйыр аҙбарҙары теҙелеп киткән ине, тиһәң, моғайын да, ышанмаҫтар. Һыйырҙар юҡҡа сыҡты. Мал булмағас, май ҙа юҡ.

Әгәр бөгөн: "Ағай, аҙашып йөрөгән теге һыйырҙар ҡайтты бит, ферма ла урынында, майлы ҡулдарҙы яларға ҡунаҡҡа кил әле", - тип саҡырһалар, ҡайтыр инем, билләһи, ҡайтыр инем!

## КЕШЕЛӘР ҺӘМ ҮҪЕМЛЕКТӘР

Урам буйлап етәкләшеп ҡарсыҡ менән ҡыҙ бала атлайҙар. Ауыл бәләкәй булғас, ишек алдарын, өй арттарын, баҡса буйҙарын кесерткән, әрем, шайтан таяғы, тағы ла шундайыраҡ ҡый үләндәре ябып бара инде.

Ҡыҙый юл ситенә төртөп күрһәтте:

- Был ниндәй үлән, өләсәй?

- Тилебәрән.

- Уны ныҡ ағыулы тиҙәр.

- Ағыулы шу. Ә шайтан таяғы - торғаны сәнске, кесерткән саға һалып бара. Ҡағылмаһаң-теймәһәң шыпа ла зыянһыҙҙар. Кешеләр араһында ла тар күңеллеләр, насар уйлылар етерлек. Үндайҙарға яҡынламауың хәйерле. Тейһәң, бәлә килеүен көт тә тор.

✓ *Кемдәргә ураҙа тоторға ярамай, тип тә һорайҙар. Эндокрин системаһына бәйле сирлеләрҙең, мәҫәлән, тотмауы ихтимал. Диабет менән сирлеләр ҙә тотмаҫҡа мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың күпселеге ураҙа тота.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БӘХЕТ ФӘНЕ

■ Кеше даими рәүештә бәхет тойғоһо кисереп йәшәй аламы? Бер төркөм ғалимдар ошо һорауға яуап эҙләп, "Бәхет фәне" тигән үҙенсәлекле курс үткәргән. Ул психология һәм нейробиология өлкәһендәге һуңғы йылдарҙағы асыштарға нигеҙләнгән һәм студенттарҙы бәхетле булырға өйрәткән. Йәштәрҙе тормоштоң тик ыңғай яҡтарына иғтибар итергә һәм ошо бәхетле булыу тойғоһон оҙағыраҡ һаҡларға күнектергәндәр. Уҡыу программаһы тамамланғанда унда ҡатнашыусылар ысынлап та үҙҙәрен сикһеҙ бәхетле тойған, гел шаярғылары килгән, кешеләргә ярҙам итергә теләктәре лә ҙур булған. Әммә ғалимдарҙы бер нәмә борсоған: улар ошо күңел күтәренкелеген күпмегә һаҡлай алыр икән? Быға яуап биреү өсөн улар 228 студенттың артабанғы яҙмышын 12-24 ай буйына күҙәткән. Асыҡланыуынса, кем быға тиклем тәҡдим ителгән эшмәкәрлекте, мәҫәлән, медитация, рәхмәт әйтеү практикалары, яҡындары менән аралашыуҙы дауам иткән, улар үҙенең психик торошон һаҡлай алған. "Был тренажер залына йөрөүгә оҡшаш. Беҙ тәнебеҙҙе формала тотоу өсөн унда бер тапҡыр ғына барыу етмәгәнен аңлайбыҙ. Психик сәләмәтлек менән дә шулай уҡ - уның өҫтөндә һәр ваҡыт эшләргә кәрәк", - тигән фекергә килгән ғалимдар.

■ Баланың телмәре яҡшы үҫешһен өсөн, уға бер йәш тулғансы күберәк аралашырға кәрәк. Телевизор, башҡа гаджеттар экраны иһә ата-әсә менән баланың мөнәсәбәтенә үҙ тәҫәтмәһен индерә. Бала ҡамасауламаһын өсөн был ысул яҡшы ла, әммә уның телмәре үҫешенә ныҡ зыян киләсәк. Ғалимдар 220 ғаиләне күҙәтеп, шуны асыҡлаған: бала ни тиклем телефонға йышыраҡ текәлеп ултырған, ғаилә ағзалары менән ул шул тиклем аҙыраҡ аралашҡан һәм уның һөйләшеп китеүе лә һуңыраҡ булған. Был балаға һөйләшеп китеү өсөн тере аралашыу кәрәклеген тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Сөнки үҙ-ара һөйләшкәндә генә эмоциональ бәйләнеш барлыҡҡа килә, бала һорауҙар бирергә, яуап алырға өйрәнә. Ә йәнһүрәттә ул күҙәтеүсе генә, башҡаларҙың диалогын тыңлап ултырыу уның үҙенең телмәрен үҫтермәй.

■ Кешенең эшенән арыуын билдәләүсе халыҡ-ара стандарт юҡ. Шуға ла эш биреүселәр ҙә, хеҙмәткәрҙәр үҙҙәре лә был тороштоң симптомдарына бөтөнләй иғтибар итмәй, тигән фекерҙә ғалимдар. Хроник сирҙәрҙе өйрәнеүсе бер төркөм ғалимдар үҙенсәлекле диагностик тест уйлап тапҡан. Был ярҙам талап ителгән хеҙмәткәрҙе ваҡытында асыҡлау өсөн кәрәк, ти улар. Тест төп 4 факторҙы күҙ уңында тота: тиҙ арыу, кешенең башҡалар менән аралашыуҙан ҡаса башлауы, аңғәмәләргә ҡушылып китә алмауы, эмоциональ тайпылыштар. Был һынауҙы үткәндә хеҙмәткәрҙәр ғәҙәттә үҙенең эштән арыуы, энтузиазм кеүек тойғолар кисермәүе, иғтибар туплай алмауы, ваҡиғаларҙы ныҡ ауыр кисереүе һәм уларға эмоциональ яҡтан ныҡ ярһып китеүе кеүек билдәләрҙе атаған. Быңдай хистәр кисерәһегеҙ икән, мотлаҡ иғтибар итергә кәрәк, сөнки эмоциональ арыу йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә, йәрәхәт алыу хәүефе артыуына, йоҡо менән бәйле проблемаларға килтерә. Әлеге мәлдә был тест 30 илдә ҡулланыла. Диагноз ҡуйырға ярҙам иткән был инструмент ышаныслы булһа ла, ул бары тик булған билдәләрҙе генә асыҡларға ярҙам итә һәм барыбер табип консультацияһына мөрәжәғәт итергә кәрәк, тип иҫкәртә белгестәр.

ВРАЧ КӘҢӘШЕ

# УРАҘА - УЛ ЕҢЕЛ СТРЕСС,

## ә стресс организмдың көс-ҡеүәтен арттыра

**Ураҙа тота башлауға күп быуаттар үтһә лә, уның файҙаһын донъя ғалимдары егермense быуатта ғына раҫланы. Әйтергә кәрәк, асығыуҙың, ураҙаның файҙаһы тураһында асыш яһаған ике ғалим да Нобель премияһына лайыҡ булды.**



Тәүге асышты Бельгия ғалимы Кристиан де Дюв 1963 йылда ҡомаҡтарҙа тәжрибә үткәргән саҡта яһай. Ул күҙәнәктәр эсендә майҙы, аҡһымды, углеводты эшкәрткән тәҙәләш туҡымаһы барлығын асыҡлай, был үҙенсәлекле туҡыма хатта зарарланған күҙәнәктәрҙе лә "ашай" икән. Уға аутофагия-лизосома тигән исем бирелә. Кәрәкмәгән, зарарлы компоненттарҙан таҙарыныу организм өсөн бик мөһим. Мәҫәлән, ул яман шеш ауырыуҙарынан ҡотолоуҙың бер ысулы ла. Ашауҙан туҡтап торған саҡта лизосома әүҙемләшә һәм ағыулы күҙәнәктәрҙе "йота" башлай.

Тап япон ғалимы Осуми ашауҙан туҡтап тороу, тыйылыу аутофагияға көс биргәнен, уны әүҙемләштереүен раҫлай. Ошо тикшеренеүҙәр нигеҙендә ул интервал менән асығыу системаһын уйлап сығара, донъяла бөгөнгө көндә ул иң танылған асығыу системаһы булып тора. Унда ҡатнашыусылар тәүлегенә һигеҙ йәки ун ике сәғәт ашамай торалар. Бына ошо ике ғалимдың асыштары ураҙаның фәнни яҡтан ни тиклем файҙалы икәнен аңларға ярҙам итте.

Ураҙа организмда матдәләр алмашыныуын тәьмин итеүсе эндокрин системаһына ыңғай тәьсир итә. Был осраҡта беҙ һимереү мәсьәләһенә ҡағылырға тейешбеҙ. Һимеҙлектән ҡотолоу тураһындағы һорау күптәрҙе борсой. Хирургтар хатта самаһыҙ ауырлыҡтан ҡотҡарыр өсөн һимеҙ кешенең ашҡаҙанын бәләкәйләтергә, йәғни дүртән бер өлөшөн ҡырҡып алырға мәжбүр. Хирургия ул ниндәйҙер кимәлдә хәүефле лә. Ә ашҡаҙан бит һауыт һымаҡ, шуға ла ураҙа мәлендә кесерәйә ала. Быны бөтә ураҙа тотоусылар ҙа яҡшы белә, сөнки ураҙа аҙағында улар бөтөнләй аҙ ашай башлай. Ашҡаҙан бәләкәсәйгәс, тән ауырлығы ла кәмей. Был ғына түгел, сирҙәр юҡҡа сыға башлай, мәҫәлән, холестерин, ҡан баҫымы нормаға килә, шәкәр түбән төшә. Инсульт ҡурҡынысы кәмей. Әле беҙ атаған тап шул сирҙәр кеше һаулығына, ғүмер оҙайлығына, уның сифатына йоғонто яһай. Бына шуға ла ураҙаның әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Ураҙа мәлендә ниндәй ризыҡ ашарға кәрәк, тип һорайҙар. Мин бында көндәлек ашаған файҙалы ризыҡғыҙҙы ашағыҙ, ураҙа бер нәмә менән дә айырылмай, тип яуап бирәм. Йәшелсә, емеш-еләк, ярма, икмәк - бына шулар. Аҡһым менән май, ҡалған яртыһы - углевод. Ризыҡ күҙәнәкле туҡымаға бай булырға тейеш. Һыу йәки хөрмә менән ауыҙ асабыҙ, ә быны мөһимлеген Бәйғәмбәребеҙ ҙә әйтеп ҡалдырған. Ураҙа тотҡан кеше иң элек үҙен һыу менән туйындырырға тейеш, тип уйлайым. Быны өсөн ике стакан һыу эсергә тәҡдим итәм. Унан инде үҙебеҙҙе тиҙ генә һеңдерелә торған глюкоза менән туҡландырыу кәрәк, хөрмә тап шундай емеш булып тора. Хөрмә көс-ҡеүәт, яҡшы кәйеф бирә. Унан инде намаҙға баҫыу зарур. Намаҙҙан һуң, туҡлыҡлы итеп ашап алабыҙ. Алда әйткәнемсә, файҙа бирә торған тәғәм - йәшелсә-емеш, еләк, ярма. Ҡатындар күберәк бутҡа ярата. Ирҙәр ит, балыҡ ашай. Ҡатмарлы углевод мотлаҡ рационда булһын, ябай углеводтан айырмалы рәүештә, ул яй һеңдерелә, кеше тиҙ генә асыҡмай. Ә дөйөм алғанда, туҡланыу буйынса ниндәйҙер ҡаты талап юҡ.

Кемдәргә ураҙа тоторға ярамай, тип тә һорайҙар. Эндокрин системаһына бәйле сирлеләрҙең, мәҫәлән, тотмауы ихтимал. Диабет менән сирлеләр ҙә тотмаҫҡа мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың күпселеге ураҙа тота. Бик ауыр сирлеләргә генә тыйылырға кәрәк. Ишемик ауырыуҙар тураһында шулай тип әйтер инем. Ә былай статистика уларҙың да ураҙа тотоуын күрһәтә. Кешенең эске ынтылышы, хәләте шулай икән, беҙҙең уларҙы тыйырға хаҡыбыҙ юҡ. Бөйөр сирлеләр шулай уҡ үҙҙәре хәл итә. Алда атаған ауырыуҙарҙың кәйефен һәм теләген иҫәпкә алып, Рәсәй диабет ассоциацияһы 2021 йылда ураҙа тотоу буйынса система эшләне.

Ураҙа тотҡан кешеләргә минералдар балансын һаҡлау кәрәк. Ярма, һөт ризыҡтары, йәшелсә, емеш-еләк, балыҡта, иттә улар етерлек.

Һыу балансы - иң мөһиме, шуға ауыҙ асыуҙы һыу эсеүҙән башлағыҙ, тип тәҡдим итәм. Һыу тын алған саҡта ла, тире һәм бөйәр аша ла сыға, тимәк, кеше көнө буйы ике ярым литрға тиклем һыуҙы юғалта. Ауыҙ асҡанда ошо юғалтыуҙы тиҙ арала һәм шул уҡ күләмдә кире ҡайтарыу кәрәк.

Ураҙаның файҙаһы тураһында әйттек. Нейробиологтар: "Ураҙа - ул еңел стресс, ә еңел стресс организмдың көс-ҡеүәт туплауын тиҙләтә", -тигән фекер әйтә. Асығыусылар тормошон даими күҙәтеүҙә тотҡан ғалимдар уларҙа нейрондарҙың үҙ-ара бәйләнеше ныҒыуын теркәгән. Бәйләнеш ныҒыуы мейе эшмәкәрлегенең шәп эшләй башлауын аңлата. Ҡайһы бер нейробиологтарҙың ифтар алдынан кешеләрҙең теремекләнеп китеүен күрәләр, был теремеклек иһә уларҙа асығыу һынауын үтә алыуҙан барлыҡҡа килә. "Енеү" гормоны әүҙемләшә. Былар барыһы ла нервы системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта.

**Ләйлә ФӘРХЕТДИНОВА, профессор, медицина фәндәре докторы.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ЯҘҒЫ ТУҠЛАНЫУ



**Миҙгелгә ҡарамай, һәр кеше көн һайын ярма, аҡһым, емеш-еләк, йәшелсә, үҫемлек майҙары һәм теләге булһа, һөт ризыҡтары ашарға тейеш. Яҙын майлы ит, фарш, кондитер изделиелары, фастфудты кәметеү кәрәк.**

Кеше көн буйына 5 өлөш төрлө йәшелсә йәки емеш-еләк ашарға тейеш, был сама менән 400 грамм. Ә бына яҙын, йәшелсәләргә ҡытлыҡ мәлендә нимә эшләргә? Нутрициолог, терапевт Надежда Шипулина билдәләүенсә, бөгөн магазинда йәшелсә, емеш-еләк йыл әйләнәһенә бар. Бынан тыш, туңдырылған, консервалаған емештәр бар. Уларҙы ла ашарға мөмкин, сөнки консервалау өсөн еләктәрҙе һәм йәшелсәләрҙе ныҡ өлгөрөп еткәс йыялар, уларҙа файҙалы матдәләр күп кенә һаҡлана. Туңдырылған еләктәр һатып алаһығыҙ икән, уларҙың шәкәр ҡушылмағандарына өҫтөнлөк бирегеҙ. Консерваларға ла шәкәр ҡушылмаған булһын, ундай мөмкинлек булмаһа, составында шәкәр иң аҙаҡҡы урында булһын. Әлеге мәлдә иң файҙалы ризыҡ булып тоҙланған кәбеҫтә тора, уны ла рационға индерегеҙ.

Март-апрелдә магазиндарҙа кәбеҫтә, йәшел һуған, кишер, пастернак, редис, сөгөлдөр, спаржа, айыу йыуаһы, авокадо, ананас, әфлисун, банан, грейпфрут, лимон, мандарин, киви һатып алып ашарға була. Теплица ҡыярының файҙаһы юҡ тимәгеҙ, уларҙың асыҡ һауала үҫкәндәренән әллә ни айырмаһы юҡ. Тәме булмауы бары тик шуның менән аңлатыла: күп кенә етештереүселәр уларҙы ваҡытынан алда өҙә, сөнки магазин кәштәһенә килеп еткәнсе уларға байтаҡ юл үтергә кәрәк. Йәшелсәләрҙе һәм емештәрҙе еҫенә һәм тышҡы сифатына ҡарап һатып алығыҙ. Ҡыяр менән помидорҙы һыуыткыста һаҡламағыҙ, түбән температура уларҙың тәмен насар йоғонто яһай.

Белгестән тағы бер кәңәш - рационығыҙ йәйғор төҫөндә булһын, йәғни ул төрлө төҫтәге ризыҡтарҙан торһон, шул саҡта организм файҙалы матдәләрҙең барыһын да аласаҡ.

✓ *Ҡар иреһен өсөн көл, янған тиҙәк һибергә мөмкинме, тигән һорау ҙа борсоһа, былай эшләүҙән дә тыйылығыҙ. Көл һибелгән урын көндәҙ иреһә лә, төнөн ашламалы ер туңасаҡ һәм кире һөҙөмтә бирәсәк.*



*БАҠСА*

# МАРТ АЙЫ МӘШӘҠӘТТӘРЕ

## Ҡарлы ҡыш - шатлыҡ

Мартта ҡар ҡалын ята, был айҙа ҡар ҙа яуыуын дауам итә әле. Баҡсаны ҡарҙан таҙартырғамы, әллә иреп бөткәнен көтөргәме?

Ҡарлы ҡыш баҡсасы өсөн шатлыҡ ул. Сөнки яҙын ҡар иреп ергә һеңә лә, ул тәбиғи дым менән туйына. Бынан һуң тупраҡтағы микрофлора уяна. Ер 15 см-ға тиклем йылынғас, ашлама өҫтәп, орлоҡ сәсә башларға ла мөмкин. Шуға ла баҡсаны ҡарҙан таҙартыуҙың кәрәге юҡ. Әммә ҡар ҡалын булһа, етмәһә, өҫтә боҙ менән ҡапланһа, көндәр ҙә болотло тороп, төндә ныҡлы ғына туңдырһа, йәшелсә сәсеү ваҡыты ла һуҙыла. Был осраҡта ҡарҙы баҡсанан сығара алаһығыҙ. Шуны ла иҫтә тотоғоҙ, закон буйынса ҡарҙы күршеләрҙең участкаһына ташларға ярамай.

Ҡар иреһен өсөн уны көрәк менән урынынан ҡуҙғатып сығырға ла була. Йылы һауа үтеп ингәнгә күрә, ҡар тиҙерәк ирей башлаясаҡ. Ҡар ҡатламын тупраҡ менән бергә ҡушып ҡаҙырға ярамай, сөнки, беренсенән, ер оҙағыраҡ йылынасаҡ һәм киблсәк, икенсенән, үҙенең файҙалы сифаттарын юғалтасаҡ. Ағастарҙың төбөндәге ҡарҙы тапарға кәрәш ителмәй, бынан да ҡар оҙағыраҡ иреп, ағастың тамырҙары ҡамасаулаясаҡ.

Ҡар тиҙерәк иреһен өсөн пленка йәки берәй материал ябырға яраймы? Юҡ, кәңәш ителмәй. Етмәһә, материал боҙ менән ҡапланып, ҡар тағы ла әйыраҡ ирейәсәк.

Ҡар иреһен өсөн көл, янған тиҙәк һибергә мөмкинме, тигән һорау ҙа борсоһа, былай эшләүҙән дә тыйылығыҙ. Көл һибелгән урын көндәҙ иреһә лә, төнөн ашламалы ер туңасаҡ һәм кире һөҙөмтә бирәсәк.

Ҡарҙың иреп бөткәнен көтмәйенсә лә сәсә башларға мөмкин. Редис, сөгөлдөр, кишер, укроп, петрушка, салатты ҡарлы түтәлгә сәсә алаһығыҙ.

Теплицаны ҡыш буйына ҡар менән тултырһағыҙ, уны нимә эшләтергә? Тупраҡтың тәбиғи микрофлораһы һаҡланһын өсөн теплицаға һалынған ҡар 30-50 см ҡалынлығынан артмаҫҡа тейеш, ти белгестәр. Юғиһә, теплицаға иртәрәк бер әйбер ҙә сәсә алмаясаҡһығыҙ, сөнки ҡалын ҡар ҡатламы оҙаҡ ирейәсәк.

## Үҫентеләрҙе айырыу

Март айында һәр баҡсасының тәҙрә төбөндә борос, томат, баклажан шытып сыға башлағандыр, моғайын. Өйҙә үҫкән үҫентеләрҙе пикировкалау ҙа төп этаптарҙың береһе булып тора. Бына ошо "пикировка" тигәне нимә һуң ул? Баҡтиһән, мотлаҡ тип иҫәпләнә лә, күптәр уны дөрөҫ башҡармай икән.

Пикировка - ул үҫентене күсереп ултыртыу. Башлыса барлыҡ культураларҙың да орлоғо ваҡ. Шуға ла ваҡытты ла, тәҙрә төбөндәге урынды ла һаҡлау маҡсатында ла уны бер һауытҡа сәсеү таралған күренеш. Әммә бер нисә аҙна үтеү менән уларҙы барыбер иркенерәк һауыттарға күсереп ултыртырға тура киләсәк. Яҡтылыҡ, дым, туҡлыҡлы матдәләр өсөн "көрәш" үҫентеләргә көс өҫтәмәйәсәк. Бына ошо бер һауытта үҫеп ултырған үҫентеләрҙе айырыу пикировка тип ҡабул ителә лә инде. Тик бының бер үҙенсәлеге бар. Күсереп ултыртҡан саҡта тамырҙың 1/3 өлөшөн семтеп ташларға кәрәк. Һөҙөмтәлә, үҫентенең тамыр системаһы нығынасаҡ һәм ул киләсәктә яҡшы уңыш бирәсәк.

Әммә һәр күсереп ултыртыуҙы пикировка тип әйтергә ярамай. Үҫентене йәлләһәгеҙ, уны бөләкәй һауытындағы тупрағы менән ҙурыраҡ һауытҡа күсереп ултыртығыҙ. Баҡсасылар араһында был ысул йышыраҡ таралған. Бүлмә гөлдәрен дә ошо рәүешле күсерергә өйрәнгәнбеҙ. Шулай уҡ ҡайһы бер культураларға пикировка килешмәй. Әйтәйек, боростоң тамырын өҙһәгеҙ икән, ул аҙаҡтан оҙаҡ ҡына "ауырыясаҡ", баклажандарҙың эре япраҡтарына дым етешмәйәсәк, уларҙың һулыуы ла бар. Тәжрибәле баҡсасылар әйтеүенсә, кәбеҫтә лә бындай пикировканы яратмай. Шуға ла уларҙы баштан уҡ айырым һауыттарға сәсеп, аҙаҡтан даими үҫә торған урынына күсереү ҡулайлы.

Ә бына томатҡа пикировка бик яҡшы тәьҫир итә. Тамыр селтәре яҡшы формалаша, был үҫентенең үҙендә лә күренә. Шулай уҡ розмарин, базилик та был ысулды үҙ итә. Астра, петуния, бәрхәт гөлә, цинниәға ла пикировка яһайҙар.

**Нисек эшләргә?** Һәр үҫентегә айырым һауыт, тупраҡ әҙерләргә. Бер нисә пар япрағы булған үҫентегә пикировка эшләргә ярай. Бер тәүлек алдан яҡшы итеп һыу ҡойорға. Үҫентене һауыттан алғас, тамырҙың 1/3 өлөшөн өҙеп алырға. Кәрәк тип тапһағыҙ, "Фитоспорин"ға тығып алырға. Әҙер тупраҡҡа ултыртырға. Томатты тәрәнерәк ултыртырға була. Етерлек итеп һыу ҡойорға. Бер аҙнаға ҡояш нуры тура төшмәгән ергә ҡуйырға.

Тик үҫентеләр ныҡ бейегәйеп китеп, пикировка яһарға өлгөрмәһәгеҙ, төп һауытта бер нисә үҫентене ҡалдырып, башҡаларын күсереп кенә ултыртығыҙ.

## Сәскәләрҙе...

Бер йыллыҡ сәскәләр сығышы менән йылылыҡ оҙайлы булған көньяҡ илдәрҙән. Шуға ла беҙҙең климатта уларҙы алдан өйҙә сәсеп үҫтереү кәрәк. Юғиһә, йәй буйы тәрбиәләп тә, уларҙың сәскә атып өлгөрмәүе, йәиһә ҡырауҙар алдынан ғына сәскә атыуы бар. Бер йыллыҡтар тип ысын мәғәнәһендә бер йыл ғына үҫкән һәм циклы унан оҙайлыраҡ күп йыллыҡтарҙы ла атайҙар. Улар икеһе лә тәүге йылда сәскә ата. Шуға ла өйҙә сәсеп, көн йылытҡас тышҡа сыҡҡан сәскәләр һеҙҙе оҙайлыраҡ ҡыуандырасаҡ.

**Антиррум, йәки арыҫлан ауыҙы.** Март башында сәселә, һәр хәлдә, апрель урталарынан ҡалырға ярамай. Тупраҡты еүешләп, орлоҡтарҙы һибергә лә, шытып сыҡҡансы һауытты пленка йәки быяла менән ҡапларға. Торф таблеткаларында үҫкән сәскәне аҙаҡтан бүлеп ултыртыуы уңайлыраҡ. Үҫентеләр 10 көндән сыға, уларҙы 1 айҙан айырым һауыттарға күсерергә. Асыҡ һауаға майҙың икенсе яртыһында сығаралар.

**Ҡытай ҡәнәфере.** Беҙҙә бер йыллыҡ булараҡ үҫтерелә. Март-апрель башында сәсергә, 5-7 көндән улар тигеҙ генә булып сыға. 3-4 аҙнанан һирәгәйтеп, кәрәк булһа, айырым һауыттарға күсерергә. Һыуыҡҡа бирешмәй, май уртаһында тышҡа сығара алаһығыҙ. Ҡәнәферҙең Геддевига тигән сорты йылыны ярата, шуға ла уны һуңыраҡ, ҡырауҙар бөткәс сығаралар.

**Гелихризум йәки үлемһеҙ сәскә.** Мартта тупраҡҡа 5 мм тәрәнлектә сәсергә, тик һыуҙы пульверизатор менән генә һибергә. Даими үҫәсәк урынына май урталарында күсерергә.

**Астра.** Төрлө төҫтәге, формалағы бер йыллыҡ сәскә. Бик матур булһа ла, уның һуң ғына сәскә атыуы арҡаһында күптәр сәсеп тә тормай. Март урталарында сәсергә. Тупраҡты мотлаҡ дезинфикацияларға, һуңынан фитоспорин һибергә, юғиһә астраны ҡара аяҡлы бәшмәк һәләк итергә генә тора. Ҡом ҡатнаш тупраҡты ярата.

**Петуния.** Был сәскә һуңғы ике тиҫтә йыл һәр баҡсасының яратҡан үҫентеһенә әүерелде. Үҫтергән кеше белә, башта ул шытып сыҡмай, шытып сыҡһа, үҫә алмай аптырата, әммә үҫеп китһәме - ҡайҙа ҡуйырға белмәҫһегеҙ. Шуға ла уны әрһеҙ сәскә тип тә әйтәләр. Орлоғо ҡиммәт кенә тора, шуға ла һәр береһенең шытып сығыуы үҙе ҡыуаныс. Был ҡыуаныс оҙаҡҡа барһын өсөн тупраҡты фитоспорин менән эшкәртеп тороғоҙ, юғиһә ана шул ҡара аяҡлы бәшмәк тә был сәскәне ярата. Фитоспорин һатып ала алмаһағыҙ, дарыуханала һатылған күмер таблеткаларын алып, онтап, һибеп сығығыҙ.

Бик оҫта баҡсасылар петуния сәселәсәк тупраҡты ныҡ итеп төйә, сөнки йомшаҡ тупраҡта орлоҡтар төпкә төшөп китеп, шытып сыға алмай ятыуы бар. Тик тығыҙланған тупраҡта газ насар алышына - углекислы газ сыға, ә кислород инмәй. Шуға ла петуния үҫентеләре сыға башлау менән шырпы менән тупраҡты тишкеләп сығырға тура килер. Бер төп тирәләй 10-15 тишек яһарға. Петунияны артыҡ дым да һәләк итә. Шул уҡ ваҡытта тупраҡ саҡ ҡына кибеп киттеме, үҫентеләр ҙә юҡҡа сыға. Шытып сыҡҡан үҫентеләрҙең төбөнә ҡом, вермикулит, перлит һибеп сығыу иһә дымды һаҡларға ярҙам итер. Орлоҡто мартта мотлаҡ сәсергә кәрәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

Эште **аҡса, әйберҙәр һәм ял** тигән өлөштән башлағыҙ. Күнекмә барышында ваҡытты билдәләп барырға кәрәк. Был категория өсөн тормоштан нимә алырға теләйһегеҙ - барыһын да яҙығыҙ. Быға һеҙҙең ни бары өс минутығыҙ бар. Исемлеккә машина, сәйәхәт, йорт, коллекция әйберҙәре, ҡиммәтле әйберҙәр, килем, самолеттар, көнкүреш әйберҙәре - ҡыҫҡаһы, аҡсаға, милеккә һәм ялға бәйле бөтә нәмәне яҙығыҙ.

Исемлеккә индергән нәмәләрҙең хаҡы мөһим түгел - башығыҙға нимә килә, барыһын да яҙығыҙ. Барлыҡ варианттар ҙа бер үк ваҡытта йәшәй. Һәм хыялығыҙҙы сағыу, төҫлө итеүҙән оялмағыҙ. Йәиһә өйөгөҙҙә һаман аҡлы-ҡаралы телевизор ултырамы? Эшләй башлағыҙ!

Артабан икенсе - мөйөшөнә **шәхси үҫеш** тип яҙылған ҡағыҙҙы алығыҙ. Инструкция шул уҡ. Шәхси үҫешегеҙгә бәйле барлыҡ, хатта башҡа һыймаған, хыялдарығыҙҙың исемлеген яҙыр өсөн ни бары өс минут ваҡытығыҙ бар. Бер ниндәй сикләү юҡ! Башлағыҙ!

Өсөнсө категория - **проекттар.** Был категорияға һеҙҙең тормоштағы ысын ролегеҙгә бәйле профессиональ проекттар инә, ә мәғәнәһеҙ көндәлек эшегеҙ түгел. Мәҫәлән, компания булдырыу, хәйриә фонды ойоштороу, китап яҙыу, музыкаль компакт-диск сығарыу, өй һалыу, мәктәп асыу - үҙегеҙгә нимә оҡшай. Тәрән итеп тын алығыҙ ҙа яҙа башлағыҙ. Һеҙҙең ни бары өс минутығыҙ бар!

Дүртенсе категория - **кешеләр һәм тормош.** Бында инде башҡа йән эйәләре менән бәйле барлыҡ маҡсаттарығыҙҙы һанарға кәрәк: бала табырға йәки уллыҡҡа алырға, йорт хайуанын алып ҡарарға, әләсәйегеҙ йәки олатайығыҙ тураһында хәстәрлек күрергә, ойошмаға яҙылырға, никахҡа инергә һ.б. башланыҡ - өс минут тураһында онотмағыҙ!

Һуңғы категория - **рухиәт.** Был, моғайын, иң ауыр эштер, әммә ул тигеҙлек, уңыш өсөн мөһим шарттарҙың береһе. Мәҫәлән, остазығыҙ менән танышырға, Аллаһы Тәғәләгә юлығыҙҙы табырға, изге китаптар уҡырға, медитация менән шөғөлләнергә һ.б. Уйланырға өс минутығыҙ бар!

## Лазерҙар йәки электр лампочкалары

Хәҙер һеҙҙең ҡулығыҙҙа хыялығыҙҙың исемлеге бар. Улар, ысынлап та, бик ҙур хыялдар тип ышанам. Ҙур хыялдар һеҙҙе илһамландырырға һәм ҡурҡытырға тейеш. Әгәр улар һеҙҙе тулҡынландырырға мәжбүр итмәһә, тимәк, улар ул тиклем ҙур ҙа түгел.

Беҙгә нимәләр һайлап алырға кәрәк, уға тиклем, даими рәүештә энергияғыҙҙы бушҡа сарыфларға мәжбүр иткән башығыҙҙағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ уйҙар менән идара итергә өйрәнергә кәрәк. Мәҫәлән, һеҙ урамда ҡыҙыл йәки йәшел сәсле кешене күрәһегеҙ ҙә, ҡапыл бәҙрәханаға барырға ваҡыт еткәне иҫегеҙгә төшә, шунан ҡапыл ғына хлор күп булған бассейнда һыу ингәндән һуң киленегеҙҙең ҡапыл сәсе йәшкелтҡә әйләнеүен иҫләйһегеҙ, шунан кесе йома бөләкәй улығыҙҙың йөҙөү буйынса күнекмәһе икәнлеге иҫегеҙгә төшә һәм ваҡыт буйынса ул теннис күнекмәһенә һуңлаясағын аңлайһығыҙ. Шулай уҡ уны икенсе секцияға яҙҙырырға онотмаҫҡа кәрәк, тағы... тағы...

## Етте!

Һеҙҙең һәр көнөгөҙ 78 кисектергеһеҙ эштән башлана, һеҙҙе даими рәүештә телефон шылтырауы алырғыта, электрон почтағыҙ хат килеүен белдереп тауыш бирә; ҡырҡҡа ярылырҙай булаһығыҙ һәм ни өсөн эшегеҙ яй барыуына аптырайһығыҙ. Тиҙлекте арттырырға кәрәк. Ябай лампочка булыуҙан туҡтап, лазерға әйләнергә ваҡыт.

Пьер МОРАНСИ.



## 25 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. (16+).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.00 Премьера. "Александр Проханов. Исповедь". (18+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Васнецова". Т/с (12+).
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.45 "Морозова". Т/с (16+).
04.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). (12+).**
**14.45, 17.45, 18.15, 04.00 Интервью. (12+).**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Этно-краса". (6+).**
**15.30 Преград. Net. (6+).**
**15.45 "Нурбостан сәйәхәте". М/с (6+).**
**16.00 Башҡорттар. (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00 Специальный репортаж. (12+).**
**18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00, 03.30 Тайм-аут. (12+).**
**23.00 Золотой фонд Башкирского телевидения. (12+).**
**23.45 Письма солдатам. (12+).**
**00.00 Бәхетнамә. (12+).**
**01.30 Спектакль "Мою жену зовут Морис". (12+).**

## 26 МАРТА ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Футбол не хоккей". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Васнецова". Т/с (12+).
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.45 "Морозова". Т/с (16+).
04.38 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". (12+).**
**10.45 Новости СВО (на рус. яз).**
**11.00, 23.00, 03.30 Автограф. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 18.15, 23.30, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Тайм-аут. (12+).**
**12.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". (6+).**
**15.45 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**16.00 "Бай". (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00, 23.45 Письма солдатам. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**01.30 Спектакль "Зятек". (12+).**

## 27 МАРТА СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". (16+).
02.25, 03.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". (16+).
04.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Васнецова". Т/с (12+).
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (16+).
03.45 "Морозова". Т/с (16+).
04.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Сәләм".**
**10.00 Күстәнәс. (12+).**
**10.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**10.45, 13.45, 17.45, 04.00 Интервью. (12+).**
**11.00 "Дорога к храму". (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. (16+).**
**12.00 Дознание. (16+).**
**12.15 Специальный репортаж. (16+).**
**12.30, 03.00 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 "КультУра". (6+).**
**15.30 МузКәрәҙ. (6+).**
**16.00 Автограф. (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**18.00 Тормош. (12+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Историческая среда. (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**01.30 Спектакль "Девушка с монистами". (12+).**

## 28 МАРТА ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 03.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
18.05 "Мужское / Женское". (16+).
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". (16+).
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Такси под прикрытием". Т/с (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Пусть не говорят, пусть читают". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". (16+).
02.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Свидетели Эйзенштейна". (16+).
03.06 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
03.56 ПОДКАСТ.ЛАБ "Футбол не хоккей". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 "Наши". (12+).
16.30 "Малахов". (16+).
21.20 "Васнецова". Т/с (12+).
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.05 "Тайны следствия". Т/с (12+).
03.45 "Морозова". Т/с (16+).
04.39 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. (12+).**
**10.30 Специальный репортаж. (16+).**
**10.45 История одного села. (12+).**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 16.15, 17.00, 04.00 Интервью. (12+).**
**12.00 Историческая среда. (12+).**
**12.30, 03.00 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 00.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Сулпылар. (6+).**
**15.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**16.00 Дознание. (16+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.15 История признания. (12+).**
**17.45 Криминальный спектр. (16+).**
**18.00 Башҡорттар. (6+).**
**19.00, 20.30, 04.15, 05.15 Телецентр. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**22.00 Республика LIVE #дома. (12+).**
**23.00 Колесо времени. (12+).**
**01.30 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". (12+).**

## 29 МАРТА ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 Телеканал "Доброе утро".
09.00, 16.00 Новости.
09.05 Премьера. "АнтиФейк". (16+).
09.45 "Жить здорово!" (16+).
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. (16+).
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". (16+).
16.15 "Мужское / Женское". (16+).
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. (16+).
19.45 "Поле чудес". (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. (12+).
23.30 "Матадор". (16+).
00.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". (16+).
01.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". (16+).
02.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". (16+).
02.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". (16+).
03.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". (16+).
04.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". (16+).
04.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 05.10, 05.41, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 Утро России.
05.07, 05.35, 06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
09.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
09.30 Доброе утро, республика! (12+).
09.55 О самом главном. (12+).
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". (12+).
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. (12+).
16.30 Прямой эфир. (16+).
21.30 "Удивительные люди. Новый сезон". (12+).
23.55 "Истории Большой Страны". (12+).
00.55 "Королева "Марго". Х/ф (12+).
04.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". (6+).**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. (12+).**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. (16+).**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. (12+).**
**12.15, 19.45, 06.00 История одного села. (12+).**
**12.30, 04.30 Счастливый час. (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30, 04.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 01.30 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. (6+).**
**15.15 Лит-ра. (6+).**
**15.45 "Этно-краса". (6+).**
**16.00 Хазина. (12+).**
**16.45, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**17.00, 05.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**19.00 Честно говоря. (12+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Ете егет". (12+).**
**22.00 Своих не бросаем. (12+).**
**22.15 Письма солдатам. (12+).**
**23.00 Концерт Иделя Нургалина. (12+).**
**02.30 Спектакль "Караул". (12+).**

## 30 МАРТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
09.00 "Умницы и умники". (12+).
09.45 "Слово пастыря". (0+).
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". (12+).
11.05 Премьера. "ПроУют". (0+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". (12+).
13.10 "Берегись автомобиля". Кино в цвете. Х/ф (12+).
15.00 Премьера. Праздничный концерт ко Дню Росгвардии. (12+).
17.00 Премьера. "Я люблю мою страну". (0+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". (16+).
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". Часть 2-я. (16+).
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". (12+).
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". (16+).
23.00 Премьера. Феномен якутского кино в "Закрытом показе" с Александром Гордоном. Фильм "Не хороните меня без Ивана". (16+).
02.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". (16+).
03.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". (16+).
04.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". (16+).
04.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". (16+).

### РОССИЯ 1
05.00 Утро России. Суббота.
08.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
08.20 Местное время. Суббота.
08.35 "По секрету всему свету".
09.00 "Формула еды". (12+).
09.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". (12+).
14.50 "Парад юмора". (16+).
17.50 "Привет, Андрей!" (12+).
21.00 "Муж на полтора часа". Х/ф (16+).
00.35 "Я тоже его люблю". Х/ф (12+).
04.00 "Кружева". Х/ф (12+).
05.51 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**08.00 "Бай". (12+).**
**08.30 "Ете егет". (12+).**
**09.15, 19.00 Письма солдатам. (12+).**
**09.30 Новости СВО (на рус. яз). (12+).**
**09.45 Своих не бросаем. (12+).**
**10.00 Детей много не бывает. (6+).**
**10.30 Елкән. (6+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 "Ат уйнатып. Битва командиров". (6+).**
**11.45 Апчхи. (6+).**
**12.00 Сулпылар. (6+).**
**12.30 Күстәнәс. (12+).**
**13.00 "Эльбрус". Д/ф (12+).**
**13.30 Башҡорттар. (6+).**
**14.00 Дарю песню. (12+).**
**16.00, 04.45 Колесо времени. (12+).**
**17.00 Концерт Национального оркестра народных инструментов в Шаляпинском зале УГИИ им. З. Исмагилова. (12+).**
**18.15, 20.15, 06.15 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**19.15, 02.45 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**20.00 Сәңгелдәк. (6+).**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. (12+).**
**21.30, 06.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 03.30 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.30, 04.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. (12+).**
**23.45 "Ҡурай-шоу". (12+).**
**00.15 Спектакль "Весело живем". (12+).**
**01.45 Счастливый час. (12+).**
**05.45 Аль-Фатиха. (6+).**

## 31 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00 Новости.
06.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". (16+).
06.55 Играй, гармонь любимая! (12+).
07.40 "Часовой". (12+).
08.10 "Здоровье". (16+).
09.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. (12+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. (12+).
10.15 Премьера. "Жизнь своих". (12+).
11.05 Премьера. "Повара на колесах". (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. Ко дню рождения Первого канала. (16+).
15.00 "Фабрика звезд". 20 лет спустя". (12+).
16.10 "Лучше всех!" Новый сезон. (0+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Большая история". (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. (16+).
00.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". (16+).
00.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". (16+).
01.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". (16+).
02.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". (16+).
03.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". (16+).
03.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". (16+).

### РОССИЯ 1
06.10, 01.05 "Не в парнях счастье". Х/ф (12+).
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
09.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 "Мой любимый друг". Х/ф (12+).
17.50 "Песни от всей души". (12+).
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. (12+).
02.47 Перерыв в вещании.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.30 Новости (на баш. яз).**
**07.45 "Йома". (6+).**
**08.15 Тормош. (12+).**
**08.45 "Ҡурай даны". (12+).**
**09.00 Орнамент. (12+).**
**09.15 Письма солдатам. (12+).**
**09.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**09.45, 21.15, 06.45 Специальный репортаж. (12+).**
**10.00 "Мультфильмы". М/ф (6+).**
**10.30 Книга сказок. (6+).**
**10.45 Городок АЮЯ. (6+).**
**11.00 Гора новостей. (6+).**
**11.15 Сулпылар. (6+).**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. (6+).**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). (12+).**
**13.15 "100 имен Башкортостана". (6+).**
**13.45, 05.45 Покупаем с Оксаной Масловой. (12+).**
**14.00 Дарю песню. (12+).**
**15.30, 03.15 Дорога к храму. (6+).**
**16.00 Честно говоря. (12+).**
**16.45 Открытый республиканский фестиваль-конкурс народно-патриотического творчества "Золотой кубок Башкирии". (12+).**
**19.15 Әлләсе... (6+).**
**20.00 Автограф. (12+).**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. (12+).**
**21.00 Дознание. (16+).**
**21.30, 03.45, 06.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Республика LIVE #дома. (12+).**
**22.45 Концерт Расуля Карабулатова. (12+).**
**01.15 Спектакль "Морозное дыхание метели". (12+).**
**04.30 Счастливый час. (12+).**
**05.30 История одного села. (12+).**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1445 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (15) дүшәмбе | 5:07 | 5:17 | 7:07 | 13:30 | 17:35 | 19:38 | 21:28 |
| 26 (16) шишәмбе | 5:04 | 5:14 | 7:04 | 13:30 | 17:36 | 19:39 | 21:31 |
| 27 (17) шаршамбы | 5:02 | 5:11 | 7:02 | 13:30 | 17:38 | 19:41 | 21:33 |
| 28 (18) кесе йома | 4:59 | 5:08 | 6:59 | 13:30 | 17:39 | 19:43 | 21:36 |
| 29 (19) йома | 4:56 | 5:05 | 6:56 | 13:30 | 17:41 | 19:45 | 21:38 |
| 30 (20) шәмбе | 4:54 | 5:02 | 6:54 | 13:30 | 17:42 | 19:47 | 21:41 |
| 31 (21) йәкшәмбе | 4:51 | 4:58 | 6:51 | 13:30 | 17:43 | 19:49 | 21:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Башҡортостан вәкиллеге эшен ҡәҙимгесә дауам итә. Унынң әһәмиәте уғата юғары була, хатта 1924 йылда Башҡорт Совет Халыҡ комиссариаты үҙәк менән килешеү талап иткән барлыҡ мәсьәләләрҙе вәкиллек аша хәл итә.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ВЦИК Президиумы эргәһендәге БАССР вәкиллеге булдырылыуға - 105 йыл

**Башҡортостан Республикаһы вәкиллеге тарихы 1919 йылдың 30 мартында башлана: ул "Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡорт Совет автономияһы тураһында килешеү"гә ярашлы булдырыла. Килешеүҙең 14-се пунктына ярашлы, "Башҡортостан үҙәк башҡарма комитеты һәм Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитеты үҙ вәкилдәрен (икешәр) әйтелгән учреждениеларҙың тулы хоҡуҡлы ағзалары булараҡ, уртаҡ делегат итеп ебәрә", тиелә.**

Ошо ваҡыттан алып Вәкиллек йәш республикаға көсөнән килгәнсә ярҙам итә башлай. Тәүге йылдарҙа ул Башҡортостандың административ-территориаль бүленеше, республиканы кәрәкле ҡорал, аҙыҡ-түлек, транспорт, сеймал һәм халыҡҡа кәрәкле тауарҙар менән тәьмин итеү, канцелярия һәм нәшриәт ҡорамалдары ебәреү кеүек күп төрлө мәсьәләләрҙе хәл итә. Быларҙы һаҡлау һәм алып барып еткереү өсөн вәкиллек үҙе яуап бирә, шуға 120 кешенән торған махсус ҡарауыл хеҙмәте булдырыла. Вәкиллектең 5 бүлегендә 100-гә яҡын кеше эшләй.

1919-1920 йылдарҙа Мәскәүҙә башҡа автономиялы республикаларҙың да вәкиллектәре барлыҡҡа килә һәм 1920 йылдың 22 майында РСФСР Бөтә Рәсәй ҮБК-һы уларҙы үҙенең эргәһендәге Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ Комиссариатының бүлектәренә әйләндерә. Шулай ҙа Башҡортостан вәкиллеге эшен ҡәҙимгесә дауам итә. Унынң әһәмиәте уғата юғары була, хатта 1924 йылда Башҡорт Совет Халыҡ комиссариаты үҙәк менән килешеү талап иткән барлыҡ мәсьәләләрҙе вәкиллек аша хәл итә.

1924 йылда союздаш дәүләт төҙөлөүгә бәйле РСФСР ҮБК-һы декреты менән Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ Комиссариаты бөтөрөлә. Бөтә Рәсәй ҮБК Президиумы эргәһендә автономиялы республикалар һәм төбәктәр вәкилдәре институты булдырыла, унда ике кешенән - рәйес һәм сәркәтиптән торған штат ҡарала. Әммә Башҡортостан үҙ иҫәбенә өҫтәмә рәүештә бер нисә хеҙмәт урыны булдыра һәм вәкиллектә 10 кеше эшләй. Башҡортостан вәкиллеге СССР-ҙың Халыҡ комиссарҙары советы ҡарары менән 1938 йылда ябыла.

Яңынан Вәкиллек ойоштороу кәрәклеге XX быуаттың 90-сы йылдарында килеп тыуа. БАССР Министрҙар советы 1991 йылдың 15 ғинуарында "РФ Президенты эргәһендә Башҡортостандың Даими вәкиллеген булдырыу тураһында" ҡарар сығара. 1994 йылда ул Тулы хоҡуҡлы вәкиллеккә әйләндерелә. Мәскәүҙә бындай учреждение булдырыусылар араһында Башҡортостан йәнә беренселәрҙән була.




1 — Вәкиллектең тәүге етәкселәренең береһе

2 — 1930 йылдан БАССР вәкиле

3 — Вәкиллектең тәүге етәкселәренең береһе

4 — 1920 йылдан РСФСР-ҙың Милли мәсьәләләр буйынса халыҡ комиссариатының Башҡорт АССР-ы хөкүмәте ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**10-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Саған. Йылайыр. Каста. Ҡалаҡ. Тирәк. Алтаҡта. Ҡарағай. Тимер. Ыласын. Аванс. Тал. Анонс. Уҫаҡ. Риал. Ҡорал. Сара. Аҡ. Өйҙәш. Шыршы. Әмәл. Ай. Ерек. Ун.

**Вертикаль буйынса:** Ҡарағас. Ҡарама. Ур. Ғәйсәр. Йыла. Йүкә. Ҡайын. Силәк. Тилсә. Шешлек. Сеанс. Лупа. Ҡолға. Нарта. Йөн. Тат. Аҡҡош. Имән. Екән. Кер. Салғы.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 март "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.), провинциаль проза. 16+
**27 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**28 март "Килен"** (З. Мусина) драмаһы менән Салауат ҡалаһында гастролдә. 16+
**29 март "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**30 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+
**31 март "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 март "Дейеүкәй"** (С. Лебо). 16.00 12+
**29 март "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт"** (С. Айытматов), хикмәт. 12+
**30 март "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+
**"Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+
**31 март "Чиполлино"** (Дж.Родари), мажаралар. 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**28 март "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 18.00 0+
**30 март "Ямаҡай бәпкә"** (Г.-Х. Андерсен). 14.00 0+
**Премьера! "Винни-пух"** (Д. Гараева, В. Щербакова). 12.00, 15.00 6+
**31 март "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27 март Дамир Таиповтың** концерты. 6+
**29 март Искәндәр Ғәзизовтың** концерты. 6+
**29 март "Лаунж-концерт. Фимбо".** 6+
**30 март "Музыку слушаем вместе".** Этно-әкиәт. 11.00 0+
**"Музыкальный интерактив".** 13.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**28 март "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев инсц.), балладаһы менән М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**25 март "Фронтовичка"** (А. Батурина), драмаһы менән М. Ғафури исемендәге БАТД сәхнәһендә. 12+
**27 март "Фронтовичка"** (А. Батурина), драма. 12+
**28 март "Тапшырылмаған хаттар"** (С. Әбдрәхимова), трагикомедия. 16+
**29 март "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+
**30 март "Его Величество Колобок Второй"** шаян әкиәт. 12.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 март "Гөлнара"** (Ф. Бүләков), драмаһы менән Өфөләге "Нур" театры сәхнәһендә. 12+
**30 март Премьера! "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 18.00 12+
**31 март "Как Петух мир спасал"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+
**"Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драмаһы рус телендә. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**29 март** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+
**30 март "Боронғо яҙмалар"** сара. 15.00 6+
**"Оҫта селтәр бәйләүсе"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 12+

*Туҡһан туғыҙ осраҡта ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрен ахмаҡтарса тота, әммә йөҙөнсө осраҡта ул ирҙәрҙән дә хәйләкәрерәк булып сыға.*

*(Агата Кристи).*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ТЕАТРҘАР УН КӨНЛӨГӨ

**Башҡортостан театрҙары Өфөлә үтәсәк ун көнлөктә үҙҙәренең иң яҡшы спектаклдәрен күрһәтәсәк. Программаға "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" федераль программаһы сиктәрендә ҡуйылған спектаклдәр индерелгән.**

Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай, Туймазы театрҙары спектаклдәре 25-31 мартта баш ҡалала күрһәтелә. Ун көнлөк 25 мартта А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының "Фронтовичка" спектакле менән асыла, ә 31 мартта Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының "Алһыу сәскә" спектакле менән тамамлана.

- "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә 2023 йылда 10 спектакль ҡуйылған, шул иҫәптән бишәүһе балалар театрында. Үткән йылда проектты бойомға ашырыуға 20,8 млн һум аҡса йүнәлтелгән. Шул иҫәптән "Театрҙар - балаларға" проектына 9,1 млн һум, "Бәләкәй ҡалалар театры" проектына 11,7 млн һум бүленгән, аҡсаларҙың күп өлөшө федераль бюджеттан, - тине Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Ринат Ғайсин.

Ә 2024 йылда Башҡортостанда "Кесе Ватан мәҙәниәте" проектын бойомға ашырыуға 17,5 млн һум аҡса бүленәсәк. Был Стәрлетамаҡ Рус драма театрында Гоголдең "Портрет", Салауат дәүләт башҡорт драма театрында Т. Дәүләтбирҙинаның "Һөйөү көсө", А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында А. Сәсәнбаевтың "Беҙҙең байлыҡ", Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһендә Т. Миңнуллиндың "Диләфрүзгә дүрт кейәү", Туймазы татар драма театрында С. Айтматов повесы буйынса "Әсәй баҫыуы" спектаклдәрен һәм "Театрҙар - балаларға" йүнәлеше буйынса 5 спектаклде сәхнәләштереүгә йүнәлтелә.

# МИНИСТР КОНЦЕРТ ҠУЯ

**Башҡортостандың мәҙәниәт минситры Әминә Шафиҡова юбилейы айҡанлы концерт ҡуя. Сара Башҡорт опера һәм балет театрында 29 мартта үтә.**

Пианиносы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Әминә Шафиҡова БР Дәүләт академия симфоник оркестры менән берлектә Ференц Листың оркестр менән фортепиано өсөн беренсе концертын уйнаясаҡ. Кисәлә шулай уҡ башҡа гүзәл музыкаль әҫәрҙәр ҙә яңғыраясаҡ: Башҡортостандың халыҡ артисы Артур Нәзиуллин, Башҡортостандың халыҡ һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Аҫҡар Абдразаҡов ҡатнаша.

"Лист әҫәрҙәрен мин институттың икенсе курсында уҡығанда уйнағайным. Ул саҡта мин был концертты филармонияның Бәләкәй залында башҡарҙым һәм шунан бирле уға тотонғаным юҡ. Мин оркестрһыҙ сығыш яһағайным, уҡытыусым Наилә Ғәли ҡыҙы Хәмиҙуллина ҡушылып уйнағайны. Күп йылдар үткәс ошо әҫәргә кире әйләнеп ҡайтырға булдым. Концертҡа әҙерләнер өсөн отпуск алдым", - ти Әминә Шафиҡова.

# "БӨЙРӘКӘЙ" - СӘХНӘЛӘ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында "Бөйрәкәй. I өлөш. II өлөш" спектакле премьераһы көтөлә. Әҫәрҙе театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов ҡуйған.**

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың бер быуат дауамында барған ваҡиғаларҙы тасуирлаған роман-пенталогияһы үҙәгендә Тирәкле ауылы кешеләренең тормошо. Ә спектакль әҫәрҙең тәүге ике өлөшөн үҙ эсенә алған һәм Моратовтар ғаиләһенең революция, коллективлаштырыу, Бөйөк Ватан һуғышы осорҙарындағы яҙмышын сағылдыра. Ҡара Тирәклелә башҡорт байҙары Дингеҙхан һәм Барсынбикә лә икенсе исем аҫтында йәшеренеп йәшәргә мәжбүр...

Спектакль инсценировкаһын Әнгизә Ишбулдина яҙған, ҡуйыусы рәссам - Альберт Нестеров, композитор - Рәмис Хәкимов, хореограф - Алина Мостаева, грим буйынса рәссам - Дилара Ласыгина, яҡтылыҡ буйынса рәссам Сергей Гаевой эшләгән.

# ТАПШЫРЫЛМАҒАН ХАТТАР

**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт драма театры "Тапшырылмаған хаттар" спектакленең премьераһын күрһәтте.**

Булған бит интернетһыҙ һәм кеҫә телефонһыҙ замандар. Ғашиҡтар һөйөү һүҙҙәрен бер-береһенә хаттар аша еткергән. Хаттарҙың ҡай саҡ адресатына барып етмәүен кем уйлап торһон инде! Көнсөл берәй әҙәм ғашиҡтарҙың бергә булыуын теләмәүе лә мөмкин бит әле. Әммә һәр аҫтыртын эш фашлана. Был мәкер ҙә асыла. Әммә йәш саҡтағы мөхәббәт һаҡланып ҡалғанмы? Тамашасылар был һорауға яуапты "Тапшырылмаған хаттар" спектаклен ҡарағанда табыр. Уның авторы - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сулпан Әбдрәхимова. Спектаклдең ҡуйыусы-режиссеры - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы һәм сәнғәт эшмәкәре, театр ветераны Сәлихйән Әфләтунов. Автор әйтеүенсә, уның пьесаһы "Айға менәһем килә" тип атала, ә режиссер спектаклдең исемен "Тапшырылмаған хаттар" тип алған, сөнки ул пьесаның йөкмәткеһенә нығыраҡ тап килә.

# РӘШИТ НАЗАРОВҠА...

**Өфө скульпторы Илдус Закиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Рәшит Назаровтың бюсын эшләп бөтөүен хәбәр итте.**

Бюст эскиздары Ауырғазы районы хакимиәте ултырышында Р.Назаров исемендәге Талбазы башҡорт гимназияһы уҡытыусылары, инициатива төркөмө ағзалары һәм шағирҙың туғаны З. Назарова ҡатнашлығында тикшерелде. Рәшит Назаров (1944 - 2006) - башҡорт шиғриәтенең сағыу һәм талантлы вәкилдәренең береһе, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Ғ.Ибраһимов исемендәге район премияһы лауреаты. 18 йәшендә уҡ Рәшит Назаров башҡорт әҙәбиәтендә феноменаль күренеш тип танылды. Рәшит Назаровтың әҫәрҙәре республиканың урта һәм юғары уҡыу йорттары программаларына индерелгән. Йыл һайын Назаровтың тыуған көнөндә Башҡортостанда "Назаров уҡыуҙары" - шиғри, әҙәби, музыкаль саралар ойоштороладаа. Ауырғазы районының Төрөмбәт ауылы урта мәктәбендә Рәшит Назаровтың кабинет-музейы бар. "Бельские просторы" журналы уның шиғырҙарын рус теленә тәржемә итеү буйынса ижади конкурстар үткәрә.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҺҮРӘПӘНГӘ ӘЙЛӘНМӘҺЕН

**Тел хикмәте күп һөйләүҙә түгел, самалы һүҙ ярҙамында ла мәғәнә еткереүҙә. Аҙ һүҙ ҙә бай, тәрән йөкмәткегә эйә була ала. Бына шундай һүҙҙәрҙең бер нисәһе.**

**Һөм.** Һөм "йөҙ-ҡиәфәт" тигәнгә тура килә. *Әйтемдән миҫал: Эт тиһәң, йөнө юҡ, әҙәм тиһәң, һөмө юҡ. Әрпешлек, тупаҫлыҡ - һөмһөҙлөк билдәһе.*

**Һүрәпән.** Үлән баҫҡан юл, һуҡмаҡ хаҡында электән "һүрәпән" һүҙен ҡулланып һөйләгәндәр. *Һүрәпән юлдан барыу. Урман эсенә һүрәпән һуҡмаҡ илтә.*

**Һығымса.** Русса "вытяжка, экстракт" тип йөрөтөлһә, башҡортса иһә - "һығымса". *Сәй һығымсаһы. Шифалы үләндәрҙән һығымса.*

**Һыҙыра. Һыҙырым.** Һөйләштәргә хас һүҙ. "Тына" тигәнгә тура килә. *Бер һыҙырым баҡса утаныҡ. Ял иткәс, тағы бер һыҙыра эшләрбеҙ.*

**Шулай итеп, тел хәтере һүрәпәнгә әйләнмәһен тиһәк, туған телдә һөйләшәйек, һүҙ байлығын туплайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЙҺЫҘ ТӨНДӘ...

## ҡыҙ күҙләмәйҙәр

Туҡһан туғыҙ осраҡта ҡыҙ-ҡатындар үҙҙәрен ахмаҡтарса тота, әммә йөҙөнсө осраҡта ул ирҙәрҙән дә хәйләкәрерәк булып сыға.

**(Агата Кристи).**

Хәҡиҡәт - тормошта икмәк кеүек үк кәрәкле продукт.

**(Карл Берне).**

Илай белмәгән йәш кеше - ҡырағай, йылмая белмәгән өлкән кеше - бахыр.

**(Сантаяна).**

Айһыҙ төндә ҡыҙ күҙләмәйҙәр, болғансыҡ һыуҙа балыҡ эҙләмәйҙәр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешенең тәүге бурысы - ҡурҡыуҙы еңеү. Кешенең теҙ быуындары ҡалтырағанда уның һәр эше ҡолдарса килеп сығасаҡ.

**(Томас Карлейль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Уҡытыусы эргәһенә килә һәм шулай тип зарлана:**

**- Мин бөткән кеше. Минең тормошом ҡайғыларҙан һәм ярлылыҡтан ғына тора. Эшләгән эштәрем миңә шатлыҡ та, байлыҡ та килтермәй. Мин уңышһыҙ кеше. Атай-әсәйем миңә белем бирмәне, ярҙам да итмәне, шуға ла мин наҙан һәм ахмаҡмын, шуға ла мин бер-бер артлы хаталар эшләйем...**

**Уҡытыусы был кешенең үҙ-үҙен әрләгәнен тыңлап ултыра ла, шулай ти:**

**- Эйе, ысынлап та һин өмөтһөҙ кеше...**

**- Ни өсөн? - тип аптырай кеше. Ул Уҡытыусынан йәлләү һәм уны йыуатыу һүҙҙәре ишетермен тип уйлаған була.**

**- Сөнки кеше үҙен ниндәй тип иҫәпләһә, ысынлап та шундайға әйләнә, - тип яуаплай Уҡытыусы. - Мин һине өмөтһөҙһөң тинем, һәм был - хаҡиҡәт.**

**- Миңә ни эшләргә һуң? - тип әрнеп һорай кеше.**

**- Бөтөн ғүмереҥ буйы һин үҙеңде көсһөҙ һәм бер нигә лә эшкинмәгән тип иҫәпләнең. Хәҙер инде һин быны киреһен эшлә. Быға тиклем үҙеңде эшкинмәгәнмен тип ныҡыһаң, хәҙер инде, мин шәпмен, эшкингәнмен, тип үҙ-үҙеңде ышандыр. Шунан һуң был ике фекерҙе лә ситкә ташла. Сөнки һин эшкинмәгән дә түгел, шул уҡ ваҡытта бөйөклөккә лә дәғүә итә алмайһың. Һин ҡайһы саҡта дөрөҫ эшләй, ҡайһы саҡта яңылыша торған ҡәҙимге кеше. Хәҙер һин яралы кешегә оҡшаш. Көсһөҙлөк энәһе һине ауыртыныуға дусар итә, ул ауыртыныуҙы көслөлөк энәһе менән баҫырға тырыш. Ул саҡта балаға оҡшап ҡаласаҡһың: балалар бит булдыра аламы, юҡмы икәнлеккә ҡарап тормай, бар донъяны үҙенеке итә лә ҡуя..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танығлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 111568

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.